ӘХИӘР ХӘКИМ

# ДАЛА МОҢО

***Роман***



Күпме күҙҙәр күрҙе был донъяны,
Күпмеләрҙән тағы артып ҡалыр.
Әгәр бөгөн шуны һанламаһаң,
Иртән һине күптәр ғибрәт ҡылыр...
*(Боронғо шағирҙан)*[1]

# Юл башы ("Эргәләге – алыҫ...")

Балалыҡ йылдары — ғүмерҙең мәңге онотолмаҫ наҙлы миҙгеле, тәбиғәттең ҡәҙерле бүләге. Был мәлдә баланың аңы, тубырсыҡ эсендәге тере орлоҡ кеүек, уянып ҡына килә. Донъяны күңел менән, хис-тойғо аша ҡабул итә әле ул. Ләкин бер көн килеп әүрәткес-татлы шауҡым ҡағылыуҙан йөрәге ярһып тибә башлай. Бала тирә-йүнгә ғәжәпләнеп ҡарап тора ла, тән-ағзаһын ғына түгел, йәнен дә үрә баҫтырырлыҡ көс ялалыуын тоя үҙендә.

Күңел — аң-зиһен тәҙрәһе. Тубырсыҡ асылған инде, орлоҡ, шытым биреп, ireккә сығырға ынтылған. Тубыҡтарын ҡосаҡлап яр башында ултырған ун ике йәштәрҙәге Сәйфетдин исемле малай ҙа тамыр-тарамыштарын тетрәтеп тыуып килгән ғәжәйеп көс ихтыярында ине. "Бар бит, бар миндә был көс!" — тип йылмайып уйлай ул. Оҙаҡламай уның бар булмышын текә баҫырлыҡ, хатта ҡара дауылдарға ҡаршы атларлыҡ ҡеүәт биләп алыр. Егет ҡорона инергә лә күп ҡалманы бит инде уға.

Алтын көҙҙөң күреп туймаҫлыҡ алтын кисе ине. Уйландыра, моңландыра торған мәл. Ана бит, Сәйфетдин дә, балыҡ ҡармаҡларға килеүен онотоп, хыялға бирелеп ултыра.

Хәйер, көҙ бит инде, көн дә кисәүләнә. Балыҡ сиртә буламы бындай ваҡытта. Ул ҡармаҡ сыбыҡтарын йыйыштырҙы. Һыуға батырып ҡуйылған өс-дүрт ваҡ сабаҡты, абайлап ҡына шештән һурып сығарып, йөҙҙөрөп ебәрҙе. Бар табышы шул ине. "Алдағы йәйгәсә үҫегеҙ!" — тип йылмайҙы, соңғолға сумған балыҡтарға ҡул болғап.

Онотолоп китеп, ул ҡашын төйөп уйлана ла уйлана. Уйҙың йүгәне юҡ шул: үҙе теләгән яҡҡа китә лә бара.

Боролоп ҡарамайынса ла белә, тоя Сәйфетдин: артта ерҙән тәпәш кенә убалар бүртеп сыҡҡан дала. Байып килгән ҡояш нурҙарынан алһыу-һары төҫкә инеп, монарланып ятҡан даланың сиге юҡ кеүек. Алыҫта ер менән күк тоташҡан. Шул һыҙыҡҡа барып етһәң, офоҡ аръяғында тағы ошо уҡ дала. Ҡыпсаҡ далаһы. "Беҙ — ҡыпсаҡтар бит. Шулай булғас, кемдеке был ерҙәр? Беҙҙеке. Минеке лә!.." — тип ғорурлана малай.

Ә ҡаршыла Иҙелдең бейек уң ярына уҡ урман килеп терәлгән. Эй, беләһе ине көҙ һарыһы яҙылған ҡуйы ағаслыҡ аръяғында ниҙәр барын, кемдәр йәшәүен. Кемдеке икән ул ерҙәр?..

Иҙел ҡибла тарафҡа ағыла. Бынан бик алыҫта ҙур диңгеҙ бар тиҙәр. Иҙел шул диңгеҙгә барып ҡушыла имеш. Юғала микән ни ул? Ҡыҙыҡ та, шомло ла.

Йылға аша, ағымды икегә бүлеп, алтын күпер һуҙылды. Йәл, бынабына һүнер, юғалыр инде ул, сөнки ҡояш урман артына төшөп бара.

"Иҙел һыуы аға-аға, тулҡындарын ҡаға-ҡаға, көнгә ҡарап, ҡиблаға..." — тип әсәһенән ишеткән йыр ярсығын эстән генә һамаҡлап, Сәйфетдин йылға түбәненә йөҙөп

[1]Әҫәрҙә килтерелгән бөтә шиғырҙарҙың тәржемәләре үҙемдеке (Автор).

барған кәмәләрҙәге юлсыларға көнләшеп ҡуйҙы. Рәхәттәр инде уларға. Үҫкәс, ул да, Алла бойорһа, шундай кәмәгә йә ҙур карапҡа ултырып, сәйәхәткә юлланыр әле. Иҙелде йотҡан диңгеҙҙе күрергә кәрәк бит уға!..

Эй, малай, бала саҡтың юрауҙары ҡайһы саҡта юш килеп ҡуйыуын белгән булһаң, был хыялыңды тышҡа сығармаҫ инең дә бит, күрәсәгең ошо мәлдә үк маңлайыңа яҙылды, ахырыһы. Нисәмә тиҫтә йылдар үткәс хыялың ысынға әйләнер-әйләнеүен: тап үҙең теләгәнсә, һыу юлы менән диңгеҙгә лә барып сығырһың, унан арылағы ят илдәрҙе лә күрерһең. Ләкин тамаша эҙләп түгел, ә ирекһеҙҙән ғәзиз тыуған төйәгеңдән айырылып, ҡан һауған йөрәгеңә һағыш төйнәп китерһең. Бөтә тирә-яҡ — илең. Йәненә яҡын. Тик ул һине үҙ итмәҫ...

Был хәлдәр алда әле. Хәҙергә иһә малай, аяғүрә баҫып, көн менән хушлаша. Хыялдар күпме генә татлы булмаһын, көндәлек тормош мәшәҡәтенән айырыла алмайһың. Күҙ бәйләнеп килә, тиҙерәк ҡайтырға кәрәк. Уның бит тиҫтерҙәре менән бергә төнгөлөктә ат көтөргә сығаһы бар.

Ҡыу үлән ҡыштырҙауға айбанып, артҡа боролоп ҡараһа, атаһы килеп баҫҡан икән. Ул башын сайҡап:

— Ҡана, күрһәт әле табышыңды. Көн буйы ултырғас, балыҡты байтаҡ тотҡанһыңдыр, ә? — тип көлдө.

— Юҡ, атай, ҡапмай, һирәк сиртә. — Сәйфетдин ғәйеплерәк төҫтә ҡулдарын йәйеп ебәрҙе. — Әллә һалҡындан инде.

— Ярай, бошонма, улым. Әсәйең балыҡ һурпаһы танһыҡлағас, балыҡсыларҙан барып алдым инде мин. Бер-ике һөмбаш, эре-эре биш суртан. Теге йылғырҙар ҡармаҡҡа тотмай бит, йылым менән уратып һөҙә лә ала... Әйҙә, ҡайтайыҡ. Асыҡҡанһыңдыр. Тамаҡ ялғарһың да аттарҙы көтөүгә әйҙәрһең...

Төнгөлөктә ат көтөү — үҙе бер тамаша. Төн ҡараһын ситкә ҡыҫырыҡлап, усаҡ ләүкеп яна. Утҡа ҡарап ултырһаң, күҙ алдына төрлө-төрлө күренештәр килеп баҫа, уйхыялды ҡурсытып ебәрә.

Усаҡҡа ҡоро-һары өҫтәп торорға кәрәк булған кеүек, хыял да аҙыҡҡа мохтаж. Уны яңы тәьҫораттар, ғибрәтле хәбәрҙәр йәнләндерә. Көтөүгә күҙ-ҡолаҡ булырға, малайҙарҙы ҡарап йөрөтөргә мотлаҡ берәй өлкән кеше лә сыға. Айырыуса Ирназар ҡартты түҙемһеҙләнеп көтөп ала улар. Ни өсөн тигәндә, ул йәшлегендә сауҙа каруанында һаҡсы булып хеҙмәт иткән, күп илдәргә сәйәхәт ҡылған. Хәрәзм, Сәмәрҡәнд, Таһран, Шамаха — береһе лә унан ҡалмаған, хатта урыҫ ҡалаларын күргән.

Тыныс ҡына утлап йөрөгән аттарҙы күҙәтеп әйләнә лә малайҙар усаҡ тирәһенә ҡыҫылышып ултыра. Ә аҡһаҡал хәбәр тоҡсайын сисеп ебәрә. Уның ҡыҙыҡлы хәбәрҙәре Сәйфетдин уҡыған дастандарҙа тасуир ителгән мауыҡтырғыс мажараларға үрелеп китә. Ике ҡыш мәҙрәсәгә йөрөп, уҡыу-яҙыуға өйрәнгәне бирле, ул ҡулына килеп эләккән китаптарҙы ҡат-ҡат уҡып, күбеһен ятҡа бикләп бөткәйне инде. Улының китапҡа текәлеп ултырыуын күргәндә атаһы: “Уҡы, уҡы, аҡыл арттыр. Үҙебеҙҙәге мәҙрәсәнән аҙаҡ ҡаланыҡына барырһың. Киләсәктә мулла йә мөғәллим булып китһәң, ғәжәпме ни”, — тип дәртләндереп ҡуя.

Ул тиклемен күҙаллау ҡыйын әле. Ҡыйын да, иртәрәк тә. Шуныһына шөкөр, үтеп-һүтеп йөрөгән ҡырҡтартмасылар, аршынлы мал, кейем-һалым, ваҡ-төйәк йорт-хужалыҡ монаятынан тыш, китаптар ҙа килтереп һата. Сәйфетдинден, күҙен йылтыратып, китаптарҙың әле береһен, әле икенсеһен тотоп ҡарауын, үҙенә кәрәкте һайлауын атаһы шым ғына күҙәтеп тора ла улы теләгәнде, хаҡына тормайынса, һатып ала.

Мулла булғыһы килмәй улының. Ә мөғәллимлек уға төҫ бирер кеүек. Бит бергәләп шайма-шай уйнаған, йәйгелектә балыҡ ҡармаҡлаған, төнгөлөктә ат көткән малайҙарҙың күбеһе, ун дүрт-ун биш йәшкә етеп, әлепте таяҡ тип белмәй. Китап ҡайғыһы юҡ шул уларҙа. Береһенең атаһы йә ағаһы яуҙа башын һалған, икенсеһенеке Урҙа ғәскәрендә йөрөп, хәбәрһеҙ юғалған. Төрлө сир-сорҙан үлгәндәр ҙә байтаҡ.

Көс ултырып та етмәгән йәтим үҫмерҙәр — әсәләренең, кесе туғандарының берҙән-бер таянысы. Алла теләһә, ана шул иң бәләкәстәрҙе киләсәктә уҡыу-яҙыуға өйрәтер инем, тип уйлап ҡуя Сәйфетдин. “Бәндәләрҙең бәхетһеҙлеге наҙанлыҡтан”, — ти бит мөғәллимдәр ҙә...

Ә үҙенең көндән-көн үткерләнә килгән аң-зиһене ауыл тормошонан, тереклек хәстәренән алыҫҡа, үргә ынтыла. “Их, Ирназар олатай һөйләгән илдәрҙе күрәһе, дастанхикәйәттәрҙәге ҡаһармандар һымаҡ, дала буйлап һыбай сабаһы ине”, — тип хыялын ярһыта ул. Тиҙерәк үҫергә, егет ҡорона етергә кәрәк уға. Мөғәллим булырмы, юҡмы, ә бына яуыз түрәләр менән көрәшергә бил быуасаҡ. Бигерәк тә, халыҡты талап һимереүсе яһаҡсыларҙың, ауыл ситендә ям тотоусы алайҙың һөмһөҙ йөҙбашының иманын уҡытырға кәрәк. Яман аҙҙы былар. Түләүен түләй алмаған ярлыяпандың, күп балалы тол ҡатындарҙың аҙаҡҡы һыйырын тартып ала яһаҡсылар. Зар илап ялбарған кешеләрҙең өҫтөндә ҡамсы уйнай.

Ямсы йөҙбашы ла — торғаны менән ҡараҡ. Йотата тирә-яҡты. Кемдең ҡураһында йә көтөүендә йөрөклөрәк атты күрһә, күҙен алартып: “Хан әмере!” — тип екереп, һөлөктәй аттарҙы алып китә. Билдәле булыуынса, хаҡын түләргә тейеш икән уларҙың, ә ул ауыҙын йырып: “Һинең ҡорсаңғы алашаңа етеп ашҡан!” — тип, таланған хужаға ике-өс баҡыр тәңкә һоноп мыҫҡыл итә. Атын бирмәҫкә ҡарышыусы йә һатыулашыусы кешене ҡанға туҙҙырып туҡмап китә ямсылар.

Ә бит дала халҡының бар мөлкәте, тапҡан-таянғаны — мал. Йылҡы иһә — был мөлкәттең иң ҡәҙерлеһе, иң аҫылы. Шунан яҙҙыңмы, көнитмешең мөшкөл.

Һыйыр, һарыҡ көтөүҙәрен утларға сығарҙыңмы, уларҙы үҙ ваҡытында мал тапамаған төбәктәргә, унан һыулауға өйөрөргә, эттән-ҡоштан, барымтасыларҙан һаҡларға кәрәк. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ далала быны йәйәүләп эшләүҙе уйларға ла ярамай. Етмәһә, мотлаҡ уҡ-һаҙаҡ аҫып, эйәр ҡашына һәлмәк суҡмар, биленә ҡылыс тағып, һыбай йөрөй көтөүселәр. Йылҡы өйөрҙәрен эйтергә лә түгел. Уларҙы иң көслө, иң ғәйәр егеттәр һаҡлай.

Яуҙа ла, көнитмештә лә ат — ышаныслы ярҙамсы. Шуға ла бит инде йырау-сәсәндәр атты маҡтап йыр сығара, уны ир-егеттең ҡанаты тип алҡышлай. Кешеләрҙең олоһо-кесеһе бөтәһенән бигерәк Аҡбуҙат исемле ҡанатлы толпарҙы данлаусы ҡобайырға ғашиҡ.

Иҙел буйы ҡыпсаҡтары эрелеваҡлы ауылдарҙа ултыраҡ тормошта йәшәй, иген игә, төрлө һөнәр менән шөғөлләнә. Улай ҙа, борондан килгән йоланы тотоп, малдан айырылмай улар. Көтөүҙәр йыл әйләнәһе далала йөрөтөлә, яҙ аҙағында, ер кипшенеү менән, халыҡ күскүс булып йәйләүгә сығып китә. Ҡыш яҡынлашҡас ҡына һәр кем бер-ике баш атын, һауым һыйырҙарын, һуғымға билдәләгән малын ҡураға ҡайтарып яба.

“Һыйырлының тамағы һыйлы, атлының йәне ҡанатлы”, — тигәнде йыш ишетә Сәйфетдин. Йәйләүгә сыҡҡас, оләсәһе мәрхүмә дала иңләп йөрөгән көтөүҙәрҙе күҙәтеп торор ҙа: “Тәңрем малдан айырмаһын”, — тип ҡуйыр ине. Ҡартатаһы иһә атҡа сыбырҡы йә ҡамсы менән һуҡҡанды яратмай торғайны.

Йылҡыға аяулы булыу ир-аттың ҡанында. Йыл әйләнәһенә ауылдың йылҡы өйөрөн ҡараған диуана Юландан үрнәк алырға ҡуша өлкәндәр йәш-елкенсәккә.

Әйтмәксе, ата-әсәһе, бөтә ғаиләһе, аралары менән бергә алыҫ йәйләүгә күсенеп барғанда юлда тыуған тиҙәр уны. Исеме лә шунан икән. Бәләкәйҙән көтөү тирәһендә уралып, Юлан мал йәнле булып үҫә, ә егет ҡорона ингәс, үҙҙәренең икеөс баш ҡына атынан тыш бөтә ауыл йылҡыһының иң ышаныслы һаҡсыһына әйләнә.

Бер мәл йәйләүҙе Иҙел түбәненән барымтасылар килеп баҫа. Бөтөн күс көтөүҙәрҙе ҡурсаларға ташлана. Яман ҡаты һуғыш сыға, ике яҡтан да байтаҡ кеше яраланып йығыла. Шул буталышта теге яуыздарҙан береһе Юландың башына суҡмар менән килтереп һуға.

Малдарҙы һаҡлап ҡала егеттәр, ләкин араларынан бер-икеһенә ай

буйы дауаланып ятырға тура килә. Ә Юлан ғүмерлеккә диуана булып ҡала.

Шуныһы ғәжәп, йыл буйы ирәүәнлектә йөрөп, ҡырағайға әйләнеп бөткән уҫал аттар хатта эйәләренә баш бирмәй, ә Юланды үҙ итә. Ауыҙ эсенән ниҙер һөйләнеп, өйөрҙөң уртаһына барып инә лә был, хужаһы күрһәткән атты бер мәшәҡәтһеҙ тота ла ала. Нуҡталағас, уны ялынан һыйпап, муйынынан ҡосаҡлап иркәләй, үҙенең наҡыҫ ризығынан өлөш сығарып, ауыҙына икмәк һыныға ҡаптыра.

"Йылҡының телен беләә ул. Атҡа сыбыртҡы йә ҡамсы менән һуғыу түгел, киҙәнмәй ҙә", — ти Ирназар ҡарт. Шунан, мауығып китеп, атҡа бәйле төрлө ғибрәтле хәлдәрҙе һөйләргә керешә. Имештер, был тирәләге йылҡы малы борон-борон замандарҙа ҙур күлдән эркелеп сыҡҡан өйөрҙән үрсеп таралған.

— Урал тауҙары яғынан килгән "Заятүләк менән Һыуһылыу" тигән ҡиссаны ишеткәнегеҙ барҙыр моғайын? Унда ана шул тарих та бәйән ителә, — тип хәбәрен нығытып ҡуйҙы ҡарт.

— Эйе, мин ул ҡиссаны өләсәйемдән ишеткәйнем, — тине Сәйфетдин.

— Зирәктең дә зирәге инде һин, белмәгәнең юҡ! — Ирназар олатай, уны башынан һыйпап, һүҙен дауам итте. Малайҙар уға тағы ла яҡынырыраҡ йылышты. — Күлдән сыҡҡан аттар тәүге мәлдә кешенән ҡасып йөрөй әле. Ни өсөн тигәндә, ҡырағайҙар. Аҙаҡ кешеләр уларҙы, ҡурҡытмай-өркөтмәйенсә, абайлап ҡына һил төбәктәргә, һутлы утлауҙарға бора, йыртҡыс януарҙарҙан һаҡлай башлай. Теле булмаһа ла, мал аңлай ул яҡшылыҡты! Өйөргәнде көтмәйенсә, аттар үҙҙәре үк йәйләүҙәр тирәһенә яҡынлай. Күпмеләр ваҡыт үткәс, улар йүгәнгә, эйәргә өйрәнеп китә, бәндәләрҙең иң ышанысҙы ярҙамсыһына әйләнә...

— Атһыҙ бер эш тә ҡырып булмай инде, — тип ҡуйҙы малайҙарҙың береһе.

Уға бүтәндәре лә ҡушылды:

— Һыбай йөрөү рәхәт тә, ҡыҙыҡ та!..

— Йәш аттарҙы менгегә өйрәтеү генә ҡыйын. Зыңҡытып ырғыта ла китәләр!..

— Уның ҡарауы, бәйгелә сабышыу ни тора...

Ҡарт уларҙың һүҙен ҡеүәтләп ебәрҙе:

— Әйтәм бит, аяулы булһаң, ваҡытында ашатып-эсерһәң, йылҡы малы күндәм ул, тиҙ өйрәнә. Арбаһын, һабанын да тарта, биленә эйәр ҙә һалдыра... Ә үҙебеҙ һуң, үҙебеҙ? Төрлө эшкә, һөнәргә әкренләп ылығабыҙ түгелме ни?.. Бына һин, улым, — тип ул Сәйфетдингә айырым өндәште, — китап уҡырға әүәҫ икәнһең. Мәғҡул! Үҫкәс, моғайын, яҙыу-һыҙыуҙы шөғөл итерһең әле. Тиктәҫкәме ни: "Беләге көслө берҙе йығыр, белеме ишле биште йығыр", тигәндәр?

— Әлләсе, олатай, ҡырҡтартмасылар килтергән китаптарҙы ғына уҡып сығырға ла нисәмә йыл кәрәк, — тип үкенеп ҡуйһа ла, был мәлдә Сәйфетдин үҙен ҡайҙалыр алыҫҡа, үргә саҡырыусы көс ихтыярында ине. Бәлки Ирназар олатай хаҡлылыр, белемдәлер уның йәненә ҡанат ҡуясаҡ көс?..

— Атайың һине ҙурыраҡ мәҙрәсәгә ебәрергә уйлай икән бит. Бар, бар, улым, уҡы. Мал ҡойроғона төртөлөп йөрөүсе һинән башҡа ла табылыр.

— Эйе, ул әллә ни саҡлы китапты ятҡа биклəгән. Эй, ҡыҙыҡтар! — тип бер малай телен шартлатты.

— Беҙгә лә әйтеп бирһен ине...

Ошо һөйләшеүҙән аҙаҡ, Ирназар ҡарт та өгөтләгәс, Сәйфетдин боронғо дастандарҙан бер-икеһен яттан уҡырға ризалашты. Бигерәк тә "Йософ менән Зөләйха" тигәне малайҙарҙың һушын алды.

Дастан ҙур, оҙон, тиҙ генә уҡып бөтөрөрлөк түгел. Кис һайын бер йә, күп тигәндә, ике фасылын һамаҡлай ҙа Сәйфетдин:

— Бөгөнгә етеп торор, — тип туҡтала.

Ә малайҙар:

— Их, иң ҡыҙыҡ еренә еткәс кенә... — тип үкенешә.

Улай ҙа аҙна үткәндә дастандың осона сыҡтылар ниһайәт. Былай оҙаҡ уҡыу сәбәпһеҙҙән түгел ине: күп урыны бигүк аңлашылып бөтмәй тыңлаусыларға. Уларҙың талабына буйһоноп, сеймәлсек төйөн-

дәрҙе бергәләп сисергә, ят һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡларға тырышып, баш ватырға тура килде. Дөрөҫөн әйткәндә, Сәйфетдин үҙе лә күп һүҙҙәрҙе, әйтемсәләрҙе аңлап бөтөрмәй, уларҙы ауыл теленә боробораҡ, мәғәнәһен яҡынсараҡ төшөндөрөргә мәжбүр булды.

Ошоға ҡарамаҫтан, малайҙар риза. Йотлоғоп тыңлап, ишеткәндәренә ихлас ышаналар. Китап һүҙенең ысынлығына нисек шикләнәһең. Йософтың башына төшкән ҡазаларҙан тетрәнеп, ағаларының мөртәтлегенән нәфрәтләнеп, тыңлаусылар йә шым ғына көрһөнә, күҙҙәрен томалаған йәште һиҙҙермәй генә һөртөп ҡуя, йә тыйыла алмайынса: “Ух, яуыздар! Эттәр!” — тип ҡысҡырып ебәрә...

Күп йылдар үткәс, төнгө усаҡ янындағы әңгәмәләрҙе һағынып хәтерләйәсәк Сәйфетдин. Ирназар аҡһаҡалдың ҡыҙыҡлы хәбәрҙәре, нәсихәттәре, малайҙар менән бергәләп уҡыған дастандарҙың мауыҡтырғыс мажаралары, ғибрәтле мәғәнәһе, йорт-ҡура, мал, көнитмеш мәшәҡәттәренә үрелеп, уның күңеленә аҙыҡ, йәненә терәк булғандыр ҙа әле. Өлөшөнә шулар төшмәһә, ул күпме хазинанан мәхрүм ҡалыр ине.

Ун ете йәше тулып килгәндә, Сәйфетдин, тыуған ауылы, дуҫтары менән хушлашып, Сарай ҡалаһына китте.

— Күңеленә һайрар ҡош ояланған һинең. Гел шиғыр һамаҡлап йөрөйһөң. Һаҡла был һәләтеңде. Ғәжәпме ни киләсәктә исемең үҙең китаптарын яратып уҡыған шағирҙар рәтендә урын алһа... — тип Ирназар аҡһаҡал уны оҙатып ҡалды.

## 1

Ғәребтә шәфәҡ ялҡыны һүнеп барған мәл. Мамыҡтай күперенке ҡыҫыр болоттарҙы баҙлатҡан алһыулыҡ күҙгә күренеп шиңә. Асман ҡараһыу-зәңгәр төҫкә ингән һайын, берәм-һәрәм йондоҙҙар ҡабынып йымылдаша башланы. Ер менән күк, бына-бына сиктәре юғалып, төн пәрҙәһенә төрөнәсәк. Иҙелдең бейек уң ярына уҡ килеп терәлгән урман һыҙаты ла, юйылғандан-юйылып, ҡараңғылыҡ ҡосағына һеңә бара.

Ошо моңһоу манзараны күҙәтеп, асыҡ тәҙрә төбөндә ҡарағусҡыл-ас яңаҡлы, ҡырлас танаулы алтмыш йәштәрҙәге кеше ултыра. Киске һалҡындан ҡулбашын йыйырып, ул иңенә ең остары, күкрәк тәңгәле аҫылташтар менән биҙәлгән, кеш яғалы елән һалды.

Бер аҙҙан уның ҡарашы алҡынып ағып ятҡан дарьяға күсте, ләкин унда һис ни күренмәне, сөнки төн ҡараңғыһы үҙәндә айырыуса ҡуйы ине. Бары тик бер үргә, бер түбәнгә йөҙөп үткән караптарҙан, дымһыу елгә ҡушылып, ҡойроҡсоларҙың тамаҡ төбө менән ҡысҡырып хәбәрләшеүе генә ишетелеп ҡала.

Төн — тәбиғәттең ял ваҡыты. Ер менән бергә кешеләр ҙә, йәнлек-януарҙар, ҡоштар ҙа йоҡлай. Ә тәҙрә төбөндә ултырған ҡарт ятырға уйламай әле. Таң һыҙыла башлағас ҡына әҙерәк серем итһә итер.

Күҙен секрәйтеп ҡараңғыға төксәйеп ултырыуы сәбәпһеҙҙән түгел ине уның. Аяҡтарының тартышып һыҙлауы бер хәл әле. Уныһына күнегелгән инде. Башында мең төрлө хәстәр. Шул йоҡонан яҙҙырҙы уны.

Донъя тыныс түгел. Гөрләп сәскә атып ултырған мәмләкәттәр яу аттарының тояҡ туҙанына әйләнмәктә. Тирә-яҡта дөрләгән һуғыш ялҡыны, ил сиктәренән үтеп, бынау ирәүән киңлектәрҙе лә ялмап алмаҫ тимә. Өҫтәүенә, йоҡоһоҙ ҡарттың үҙ биләмәләренең эсендә лә бола-фетнә янғыны һүрелмәй. Күпме аҡыл, түҙем, көс кәрәк илде йүгәнләп торорға. Бигерәк тә көс!..

Төндә яратмай был кеше. Ни өсөн тигәндә, көллө батын ниәттәр, боларыш орлоҡтары ҡараңғы ваҡытта шытым биреүсән. Дошман яуы ла, ғәҙәттә, төнгө сәғәттәрҙә килеп ябырыла. Ҡарт быны үҙ тәжрибәһенән белә. Ай-һай, аң булырға кәрәк!

Шуны уйлап, уның усын-уска һуғыуы булды, бүлмәгә яҡты шәмсыраҡ тотҡан йән һаҡсыһы килеп инде лә:

— Тыңлайым, ғәли йәнәп! — тине тәғзим ҡылып.

— Арсый йөҙбашын саҡыр! — тип бойорҙо ҡарт.

Йөҙбашы ишек төбөндә генә торған, күрәһең. Шундуҡ килеп керҙе лә:

— Баш өҫтө, бөйөк хан! — тип уның алдында тубыҡланды.

Баштан-аяҡ ҡоралды, алыптай ғөләмгә[1] һынсыл ҡараш ташлап:

— Ҡапҡа һаҡсыларын күреп эйлән. Нәүкәрҙәрең баҡсала туҡтауһыҙ йөрөп торһон, йоҡламаһындар! Иртән дәм алырҙар, — тине лә, "Кит", тигәнде аңлатып, ҡулы менән ишара яһаны хан.

Был ҡарт, ысынлап та, хан ине. Алтын Урҙа ханы. Хөкөмдар. Уның борсоулы ваҡытына тап килеүебеҙ өсөн Алла ярлыҡаһын беҙҙе. Әммә кеше рухы үҙе һайлаған тарафҡа ынтыла бит инде. Әҙип рухы бигерәк тә үҙаллы булырға яратыусан...

Таң атып, ҡояш һөңгө буйы күтәрелгәс кенә хан йоҡонан торҙо. "Йоҡонан" тигәс тә, ул бер сәғәт серем иттеме, юҡмы. Шунда ла нисәмә тапҡыр һаташып уянды. Тәһәрәт алып, намаҙ уҡығас, бәйҙән ысҡынған уйҙарын тыйып, иштаһа менән ашап эсте, баҡсала йөрөп эйләнде. Ләкин кәйефе һаман төшөнкө ине.

Асыҡ айуанға[2] сыҡҡас, ул арҡаһын ҡояшҡа биреп ултырҙы, күҙен Иҙелдең үрге ағымында яр яғалап йәйрәп ятҡан пайтәхеткә — Сарай ҡалаһына күсерҙе. Ҡарашы йәшелзәңгәр көмбәҙҙәргә, бейек манараларға һирпелеп уҙҙы ла ҡаршылағы урман һыҙатына төртөлдө. Мәғрур башҡалаға яу килһә, Иҙел буйлап түбәндән, йә көнбайыштағы ана шул ҡуйы ағаслыҡ артынан ябырыласаҡ. Хәйер, көнтыуыш тарафтағы Кесе Сарайҙы ла оноторға ярамай әле. Тимәк, Урҙа йөрәгенә өс яҡтан өс һөңгө тоҫҡалған. Йәнүбтә — Аҡһаҡ Тимур, ҡояш байышында — урыҫ кенәздәре, көнсығышта — тынғыһыҙ яугир, мәкерле сәйәсмән Иҙеүкәй...

"Эй, дәриғ!.. — тип көрһөндө хан. Үткер ҡарсыға күҙҙәре, бер тоҡанып, бер һүнеп, ишек алдында сырсыулап һуғыш уйыны уйнаған ейәндәренә һирпелде. — Һеҙгә лә минең яҙмышты ҡабатларға тура килер микән ни, балаҡайҙарым?.. — Үңәсен ҡытыҡлаған ҡоро йүтәлде баҫып, ул күңеленән үтмештәге гәрәсәтле ваҡиғаларҙы байҡарға кереште. — Аҡ Урҙаның башҡалаһы, ныҡлы терәге Сығнаҡтан киткәне бирле, ярты ғүмерем көмөш эйәр өҫтөндә үтте, ут-һыуҙар аша, ҡан кисеп, гел алға ынтылдым, артҡа ҡайырылып ҡарарға форсатым булманы. Йәш инем, көслө лә, сәмле лә инем! Осһоҙҡырыйһыҙ даланы иңләп-буйлап саптым, баш бирмәҫ халайыҡтарҙың ҡалаларын ҡыйраттым, ауылдарын үртәнем. Алтын Урҙа теҙгенен усҡа йомарлап тотҡаны бирле еңеү тантанаһы кисергән мәлдәрем дә, еңелгән саҡтарым да булды. Туҡтарға ярамай ине миңә. Исемемдең ишараһына ҡарамаҫтан, хәрәкәттә — бәрәкәт тип йәшәнем. Ә аҙағы? Бына алтмыш йәшем тулды. Мораҙыма еттемме? Ҡайҙа ул етеү! Тәхет яулап алған көндәрҙә ҡайны үрҙә торһам, бөгөн дә шундамын..."

Ә бит ул үҙенең боронғо бөйөк бабаһы Сыңғыҙханға, уның мәшһүр ейәне, айбарлы яугир Батуханға тиңләшергә хыяллана ине. Аҡланманы был өмөт. Хатта ҡартатаһы Үзбәк хан ҡалдырған мираҫ ауырлыҡ менән һаҡланып килә. Сихыр ҡаҙаны кеүек туҡтауһыҙ ҡайнаған фетнә арҡаһында Алтын Урҙа тарҡалыу сигендә. Бына нәмә хандың тамағында асы көҙөк, үкенес төйөнө булып ултыра.

Пайтәхеттә тыны тарыға хандың. Дүрт әсәнән тыумыш дүрт өлкән улының үҙ-ара өҙөшөүенән, тәхеткә тамшаныуынан биҙеп, ул Сарай ҡалаһынан бер фарсах[3] ерҙә генә Иҙелдең текә ярлы, йырып үткеһеҙ ҡуйы әрәмәле аулаҡ төбәгендә уҡтай төҙ ҡарағай бүрәнәләрҙән ҙур өй һалдырғайны. Ике йыл инде ошо өйҙә йәшәй. Янында бары тик иң йәш ҡатындары, кесе йәштәге улдары, ейәндәре генә. Бер нисә кәңәшсе, табибтар, сәркәтиб, мөнәжжәм[4], мусиҡа оҫталары, ашнаҡсылар бар йәнә.

---

[1]Ғөләм — ялланып хеҙмәт итеүсе яугир.
[2]Айуан – терраса.
[3]Фарсах (фарсанг) — 6-7 километр самаһы.
[4]Мөнәжжәм — йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек ҡылыусы.

Әйләнә-тирәһен биш-алты аршын бейеклегендәге бүрәнә текмә ураҡкан йорт-ерҙе хандың ҡуштандары шаяртып "Айыу өйө" тип атай. Уны тыштан ҡарауыл төмәненең[1] бер меңлек һайлам ғәскәре ҡурыҡлай. Ә ихата эсендә өйҙө ике йөҙ ғөләм — хандың эттәй тоғро арсыйҙары һаҡлай.

Сарай ҡалаһынан, Урҙаның төрлө тарафындағы ғәскәр берекмәләренән килгән сабармандар ғына түгел, хатта юғары мансаблы әмирҙәр, һанаттар ҙа тимер ҡоршаулы ҡапҡа төбөндә үк туҡтатыла. Ҡарауылханала кемдең кемлеге, ниндәй йомош менән килеүе төпсөлә. Шунһыҙ берәү ҙә эскә индерелмәй. Тәғәнә[2] уятырҙай кешеләр йә кире бороп ебәрелә, йә хатта яуапҡа тарттырыла.

Хандың улдары "Айыу өңө"нә һирәк килә. "Атайыбыҙҙы бимазаларға теләмәйбеҙ", — тиһәләр ҙә, асылда уларға башҡаланың ҡотороп шоп күңел асыу урындары ҡәҙерле. Дуҫ-иштәре менән өлфәтселек, шаушыулы мәжлес-тамашалар кәрәк йәштәргә. Ә унан да бигерәк, дүрт өлкән хanзада, үҙ-ара "ағай-ҡусты" тип сөсөләнһәләр ҙә, бер-береһенең һәр аҙымын күҙ яҙҙырмай күҙәтеп торорға, аҫтыртын-батын эш йөрөтөргә мәжбүрҙәр. Сәбәбе шул: һәр ҡайһыһы үҙен хандың вариҫы булырға лайыҡлыраҡ һанай. Бер бөгөн тыуған хәл түгел инде был. Тәхет тирәһендәге йәшерен көрәш, мәкер-айғаҡ батшаларҙы элек-электән эҙәрлекләп килгән ҡаза. Әлдә ярай хәҙергә хандың бүтән улдарынан хәүеф юҡ. Йәштәр әле улары, үҫмерлектән сыҡмағандар.

Мәмләкәттең эске идараһы хандың ышаныслы арҡаҙашы, йәштәше баш бей Аҡъял хажи иңендә. Сыңғыҙхан бөркөттәре ояһының ҡанат яҙа алмаған сибек тармағынан булыуына күҙ йомоп, хан уны, мәғлүмәтле, асыҡ зиһенле булыуына хөрмәт йөҙөнән, идара эшенә ылыҡтырҙы, бүтән һанаттарҙың буйы етмәҫ бейеклеккә күтәрҙе. Биш-алты йыл инде Аҡъял "Олуғ әмир" атамаһын йөрөтә.

Ара-тирә сырхаулап, пайтәхеттән ситтәрәк, тәбиғәт ҡосағында йәшәүҙе ғәҙәткә алһа ла, хан үҙе лә дәүләт-сәйәсәт эштәренә битараф түгел. Төп хәстәре ғәскәрҙе һаҡлауныҡытыу, тышҡы сәйәсәттең айышын билдәләү булһа ла, ул ҡаҙна, сауҙа, дин, мәҙәниәт мәсьәләләрен дә күҙҙән ысҡындырмаҫҡа тырышты. Ил тормошоноң бөтөн тармаҡтарынан хәбәрҙар булырға тейеш бит инде хөкөмдар.

Шулай уҡ кемде ниндәй юғары вазифаға тәғәйенләү, ярлыҡаубүләкләү, кемде хеҙмәттән бушатыу, хатаһына йәки ғәйебенә ҡарап яуапҡа тарттырыу кеүек эштәрҙең ауырлығын ул үҙе күтәрҙе. Баш бей тәҡдим индерә, хан быны хуплай йә, ҡайһы берҙә, кире ҡаға, төҙәтә. Был сара Аҡъялды тел-тештән һаҡлау өсөн кәрәк ине уға. Йәнә күрһен төрлө түрә-ҡара: кемгәлер рәхимлек ҡылыуымы, яза биреүме — бары тик хан ихтыярында. Уға рәхмәт уҡығыҙ, уны ғәйепләгеҙ, ә Олуғ әмиргә шик тотмағыҙ...

Башҡала менән "Айыу өңө" араһын сапҡындар йыш тапай. Берәүҙәре бынан хандың фармандарын алып китә, икенселәре ҡаланан йәки төрлө төбәктәрҙәге ғәскәр туптарынан хәбәр килтерә. Уларҙы һөлөктәй арғымаҡтарға атланған айбарлы ҡушын[3] һаҡлап йөрөй. Юлни тиклем алыҫ булмаһын, сапҡындар бер ерҙә лә туҡтарға тейеш түгел. Сыңғыҙхан заманынан бирле йәшәп килгән ҡәтғи тәртип буйынса, иң мөһим юлдарҙа һәр ете-һигеҙ фарсах һайын ям[4] тора. Хәбәрселәр күҙ асып йомған арала аттарын алмаштыра ла, туҙан йә ҡар бураны туҙҙырып алға саба. Һөҙөмтәлә ашығыс хәбәр етәһе еренә тәүлек эсендә илтеп тапшырыла.

Иң ҡатмарлы, йәшерен зарурат тыуғанда Аҡъял хажи "Айыу өңө"нә үҙе килеп етә.

"Эйе, шулай кәрәк, — тип уйлап ҡуя хан, ҡәнәғәт төҫтә йылмайып. — Һиңә ышанам, Олуғ әмир. Бөтмөрһең, ни эшкә тотонһаң да, йөй-

[1]Төмән — ун мең кешелек ғәскәри берекмә.
[2]Тәғәнә — шик-шөбһә.
[3]Ҡушын — йөҙ йәки ҡайһы берҙә ике йөҙгә яҡын яугирҙән торған ғәскәр төркөмө.
[4] Ям — ат алмаштырыу урыны. Урыҫтарҙың "ямщик" һүҙе лә ошонан килеп сыҡҡан.

сөй ҡалдырмайынса, теүәл башҡараһың. Мәгәр шуныһын да онотмайыҡ: минең ихтыярымдан тыш Иҙелдең ҡамышы ла ҡыштырҙамаһын!"

Һуңғы бер-ике йылда ил тормошо тынысланған һымаҡ. Ләкин быға алданырға ярамай. Ни өсөн тигәндә, Алтын Урҙа донъяла яңғыҙ мәмләкәт түгел. Ул дауыллы-шауҡымлы диңгеҙ уртаһындағы утрау хәлендә. Уны тынымһыҙ, яусыл ҡәүемдәр тәшкил итә. Уларҙың тәкәббер башлыҡтары, Урҙаның сураһы булараҡ, бергә ойошоп йәшәйһе урында, ситкә һибелергә, үҙаллы дәүләт төҙөргә хыяллана. Бигерәк тә үҙ һүҙле, мәкерле элекке баш сардарҙың тәхеткә яҫҡыныуы хәүефле. "Көнө килер, һине ат ҡойроғона таҡмаһаммы!.." — тип елләнһә лә, уға хандың ҡулы етерлек түгел хәҙергә.

Урҙаның мең-мең саҡырымдарға һуҙылған сиктәре лә уны йоҡонан яҙҙыра. Әле Аҡъялдың саҡырып килтерелеүе бүтән сәбәптәрҙән тыш ошо хаҡта ла фекер алышыу өсөн кәрәк ине ханға. Шуға күрә ул:

— Аҡһаҡ юлбаҫар тураһында ниндәй хәбәрҙәр бар? — тип һорау ҡуйҙы.

— Төнәгөн бер йөргөнсө Сәмәрҡәндтән ҡайтты, бөйөк хан... — Олуғ әмир әҙ генә уйланып торҙо ла: — Тимер батша ун биш төмәнле ләшкәр[1] менән Һиндостанды яуларға киткән. Яу сәфәренең ике йылға һуҙылыу ихтималы бар икән, — тип теҙҙе.

— Хәйриәт! — тине хан, ҡыуанысын йәшермәйенсә. Иңе яҙылып китте. — Былай булғас, мәйтәм, унан күпмелер ваҡыт тынып торабыҙ инде, ә? Нисек уйлайһың, Олуғ әмир?

— Һүҙең хаҡ, бөйөк хан! Йәнүбтән[2] ҡурҡыныс бөтөп тора. Ләкин ул тарафтарҙы нығытыу лазым. Форсат ҡулай... Һиндостандан ҡайтҡас, Аҡһаҡтың беҙгә ҡаршы яу асыуы бар. Теге күҙәтсе был хаҡта ундағы вазифалы кешеләрҙән ишеткән. Һинең Харәзмгә барымтаңдың ҡонон ҡайтарырға теш ҡайрай икән улар.

— Эйе, ауыҫҡал булырға ярамай! — Хан әңгәмәне ғәскәр хәленә күсерҙе. Ғәскәр — уның һәлмәк суҡмары, ҡыйғыр ҡылысы. Шул һаҡлай Урҙаның именлеген дә, тәхетте лә. — Төмәндәр мин билдәләгән урындарҙамы? Йәнүбтән башла! — тип бойорҙо.

— Тау иленең көслө ғәскәре беҙҙең Тимер Ҡапҡа[3] янындағы ике төмәнгә һөжүм иткән, ләкин тармар ителгән. Беҙҙекеләр бик күп әсир алған, ырыу башлыҡтарының, сардарҙарының улдарын аманат иткән. Яу улъяһы алдағы аҙнала пайтәхеткә ҡайтасаҡ. Биш-алты йөҙ ат, ҡорал-яраҡ...

— Мәғҡул! — тип ҡупшы һаҡалын һыйпап, хан ҡәнәғәтлек белдерҙе, хатта аяҡтарының һыҙлауын онотоп, бер тын йөрөп әйләнде. — Эйе, эйе, таулылар гел Аҡһаҡ Тимергә яҡшатланды. Күрһәтер әле ул күрмәгәндәрен, ваҡыты еткәс! Минең мәрхәмәтемдең ҡәҙерен белмәгәс, ҡылмыштарына күрә таман!...

— Һүҙең хаҡ, бөйөк хан.

— Төмән әмирҙәренә минең рәхмәтемде еткер, Аҡъял. Һәр икеһенә затлы елән, көмөш ҡынлы ҡылыс ебәр. Яу улъяһының бер өлөшөн батырлыҡ күрһәткән яугирҙәргә таратһындар.

— Баш өҫтө, ғәли йәнәп! Аманаттар бында килтерелһенме? — тине Олуғ әмир.

— Әлбиттә! Ләкин уларға йәберзолом ҡылынмаһын. Аталарына минең исемдән мәктүб юлла. Әгәр ҙә тейешле күләмдә ҡәҙимгесә яһаҡ түләп торһалар, Урҙаға йөҙ борһалар, үҙҙәренең ыҙан-йолаларын тотоп, ирекле йәшәрҙәр, аманаттар ҡайтарылыр... Бәс, хәҙер Хажитарханды[4] һөйлә!

— Унда, бөйөк хан, үҙеңдең бойороғоңа бинаән, ҙур төҙөлөш бара. Ҡаланы уратмыш кирмән нығытыла, таш биналар, мәсет-мәҙрәсәләр һалына. Хатта ғисабадтарға[5] үҙҙәренең кәлисәһен[6] төҙөргә ижазат

---

[1]Ләшкәр — ғәскәр.
[2]Йәнүб — көньяҡ.
[3]Тимер Ҡапҡа — Дербент ҡалаһы.
[4]Хажитархан — Әстерхан ҡалаһының боронғо исеме.
[5]Ғисабад — христиан динендәге кеше.
[6]Кәлисә — сиркәү, храм.

бирелде. Баҙар ғимараттары, Иҙел болағындағы карaптар туҡталышы әҙер икән инде.

— Был хәбәрең йөрәгемә май булып яғылды, рәхмәт, Олуғ әмир! — тип хан тоғро ярҙамсыһының яурынын ҡысты.

Аҡъял еңел тын тартып, һүҙен дауам итте:

— Хажитархан вәлие[1] хәбәр итә: һыу юлында сауҙа ҡыҙғандан-ҡыҙа икән. Ә Дәште-Ҡыпсаҡтан өйөр-өйөр мал ҡыуып килтерелә, Аҙаҡ[2] яҡтарынан каруандар килеп-китеп тора. Йәшәй Хажитархан.

— Афарин! — Хандың йөҙө яҡтырып китте. — Ана, күрҙеңме? Сауҙа — тәрәҡҡиәт толпары бит инде. Үҙеңә мәғлүм, алыш-биреш бар икән — яу-дауға сәбәп тә, ихтыяж да булмаусан! Шуны әйтәм, Хазар диңгеҙе аша фарсылар менән дә элемтәне яңыртаһы ине, әмир. Нисек уйлайһың?

— Был хаҡта мин Хажитархан вәлиенә фарман әҙерләнем. Үҙең хуплау менән уны сапҡын алып китер. Кисекмәҫтән Таһранға илсе ебәрергә кәрәк...

— Һай, аҡылыңдан игелек күргере! — тине хан, хуплау белдереп. — Ризамын, Олуғ әмир... Ҡана, кем бар унда?! — Шунда уҡ йүгереп килеп ингән идарасыға: — Олуғ әмирҙең иңенә сасаҡлы елән һал! — тип бойорҙо. — Ана шулай... Ә үҙеңдең берәй үтенесең бармы, әмир? Тартынма, һөйлә!

— Юҡ, бөйөк хан. Ҡылған эштәремә һинең ризалығыңды ишетеү — иң ҙур бүләк миңә, — тип яуапланы Аҡъял хажи.

— Ярай улайһа... Хәҙер Иҙел аръяғына күҙ һалайыҡ... — Хан көнбайыш тарафҡа ымлап әйәк ҡаҡты. — Ул яҡтарҙағы ғәскәрҙең хәле, торошо нисек?

— Бер төмән Сулмандың һул ярында, тағы икеһе ҡәҙимге Болғар ерендә. Өсөһө лә урыҫ кенәздәренең юлына кәртә... Унда, ваҡ-төйәк бәрелештәрҙе иҫәпкә алмағанда, һуғыш ҡурҡынысы юҡ. Киреһенсә, урыҫтар беҙҙең менән оҙайлы солох төҙөргә теләй икән. Һинән ижазат булғас та, Сарайға өс-дүрт кенәздең илселәре киләсәк.

— Һәйбәт хәбәр! — Уның һайын кәйефе күтәрелде хандың. — Эйе, эйе, урыҫтарҙың теҙгенен ҡымтый торған яҡшы. Баҫҡаҡтар ни һөйләй? Һалым киләме кенәздәрҙән?

— Баҫҡаҡтар: "Һалым йыйыу ауырлашып тора. Улай ҙа, элеккенән бер аҙ кәмеһә лә, йыябыҙ һәүетемсә", тиҙәр. — Аҡъял һиҙҙермәй генә иренен тешләп ҡуйҙы. Хан алдында артыҡ сиселеп китеү хәүефле ине. Күңелен төшөрөрҙәй хәбәрҙе бигүк ишетергә теләмәй ул. Ниңә урыҫтарҙың бер баҫҡаҡты туҡмап ҡайтарыуын әйтергә? Кәрәкмәй уныһы...

Ҡашын төйөп уйланып ултырҙы ла хан, сырайы ҡараңғыланып, иғтибарын Олуғ әмир көтмәгән яҡҡа күсерҙе. Уның:

— Кесе Сарай ҡоҙғоно ҡайһы тарафҡа осорға теләй? — тигән һорауынан Аҡъял хажи албырғап ҡалды. Ҡаушауын еңеп, тотлоғоборaҡ:

— Хәҙергә... ишетеүемсә.. шымып тора... — тип яуапланы. — Йөргөнсө әйтә... эйе, Иҙеүкәй был арала Тимер Ҡотлоҡ мырҙаға ҙур илтифат күрһәтмәктә икән. Сәбәбе...

— Сәбәбеме?.. — Хан, күҙенән ут сәсеп, уртын сәйнәне. — Беләбеҙ! Сиселмәҫтәй йомаҡ түгел уныһы. Күҙ буяу өсөн, Тимер Ҡотлоҡто хан яһамаҡсы ул! Ә аҙаҡ Урҙаны усына йомарларға, үҙе теләгәнсә идара итергә уның ниәте. Бына күрерһең, Сарайға һөжүм итәсәк.

— Мин, ғәли йәнәп, был хәүефтең алдын алыр өсөн, Кесе Сарай йүнәлешенә ике төмән ҡуйҙым. Юлы бикле Иҙеүкәйҙең, үтә алмаҫ!

Хан быны баш ҡағып хупланы ла Олуғ әмир ҡуҙғатырғамы, юҡмы тип ҡурҡып ултырған тағы бер сетереклe һорау менән уны уңайһыҙ хәлгә ҡуйҙы:

— Уғландар[3] ни эш бөтөрә?

Аҡъялдың башы әйелде, ҡарашы келәм барсаһына төртөлдө. Уғландар — хандың улдары бит инде. Ҡылыҡ-ҡылмыштары ҡайһы

[1]Вәли — ҡала башлығы.
[2]Аҙаҡ — Азов ҡалаһы.
[3]Уғлан — батша, хан улдарына әйтелгән.

берҙә әҙәп-әхлаҡ ҡалыбына һыймаһа ла, Олуғ әмир быға күҙ йоморға мәжбүр. Дөрөҫөн әйтеп, аталарының ҡәһәренә юлығыуың бар. Шуны уйлап ул:

— Кемдән башларға белмәй торам бит әле... — тип тура яуапты кисектерергә һылтау эҙләне.

— Интекмә! — тине хан, һуңғы мәлдә килеп-килеп эсен көйҙөргән асыуын усҡа йомарлап. — Мин уларҙың ҡайһы бер эштәренән бөтөнләй үк бихәбәр[1] түгелмен, һиҙәһеңдер. Әммә һинең фекереңде белеү кәрәк миңә. Әйҙә, һүҙеңде Йәләлетдин ханзаданан башла. Ул араларында иң өлкәне.

— Эйе, эйе... — Аҡъял, иҫен йыйып, яуап ҡайтарыр хәлгә килде ниһайәт. — Өлкән ханзада ғәскәр туплай, бөйөк хан, — тине икеләнеберәк.

— Ә һин кемдән башларға белмәйем тиһең. Беләһең! Атаһының иҫәнлегенә ҡарамайынса, тәхеткә ултырырға ашыға ул! Бәлки “Айыу өңөн” баҫырға уйлайҙыр?

— Юҡ, ғәли йәнәп, улай уҡ түгел...

— Йә, сурытма, асығын әйт! — тип әмирҙең һүҙен ауыҙынан алды хан. — Ғәскәр нимәгә уға?!

Аҡъял ҡаушауын еңеп өлгөрҙө.

— Мин Йәләлетдин менән һөйләштем. “Ут менән уйнайһың, ханзада”, — тигәс, ҡурҡып ҡалды. “Бүтән угландарҙың бола күтәреүе бар. Шуның алдын алыр өсөн көс туплайым”, — ти. Биш ҡушыны бар.

— Биш ҡушын... — Хан башын сайҡап уйланып ултырҙы ла: — Ҡара һин уны!.. — тип көләмһөрәне. — Ҡарауыл төмәне әмиренә минең бойороғомдо еткер: пайтәхеттә уныҡынан башҡа ғәскәр булырға тейеш түгел! Ә Йәләлетдингә әйт, ҡушындарын ҡаланан үҙ утарына күсерһен. Ҡарыша ҡалһа, ғәскәрен ҡылыстан үткәрергә!

Был боларышҡа ҡыҫылып, үҙенең ике ут араһында ҡаласағына күҙе етә ине Олуғ әмирҙең. Низағты янъялһыҙ хәл итергә кәрәклеген аңлағанға күрә, ул хандың асыуын бүтән яҡҡа йүнәлтеү әмәлен эҙләне. Ә унда бынығынан да хәтәрерәк хәлдәр бар. Ләкин дөрөҫөн әйтмәй сараһы юҡ ине әмирҙең.

— Йәләлетдин хөсөтлөккә бармаҫ, һинең һүҙеңдән сыҡмаҫ, — тип өлкән ханзаданы аҡланы ла, ҡарлыбоҙло һыуға ташланған кеүек, күҙен йомоп, иң ныҡ сырмалған сер йомғағын һүтте: — Эйе, Олуғ хан, Йәләлетдингә шик тотма. Ә бүтән икеһенән аң булырға кәрәк. Әсәләренең ағай-ҡустыларына таянып, улары үҙең тоҫмаллаған вариҫың Йәләлетдингә теш ҡайрайҙар. Ышаныслы кешеләрем шулай хәбәр итә.

— Икәүһенән? Һин йомаҡ ҡойоп ултырма, әмир, асығын әйт! Исемдәре юҡмы ни уларҙың? Ҡайһылары булһа ла, күҙ яҙҙырма! Ә өсөнсөһө кем? — Хандың битенә тимгелтимгел таптар бәреп сыҡты, тауышы сыңлап китте. — Ситкә ҡарама, күҫәкте күтәргәс, һуҡ, йәлләмә. Үҙеңә мәғлүм, балаларҙың һәр язығы эше ата бәғерен телә...

— Кисерә күр, бөйөк хан... — Аҡъял иңен тартты, тир ҡаплаған битен, муйынын ҙур ҡулъяулыҡ менән һөрттө. — Һинең балаларыңа ғәйеп ташлау еңел тиһеңме ни миңә?

— Ғәйебем булһа, уларҙы түгел, минең үҙемде лә ҡыҙғанма! Кемдәр — теге икәү?! — тип һаман төпсөндө хан.

Артабан да йәшенмәк уйнауҙың яҡшыға алып бармаясағын тойоп, Олуғ әмир:

— Хөсәйен менән Мөхәммәт ханзадалар инде, — тине тауышы шиңеп. — Һин борсолма, ғәли йәнәп, мин уларҙың йөҙ кешелек һаҡсы алайҙарынан башҡа ғәскәрен ҡарауыл төмәненә күсерҙем. Уҙына алмаҫтар...

— Күптән кәрәк ине!.. Тимәк, өсөнсөһө Кәримбирҙе була инде, ә?

— Шулай... Мәгәр... аҫ-киҫ мин ҡолонд|о, уның менән эш бик алама. Әйтеүе лә ҡыйын.

— Ә һин тартынма, әйт!

— Эйе, бөйөк хан, яҡшымыяманмы, ул да үҙ балаң бит инде. Маһипәрүәз ханбикәнән тыумыш...

— Эттән тыумыш тиһәңсе! Нуғай көсөгө[2] бит ул Кәримбирҙе. Маһиҙың бөтөн нәҫел-нәсәбе, аҙғын

---

[1]Бихәбәр — хәбәрһеҙ.
[2]Нуғай — монгол телендә “эт” тигән һүҙ, имеш.



Р. Хәнәфин һүрәте

мал һымаҡ, гел ситкә ҡарай. Йә, һуҙма, ул эт балаһы ниндәй хөсөтлөк уйлап йөрөй?

— Ғәйеплемен, бөйөк хан... — Эйелгәндән-эйелде әмирҙең башы. — Һиҙмәй ҡалдым мин уның йәшерен ниәтен. Урыҫтарға ҡасты ул.

Хан ултырған урынында сайҡалып китте, арҡаһын бейек итеп баҫтырылған мендәргә терәне, күҙҙәре ҡәһәрләнеп янды.

— Их, белгән булһам!.. Сабыйлығында быуып үлтерергә ине лә бит... — тип тешен шығырҙатты.

— Уф, Алла, бар икән күрәһеләребеҙ! — Уның һайын нығыраҡ тирләне Аҡъял. — Нисек төҙәтергә һуң был яҙыҡ эште?

— Ҡуй, бөтөрөнмә, Олуғ әмир! Серек алманың өҙөлөп төшкәне хәйерле, — тип саҡ көскә әйтә алды хан, тамағы кибеүҙән ҡыһ-ҡыһ йүткереп. Тауышын ипләгәс, күҙенән ут сәсеп, аяуһыҙ хөкөмөн уртаға һалды: — Былай ит... эйе, наян әсәһенән йомошсо тигән һылтау менән артынан шымсы ебәр Кәримбирҙенең. Ҡайҙалығын белеп, уянмаҫлыҡ йоҡо дарыуы эсерһен ул көсөккә!

Аҡъял тамам ҡурҡыуға төштө.

— Һыуын әле, зинһар, бөйөк хан! Үҙ балаң да баһа ул... — тине тауышы ҡалтырап.

— Шуға күрә был эште миңә япһар! Аяу юҡ хыянатсыға!

— Һин шулай тиһең дә бит, хәтәр эш инде...

— Хәтәр, хәтәр... Ә һин бөйөк йыһангир Сыңғыҙханды уйла. Аяғанмы өлкән улы Жучиҙы? Юҡ, аямаған! Атаһының ҡәтғи әмерен боҙоп, ғәскәрен үҙ белдеге менән урыҫ еренән сигендергән өсөн, Жучиҙы арҡа һөйәген һындырып үлтерергә бойора Сыңғыҙ бабабыҙ. Кәримбирҙе Жучи атының тиҙәгенә лә тормай!..

— Уныһы мәғлүм, — тине Аҡъял, бигүк ризалашмайынса баш сайҡап. — Сыңғыҙхандың Жучиҙы өнәп бөтмәүе йәшлегенән үк килгән. Үҙ улымы ул, әллә меркит юлбаҫарынан тыуғанмы, тип ғүмере буйы икеләнгән икән бөйөк йыһангир. Ни өсөн тигәндә, йәшлегендә Сыңғыҙхандың ҡатыны Бүртәне меркиттар урлаған. Тамам көскә кергәс, хан уларҙы тар-мар итеп, үсе ҡанғансы тураҡлап, һөйөклө ҡатынын ҡайтарып ала-алыуын, ләкин улы тыуғас күңелендә шик ярала. Жучиҙы аямауы шунан түгелме икән...

— Ул яҡтан Маһиға шигем юҡ, әмир. Мәгәр үҙе лә, туған-тыумаһы ла тәүҙән үк йортома төҫ бирмәнеләр. Нәҫел-нәҫелгә, тилсә — тамырға. Аң бул уларҙан! Маһипәрүәзгә тәғәйен сығымды икеләтә кәмет, — тине лә хан, усын уҫҡа һуҡты. Йүгереп кереп тубыҡланып баш эйгән күсә идарасыға ошо уҡ бойороҡто ҡабатлап, фарман яҙырға бойорҙо. — Бына шулай... Һаман да тиҫкәре ҡараһа, атаһы улусына Нуғай далаһына һөрәм мин уны. Ана шунда белер тәхет тирәһендә шымыраҡ йәшәү фарыҙлығын.

— Һинең ихтыярың — миңә ҡанун, ғәли йәнәп. Ни бойорһаң...

Сығырынан сығып ярһыған хан һаман тынысланa алманы, бойороҡ артынан бойороҡ яуҙырҙы:

— Маһиҙың көйәҙ ҡустыһы Тәминдәрҙән күҙ яҙҙырма, Олуғ әмир! Апаһы уны Сарай ҡалаһына вәли итеп ҡуйҙырырға ҡырталаша. Аҙна һайын мәктүб ебәреп, теңкәне ҡоротто. Арынырға кәрәк Тәминдәрҙән!

— Нисек итеп?

— Бойор минең исемдән. Сулман буйындағы төмәнгә йөҙбашы булып китһен. Шунан артығына торорлоҡ эш күрһәткәне юҡ. Ә төмән әмиренә, фарманға ҡушып, хат яҙып ебәр. Шылғаяҡ Тәминдәрҙе ханбикә ҡустыһы тип тормаһын, ҡаты тотһон.

— Бик тә гүзәл фекергә килгәнһең, ғәли йәнәп! — тип Аҡъял ҡәнәғәтлек белдереп өлгөрмәне, хан:

— Был сара эштең башы ғына, — тине, һаҡалын һыйпап. — Алыҫ сәфәрҙә ни генә килеп тыумаҫ. Ишетеүемсә, ул яҡтарҙа башкиҫәр аламансылар яман ҡотора икән.

— Ысын, аҙна һайын биш-алтыһын тотоп килтерә күҙәтсе алайҙар. Йөҙгә тулғансы ҡыҫмаға һуғып тотҡас, Хажитарханға төҙөлөш эшенә оҙатыла ул яуыҙдар.

— Тимәк... Сулман юлында Тәминдәрҙең бәләгә осрауы мөмкин түгелме ни? Хәстәрлә ошоно!

— Кисерә күр, бөйөк хан... — Аҡъял сепрәктәй ағарынып: — Ҡартаям, ахырыһы. Ҡайһы бер фекерҙәреңде аңлауҙан ғажизмын, уй-

ниәтеңдең йоҫоғон тота алмайым... Зиһенем етмәй, — тип көрһөндө.

Хандың япырай ҡаштары маңлайына һикерҙе, күҙҙәре осҡонланып ҡуйҙы. Улай ҙа тыйылды, ҡаты бәрелмәне тоғро арҡаҙашына, һүҙен уйсаныраҡ аһәңдә дауам итте:

— Башыңды күтәр, Олуғ әмир! Бына, Аҡ Урҙанан сығып китеүебеҙгә ике тиҫтә йыл үтте. Шунан бирле икебеҙ бер табандан атлайбыҙ. Һинең зиһенең етмәҫтәй маҡсат-ниәтем дә, ғәмәлем дә булғаны юҡ, сөнки бер сылбырға тағылғанбыҙ. Уны өҙөү мөмкин түгел, аңлайһыңмы? — Аҡъял ризалыҡ биреп, эйәк ҡаҡҡас: — Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ла, ил күҙендә лә сауаплы эштәребеҙ уртаҡ булған кеүек, гонаһтарыбыҙ ҙа типә-тиң! — тип фекерен осланы.

Әммә хандың һуңғы һүҙен Аҡъял күтәреп алманы.

— Һин — хөкөмдар, бөйөк мәмләкәтебеҙҙең ханы. Мин иһә һинең шәүләң генә, — тип үҙен кәртәләргә тырышты. — Ҡалайтып хандың сауаплы эштәре, шанлы еңеүҙәре уртаҡ булһын беҙгә?

— Ә гонаһтарыбыҙ?

— Һинең хеҙмәтеңдәмен. Һәр ниәтеңә тоғролоҡ һаҡлағас, ситкә тайпылмағас, гонаһлымын, әлбиттә.

— Ғәжәп! — тип көләмһерәне хан. — Сауаплы эштәребеҙ минеке генә, ә яҙыҡтары һинең намыҫта буламы инде?

— Шулай килеп сыға. Өҫтөңә ғәйеп алырға бигүк яратып бөтмәйһең бит һин... Шуны әйтәм, бөйөк хан, хәҙерге болғауыр заманда һиңә осҡор фекерле, зирәгерәк, йәшерәк ярҙамсы кәрәк. Мин күптән бирле изге Мәккәгә хажға китергә уйлап йөрөйөм...

— Әҙерәк сабыр итергә тура килер, Аҡъял. Бер тапҡыр барғайның бит инде. Хажиһың, — тине хан тыныслана төшөп. — Хаж һылтауы менән шул яҡтарға китеп юғалыусылар һинән башҡа ла күп икән... Үпкәләмә, һиңә шик тотмайым. Ҡана, бөгөн төйнәгән уйҙар ғәмәлгә ашһын әле. Аҙаҡ күҙ күрер...

— Ни ҡылайым, мин — һинең ҡолоң.

— Кәмһенмә, Олуғ әмир! Элек тә әйткәнем бар ине. Выжданың ҡабул итмәгән эштәрҙе минең исемдән эшлә, миңә япһар. Улай ҙа, ҡара уны, Кәримбирҙе менән Тәминдәргә бәйле ғәмәлдәрҙең осо сыҡмаһын! Маһи һиҙеп ҡалһа, ул яуыз һинең һымаҡ, зиһенем етмәй, тип уфтанып ултырмаҫ, ғауға ҡуптарыр... Ярай, батырға ла ял кәрәк тигәндәй, ошонда туҡталып торайыҡ. Юғиһә табын ҡараусы баянан бирле ишектән һонолоп ишара яһай. Әйҙә, рәхим ит, Олуғ әмир, тамаҡ ялғап алайыҡ. Табынды аҡ тирмәлә әҙерләргә ҡушҡайным.

Һигеҙ ҡанатлы иркен тирмә ҡиммәтле келәмдәр, затлы алтын да көмөш һауыт-һаба, төрлө ҡорал менән йыһазланған. Тәпәш кенә өҫтәлгә, һығылырҙай итеп, татлы тәғәмдәр теҙелгән.

— Һин миңә ҡарама, әмир, ризыҡҡа етеш. Ҡымыҙ эс, һыуһағанһыңдыр. Бер аҙна инде тамаҡтан яҙып торам. Табиб әллә ниндәй дарыуҙар бирә-биреүен, хәҙергә дауаһы һиҙелмәй. Тулҡаһыҙ эсем боша... — Хан, ысынлап та, бер кәсә ҡымыҙ эсте лә, исем өсөн генә тигәндәй, емеш-еләк ҡапҡыланы.

Эсе бошорлоғо бар ине хандың. Бәлә-ҡаза яңғыҙ йөрөмәҫ, тигәндәй, яҙҙан бирле уны аңлағыһыҙ сырхау йөҙәтә. Ул быны табибтан башҡа һис кемгә белдермәҫкә тырыша, сөнки һиҙелеп ҡалһа, илде йолҡҡолап бүлешергә яҫҡыныусы ырыу-улус түрәләре уғата ҡоторасаҡ.

“Сире лә сиргә оҡшамаған, хәйерһеҙең”, — тип кәмһенә хан. Һис көтмәгәндә танауынан ҡан китә, башы уттай ҡыҙа, көллө тән-ағзаһы һеңгәҙәп тәҡәтен ала. Табиб күпме тырышмаһын, ҡан туҡтатыр сара тапмай һуғыла. Туҡтатҡас, хан тамам хәлһеҙләнеп, ике-өс сәғәт хәрәкәтһеҙ салҡан ятырға мәжбүр.

Хәле арыулана төшкәс, ул асыҡ тәҙрә төбөндә ултырып, ҡарағусҡыл төҫкә кергән Иҙел тулҡындарының ашығып йүгереүен күҙәтә. Һыуҙың туҡтауһыҙ ағышы бәндә ғүмерҙәренең фанилығына ишара яһағандай тойола уға...

Аҡъял хажиҙың, ҡулдарын күкрәгенә салып, өндәшмәй ултырыуына иғтибар итмәйенсә, үҙенең ҡан тамырҙары йышыраҡ тиртә, башы ҡыҙа башлауын тойһа ла,

әңгәмәне тамамларға ашыҡманы хан. Янында Олуғ әмирҙең булыуы уға тыныслыҡ өҫтәй, дөрөҫөн әйткәндә. Яңғыҙ ҡалыу ҡыйын.

Һиҙеп тора Аҡъял да: һүҙе бөтмәгән әле уның. Әмирҙең ни уйлауын белгән кеүек, хан, уны ҡыҫтапҡыҫтап һыйлаған арала, яҡын ғына торған семәрле өҫтәлдән ниндәйҙер ҡағыҙҙарҙы үрелеп алды.

Аҡъялдың йөрәге жыу итеп ҡалды. "Әллә минең өҫтән ялыу микән?.." — тип айбаныуы булды, хан ҡағыҙҙарҙың береһен уға һондо.

— Уҡы, — тине көләмһерәп. — Бик тә ғибрәтле яҙма был.

Ҡағыҙға йәһәт кенә күҙ йүгертеп алды ла Олуғ әмир, уның үҙенә ҡағылмауын, бығаса мейеһен сүкегән ҡатмарлы хәлдәр менән дә һис ниндәй уртаҡлығы юҡлығын аңланы. Тынысланып, хандың ошондай ваҡ нәмәгә иғтибар итеүенә ғәжәпләнеүҙән аҫтан ғына көләмһерәп ҡуйҙы хатта.

— Ниңә өндәшмәйһең? Тағы зиһенем етмәй тиергә уйлайһыңмы? — Хан ҡулындағы көмөш һаплы бысаҡ менән тәрилкәгә зыңғырлатып һуғып алды. — Йә, уҡы инде. Ҡысҡырып уҡы! — тине, түҙемен юғалтып.

— Берәй мөһим хәбәрме тиһәм. Ярай, уҡыйым улайһа. Бына: "Келип улдым Сарайда шеир фидайы. Сарайның шаиры илнең гидайы..." Нимәгә кәрәк булды был һиңә? Тағы уҡыйым...

— Юҡ, башҡаһы кәрәкмәй хәҙергә. Үҙен шағирмын тигән шул бәндәнең кемлеген белергә ине. Тап һин уны! Һорарға ине, ниңә былай кәмһенә икән?

— Хәтерем яңылышмаһа, был шиғырҙың мөғәллифен[1] күргәнем бар кеүек. Исеме Сәйфулламы, Сәйфетдинме. "Сәйф Сараи" тигән тәхәллус алған икән... Бер-ике көн ваҡыт бир, ғәли йәнәп, табырмын мин уны.

— Үҙен "Сараи" тип атағас, үҙебеҙҙеке икән дә баһа!..Табыу ғына аҙ. Һин уны минең алдыма баҫтыр!

— Баш өҫтө, бойорғаныңса булыр...

— Мәғҡул! — тине хан, ҡәнәғәтлек белдереп. — Аяҡтар ойоп китте, баҡсала йөрөп алырға кәрәк. Ә теге ике яуыз менән эште тиҙләт, әмир. Үҙеңә мәғлүм, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡҡан яҡшы... — Ҡом ҡатыш ваҡ һуйырташ һибелгән һуҡмаҡтан атлаған ыңғайҙа ул кеткет көлөп ҡуйҙы. — Анау шағир дөрөҫ әйткән бит, ҡорогор, ә: "Даими илгә золом кем ҡылса, аның үлмәге яхшы хаятиндин бираҡ..." Әлхасил, саҡырғанды көтмә, өс көндән килеп ет, шағирҙы үҙең менән алып кил!

Аҡъял хажиҙы оҙатҡас, сайранда оҙаҡ йөрөй алманы хан. Башы сатнап бара, тамағы, танауы ҡытыҡлана башланы. Күр ҙә тор, тағы ҡан китәсәк. Ике-өс сәғәткә һуҙылған көсөргәнешле әңгәмәнең шойҡаны инде. Хандың ҡаштары төйөлдө, сырайы ҡараңғыланып китте. Сирләп ятыр ваҡытмы ни, мәмләкәт сиктәрендә дошмандар ҡылыс ҡайрағанда? Төрлө улустарҙа бола-фетнә усаҡтары көйрәгәндә? Низер ҡылырға, һәләкәттең алдын алырға кәрәк.

Ағас араһынан шым ғына килеп сыҡҡан арсый ярҙамында өйгә инеп, ул сисенеп тә тормайынса ятты ла табибты саҡырырға бойорҙо. "Эйе, эйе, — тип мығырҙаны, ихтыярын уҫка йомарлап. — Йәләлетдинде, ил тотҡаларын саҡырырға..."

## 2

"Айыу өңө"нән ҡайтыу менән Олуғ әмир эшкә тотондо. Ашығырға кәрәк ине, сөнки уға ни бары өс көн ваҡыт бирелде. Хандың холҡо билдәле: көтөргә яратмай.

Шул төндә Маһипәрүәз ханбикәнең һарай хеҙмәтселәренән береһе һыуға батҡандай юҡ булды. Ниндәйҙер мутлығы өсөн яҙаланырға тейеш булған икән ул. Хужаларының йәберенән ҡурҡып ҡасҡан хеҙмәтселәр, ҡара яға ҡолдар тураһында йыш ишетелә. Быны ла шундайҙар рәтенә индерҙе лә ҡуйҙы ханбикәнең ярандары.

Асылда иһә ул, Аҡъялдың әмере менән шым ғына ҡулға алынып, Урҙа дошмандары ҡамала торған йән өшөткөс зинданға ябылды. Хандың

[1] Мөғәллиф — автор.

йәшерен ниәтен ғәмәлгә ашырып, Кәримбирҙе ханзаданың башына етеү өсөн бынан да ҡулай кеше табылмаҫ ине. Байғошто ҡурҡытып, бер аҙ туҡмап, ҡылған гәйептәренә ҡылмағандарын да өҫтәп, юрамал үлем язаһына хөкөм иттеләр.

Ана шунда инде, тәфтишсе менән алдан һөйләшелгәнсә, Олуғ әмир үҙе уртаға төштө. Яҡлаша, ярлыҡай, йәнәһе. "Бер йомош ҡушам. Шуны атҡарһаң, ханбикәнең ҡәһәренән ҡотҡарып, арыу ғына вазифа бирермен һиңә", — тигәс, бер ҡатлы бәндә: "Баш өҫтө, Олуғ әмир! Ни бойорһаң да!.." — тип унын аяғына йығылып, илай-илай ант итте. "Мин түгел, бөйөк ханыбыҙ үҙе бойора был йомошто", — тип эштең ниҙәлеген аңлатты Аҡъял. Теге, ҡото осоп, ҡалтырана-ҡалтырана, ҡабат ант итте. "Ҡара уны, антыңды боҙоп, эҙ яҙҙырырға уйлаһаң, йәиһә серҙе фашлап ҡуйһаң, үҙең дә, ата-әсәң, ҡатының менән ике балаң да бер көн йәшәмәҫһегеҙ!" — тип оҙатып ҡалды Олуғ әмир сараһыҙҙан кеше үлтереүсегә әйләнергә тейешле бахырҙы.

Кәримбирҙе уғландың ҡайҙалығы билдәле ине. Бөтә яҡлап уйланылған язаның ғәмәлгә ашыуына икеләнмәҫкә мөмкин. Көтөргә генә ҡалды. Ләкин Аҡъял да, хандың үҙе лә алдандылар. Кәримбирҙенең, эҙ яҙҙырып, әле тегендә, әле бында ҡасыуын, киләсәктә Мәскәү кенәзенә баш һалып, Алтын Урҙаға ҡаршы көрәшкә бил быуасағын белмәй ине әле улар. Быны хатта мөнәжжәм әйтә алмаҫ ине...

Хәҙергә иһә Кәримбирҙе уғланға бәйле сетерекле эштең ыңғай башланыуына ҡәнәғәтләнерлеге бар ине Олуғ әмирҙең. Тимәк, Тәминдәргә тотонорға кәрәк.

Әммә Тәминдәр мырҙа хан әмеренә буйһонманы. "Башҡаланан бер ҡайҙа ла китмәйем!" — тип аяҡ терәне.

Маһипәрүәз ханбикә ҡустыһын яҡларға бил быуҙы. Ярһыуҙан ҡыҙара-бүртенеп Олуғ әмир алдына килеп баҫты ла:

— Һинең этлегең был! Минең хәреҙдәремә тейешле сәрмәйәне кәметеүең етмәгән, ана тағы ниндәй яуызлыҡ уйлағанһың! — тип сәрелдәне. — Юғиһә бөйөк ханыбыҙ миңә, үҙенең яратҡан ханшаһына, ҡаршы эш ҡыла буламы! Онотҭоңмо ни, күҙең сыҡҡыры, Тәминдәр мырҙа — унын ҡәйнеше лә баһа?!

— Онотманым, хөрмәтле ханбикә. — Аҡъял уға баш эйҙе. — Ханыбыҙ ҙа уны яҡын күрә. "Хәрби хеҙмәткә ылыҡһын, тәжрибә туплаһын, аҙаҡ юғарыраҡ ғәскәри мансабҡа үрләтермен", — тип тора. Ысын, ғүмере буйы һиңә арҡаланып йәшәй алмаҫ бит инде ҡустың. Егерме дүрт йәшлек егет тә баһа. Илебеҙгә ышаныслы яугирҙәр кәрәк, ханбикә!

Унын һайын туҙынды Маһипәрүәз. Яҙыҡ һүҙҙәр ҡушып Олуғ әмирҙе әрләне-әрләне лә:

— Хан хозурына барам! Һинең баш-баштаҡлығыңа сик ҡуйҙыртмаһаммы?! — тип бармаҡ яналы.

— Ихтыярың, — тине Аҡъял, серләрәк төҫтә йылмайып. — Мәгәр шуныһын да онотма, ханбикә, бөйөк ханыбыҙ әйткән һүҙенән ҡайтауылларға яратмай.

— Бына күрерһең! — Сығырынан сығып асыуланған уҫал ҡатын ишекте тибеп асты.

"Ханбикә килен ҡыҫылғас, Тәминдәр өсөн яуаплылыҡ минең өҫтән төшөр, иншалла. Ҡатыны илаулап ялбарғас, хандың йомшарыуы бар... — тип күңелен бөтәйтте Олуғ әмир. Әйҙә, йәнәһе, үҙҙәре сисһен сеймәлсек төйөндө. — Ә минең Кәримбирҙе уғлан ғүмеренә хаслашыуым да баштан ашҡан. Аллаһы тәғәлә кисерә күрһен был гонаһымды..."

Хәҙер уға, оҙаҡҡа һуҙмайынса, үҙен гидаймын тип, йәнә хөкөм әйәләренә ҡаршы шиғыр яҙған кешене эҙләп табырға кәрәк ине. Ҡәҙимгесә, был эш йылғыр шымсыларға ҡушылды. Бөтә ҡаланы айҡап, улар тегенең эҙенә төшә алманылар. Йөрөй торғас, ниһайәт, шуларҙың береһе ҙур ханаҡаға[1] барып керҙе. Юғалған ептең осо шунда табыла бирҙе. Дәрүиштәрҙең иң йәше: "Йәләлетдин ханзаданан һора", — тип ысҡындырҙы. Шымсы баяғы шиғырҙы ятҡа әйтеп: — "Кем яҙған

[1]Ханаҡа — (йәки завия) — дәрүиштәр йәшәй торған йорт.

быны, белмәйһегеҙме?” — тип төпсөнә башлағас, дәрүиштәрҙең шәйехе, яман асыуланып, таяғын һелтәне. “Юғал күҙемдән, һин ул шағирҙың исемен ишетергә лә лайыҡ түгелһең!” — тине лә шәкерттәренә бәйләнсек шымсыны ҡыуып сығарырға бойорҙо.

Олуғ әмирҙе һырт биреп ҡаршыланы Йәләлетдин.

— Етмәгән ерең юҡ! Ниңә кәрәк булды һиңә ул ҡағыҙ бысратыусы? — тине һауалы төҫтә бөйөрөнә таянып.

Аҡъял түбәнселек менән уға баш эйҙе.

— Кисерә күр, хөрмәтле ханзада. Миңә түгел, бөйөк ханыбыҙға, һинең пәдәреңә[1] кәрәк икән ул кеше. Белһәң әйт, йәшермә.

— Һуң бит ул йолҡош Урҙаға, ханға ҡаршы шиғырҙар яҙған! Бының өҫтөнә...

— Бүтәнен ҡуйып тор, ханзада. Әгәр ҙә һүҙең дөрөҫ булһа, уны бары тик ханыбыҙ үҙе генә хөкөм итергә хаҡлы. Ҡайҙа ул шағир?

— Ҡайҙа, ҡайҙа... Күпте талап итәһең, Олуғ әмир.

— Әйткәнемсә, мин түгел, хан талап итә быны! Уның әмерен хатта һин инҡар ҡыла алмайһың. Хан һүҙе — ҡанун! Үҙең тәхеткә ултырғас, аңларһың...

— Тәхеткә, имеш! — Йәләлетдин сырайын һытып: — Ҡасан була әле ул... — тине лә теләр-теләмәҫ кенә ыңғайға килде. — Ярай, алып кит, бик тә кәрәк булғас! Тик шуныһын да иҫкәртәм: Урҙа сәйәсәтенә тел тейҙереүе етмәгән, бүтән яҡлап та ғәйепле ул бәндә!

Улай ҙа артабан ҡарышыуҙан мәғәнә юҡлығын аңланы шикелле ханзада. Осо сыға биргән йомғаҡты аҙағынаса һүтергә булды. Идара эштәрен, йөмләнән ҡаҙна аҡсаһын усына йомарлап тотҡан Олуғ әмир менән тәмһеҙләшергә ярамауын да иҫәпкә алырға мәжбүр ине ул.

Аҡъял эҙләгән шағирҙың “бүтән ғәйебе” сәйәсәткә туранан-тура бәйле түгел ине. Ә бит бәйләгәндәр!

Ханзаданың өҙөм-йортом һүҙенән Олуғ әмиргә шуныһы мәғлүм: бөйөк мәликәнең, йәғни беренсе ханбикәнең, алыҫыраҡ тармытынан Гөләндәм исемле сибәргә йәшлегендә ғашиҡ булған, имеш, теге шағир. Ҡыҙ үҙе лә уға күңел ҡуйған икән, ләкин икенсе берәүгә кейәүгә бирелгән. Ә иң ғәжәбе шул, хәҙер, ул ваҡыттан аҙаҡ утыҙ йыл уҙып, шағир илле йәштән, Гөләндәм бикә ҡырҡтан уҙһа ла, улар бер-береһен онотмағандар. Шағир буйҙаҡ, Гөләндәмдең никахлы ире, Хажитархан ғәскәрендә мең башы, Харәзмгә барымта сапҡанда ҡылыстан үткән. Ғашиҡтар һуңлап булһа ла ҡауышырға ниәтләгән.

Йәләлетдин ханзада иһә, үҙ белдегәнәнме, беренсе мәликәнең, йәғни әсәһенең бойороғо менәнме, шағирҙы хибесханаға яптырған. Ғәрлек, йәнәһе, затһыҙ кешенең ханбикә баҡсаһындағы сәскәгә ҡул һуҙыуы...

Иртәгәһенә шағир “Айыу өңө”нә алып барылды. Хан уның менән күҙгә-күҙ осрашып һөйләшергә уйланы. Аҡъялды аҙаҡ тыңлар.

Сал төшә башлаған ҡыҫҡа һаҡал-мыйыҡлы, йәше илленән уҙмыш кешенең, ҡулын күкрәгенә ҡуйып, башын эйер-эймәҫ кенә сәләм биреүенә сәйерһенеп, хан иренен тешләне, ләкин өндәшмәне, аҫтан һөҙөп ҡарап, уны күҙәтеүен дауам итте.

— Аяҡһырап торма, түрҙән рәхим ит, — тине асыуын уҫҡа йомарлап. — Ҡунаҡ бит һин!

— Эйе, ҡулдарымды бәйләп, һаҡ аҫтында алып килгәстәр, ҡунаҡ буламдыр инде, — тип көләмһерәп яуап бирҙе шағир.

— Аб-ба, үпкәләйһең, ә! Ғәйепкә алма, юлдар тыныс түгел бит. Берәй ҡазаға тарып ҡуймағайың тигәндәрҙер... Шуны әйт, бынау шиғырҙарҙы һин яҙҙыңмы? — Хан уға ике бит ҡағыҙ тотторҙо.

— Минекеләр, — тине шағир, ҡағыҙҙарға күҙ йөрөтөп. — Ғәфү ит, хан, һине шиғыр менән ҡыҙыҡһынаһыңдыр тип уйламағайным.

— Ниңә, хандың йәне юҡмы ни? Бик тә ҡыҙыҡһынам, һәйбәт шиғырҙы зауыҡланып уҡыйым мин. Миҫалға, фарсы шағиры Фирдәүсиҙең “Шаһ-намә” дастанын, Ҡол Ғәлиҙең “Йософ менән Зөләйха”һын

[1]Пәдәр — атай.

ҡат-ҡат уҡыйым. Бармы беҙҙә уларға тиң шағирҙар?

— Булған менән... сит илдәргә китергә мәжбүр улар.

— Ни сәбәптән китәләр? Үҙебеҙгә кәрәкмәйме ни ҡәләм оҫталары?

Шағир, хандың асыуланып төпсөнөүенә ҡул һелтәп:

— Афсус[1], шағирҙарға хөрмәт юҡ беҙҙә! — тип әйтте лә һалды.

Хан һарыуын баҫа алманы, уның ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы тартып алып:

— Бынауындай шиғырҙар яҙған мөғәллифте нисек хөрмәт итмәк кәрәк?! — тип екерҙе. — "Сарайҙың шағиры — илдең гидайы..." тигәнһең. Кем дусар итте һине гидайлыҡҡа? Әлбиттә, үҙең, бүтән бер кем дә түгел! Тәҡдиргә зарланыу урынына илебеҙҙең Олуғ заттарына арнап дастан яҙһаң, күҙ өҫтөндә ҡаш булыр инең. Ҡайҙа ул! Киреһенсә, ситләтеп тә кинәйәләп, хөкөм эйәләренә ғәйеп ташлайһың.

Уның шулай туҙыныуы мәрәкә тойолдо шағирға. Хәйер, хандың элеккеләренән былай ҡанһыҙлығы тураһында аҙ ишетмәне ул. Ҡайҙа уға, әйтәйек, Жанибәк ханға етергә! Жанибәк әҙиптәрҙе үҙ итә торғайны. Үзбәк хан да, ни тиклем ҡаты ҡуллы булмаһын, әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәренең бөтөн ихтыяжын күтәргән, тип һөйләй ҡарттар. Ә бының менән бәхәсләшеүҙән мәғәнә юҡ. Шуны уйлап, шағир нәфрәтен тышҡа сығармаҫҡа булды. Тыныcыраҡ аһәндә һүҙен дауам итте:

— Эй, хөкөмдар! Таш бәғерле, ҡомһоҙ түрәләрҙең баш-баштаҡлығынан меҫкенлектә йәшәгән ярлыяпанды ҡурсаларға тырышыуым Урҙаға ла, ханыбыҙға ла тап төшөрмәй ҙә баһа. Мин кешеләрҙе, Ҡөрьән Кәримдә әйтелгәнсә, әхлаҡ-иман сафлығына, ғәҙеллеккә, бер-береһенә аяулы, ярҙамсыл булырға өндәйем...

— Аб-ба! Вазифаң бик ҙур икән, белмәгәйнем. Мулламы әллә һин? Ғәжәп...

Хандың, иренен бөрөштөрөп, мыҫҡыллап өндәшеүен шағир иғтибарһыҙ ҡалдырҙы.

— Мин выжданым ҡушҡанды эшләйем. Үҙем инанған, хаҡ тип иҫәпләгән фекерҙәрҙе кешеләрҙең күңеленә һеңдерергә тырышам. Бының өсөн мулла булыу шарт түгелдер.

— Тимәк, мин әйткән дастанды яҙыуҙан баш тартаһың, шулаймы? Уйланҡыра әле, һинең файҙаға бит был, — тип хан һаман үҙ ягын ҡайырҙы. — Үтмештәге күп шағирҙар батшаларға арнап мәдхиә, ҡасидә, хатта ҙур-ҙур дастандар ижад иткән. Шуның арҡаһында ҡәҙер-хөрмәт күргән улар.

— Һүҙең хаҡ, хөрмәтле хан, ундай шағирҙар ҙа булған. Әммә иң бөйөктәренең ҡайһыһын алма, улар, батшаларҙың мәрхәмәтенә, фани донъяның үткенсе ҡыуаныстарына ҡарағанда, рухи азатлыҡты артығыраҡ күргәндәр!

— Нимә ул азатлыҡ, әгәр ҙә тамағың ризыҡҡа туймаһа?! — Хан, үҙ һүҙенән үҙе ҡәнәғәтлек кисереп, көлөп ебәрҙе. — Эй, шағир! Хәйерселек, үҙең яҙған гидайлыҡ бит ул. Шулмы рухи азатлыҡ тигәнең? Кире ҡаҡма яҡшылыҡ вәғәҙә итеп һуҙылған ҡулды!

— Белмәйем, белмәйем... Уйлап ҡарармын, — тип юрамал икеләнеберәк яуап бирҙе шағир.

— Уйла шул! Һин түгел, хатта бөтә донъяға билдәле бөйөк Фирдәүси үҙенең "Шаһ-намә" дастанын Мәхмүт Ғазнауи солтанға бағышлаған тиҙәр.

— Дөрөҫ. Ләкин уның ҡағылыпһуғылып, мохтажлыҡта йәшәүе лә мәғлүм. Был хаҡта ғибрәтле ҡисса һаҡланған, — тине шағир, файҙаһыҙ әңгәмәнең һуҙылыуына эсе бошоп. — Кәрәк тапһаң, һөйләп бирә алам...

— Ҡана, тыңлап ҡарайыҡ!

— Үҙең телгә алған Мәхмүт Ғазнауи хакимлыҡ ҡылған осорҙа бит инде бөйөк Әбелҡасим Фирдәүси күпме яфа күргән. "Шаһ-намә" дастанын, арнау шиғыры ла өҫтәп, бүләк иткәс, солтан уға рәхмәт тә әйтмәй...

— Ай-һай, бер ҙә дөрөҫкә оҡшамай был хәбәрең, — тине хан баш сайҡап.

— Шикләнер урын юҡ, ҡиссаны бер нисә абруйлы кеше яҙып ҡалдырған. Былай була... Осрашыуҙан байтаҡ ваҡыт уҙғас, Фирдәүсиҙең

[1]Афсус — үкенескә.

ҡаты ауырыуын, ҡартайған көнөндә фәҡирлектә йәшәүен ишетеп, солтан үҙенең уға илтифат күрһәтмәүенә ояла. Әммә намыҫы тотоп үкенеүҙән бигерәк, киң күңелле, мәрхәмәтле хөкөмдар булып танылыу өсөн, шағирға күп кенә алтын, төрлө бүләктәр ебәрә...

— Ана, күрҙеңме?! — Хан аҫтыртын йылмайып, бармағын шағирҙың маңлайына тоҫҡаны. "Һүҙем өҫкә сыҡты", тип уйланы, ахырыһы. — Тимәк, батшалар, хандар һин раҫлағанса белекһеҙ ҙә, бәғерһеҙ ҙә түгелдәр икән!

Шағир бәхәсләшмәне.

— Ҡиссаның аҙағын да тыңла, — тип һүҙен дауам итте. — Фирдәүси Тус ҡалаһында йәшәгән. Бер мәл ҡаланың көнсығыш ҡапҡаһынан, солтан ебәргән бүләктәрҙе тейәп, дөйә каруаны килеп керҙе. Шул уҡ көндә, ошо сәғәттә үк көнбайыш ҡапҡанан вафат булған бөйөк шағирҙың табуты һалынған шығырҙауыҡ арба сығып китте...

Былай ҙа ҡарасман хандың йөҙө уғата ҡараңғыланды, күҙҙәре бер тоҡанды, бер һүнде. "Булмаҫ..." тип мығырҙаны. Башын эйеп, ҡулдарын күкрәгенә салып шымып ултырған шағирға һирпелеп кенә ҡараны ла усын усҡа һуҡты. Шунда уҡ бүлмәгә күк төҫтәге ебәк елән кейгән урта йәштәрҙәге күсә әҙәм — утарҙың идарасыһы килеп инде.

— Бынау ҡунаҡты арыу ғына ханаға урынлаштыр! Хаммамға[1] алып барһындар, өҫ-башын алмаштырһындар, тамағын туйҙырһындар. Ял итһен, теләге булһа яҙышһын, — тип бойорҙо ла хан, асыҡ тәҙрә төбөнә барып баҫып, ҡош тауышына ҡолаҡ һалды. Һарыуы ҡайнап: "Күрһәтер инем мин һиңә, бер яғы..." — тип мығырҙаны. Иғтибарын биләгән дәүләт-сәйәсәт эштәрендәге болғаныштарға баш бирмәҫ шағир менән сәйер осрашыу ҙа килеп өҫтәлгәс, ул йән тыныслығын юғалтты. Хәҙер уға Аҡъял хажиҙың хәбәрен тыңларға ваҡыт. Ләкин ул: "Аҙаҡ, аҙаҡ!" — тип ҡул һелтәп, бер аҙ ятып алырға уйланы.

Тән-ағзаһынан бигерәк, йәненә ял кәрәк ине хандың. Кәрәк тә бит, гонаһ шомлоғона, серемгә китеп өлгөрмәй, тәкәтен алып, "рухи азатлыҡ" тигән сәйер һүҙ мейеһен ҡайнатырға керешә. Ысын, нимә ул — рухи азатлыҡ? Үҙ ихтыярыңа йәшәүме? Әгәр шулай булһа, анау ярлы шағир һымаҡ, бер кемгә, бер нигә буйһонмаҫҡа кәрәк микән? Хан мәхрүм шул ундай мөмкинлектән. Уның муйынында сәйәсәт ҡамыты. Бойора, хөкөм итә, ярлыҡай, әммә үҙенең ҡулы аҫтындағы төрлөһө төрлө вазифалы кешеләрҙең теләк-маҡсатын иҫәпкә алмай хәле юҡ. Тимәк, ул үҙ хакимлығының ҡоло. Бының өҫтөнә уға борондан килгән ыҙан-йолаларҙан тайшанырға ярамай. Йола ҡанундан өҫтөн.

Шағир иһә, ағас ботағына ҡунып һайраған анау ҡошҡа оҡшап, күңелендә ни бар — шуны көйләйҙер, күрәһең. Йәнә: "Мазлумдарҙы яҡлайым", — ти бит әле йолҡош. Һин ханмы йә, һис юғы, берәй түрәме кемделер яҡлай алырға?..

Сәйер, сәйер һинең "рухи азатлығың", тип хан уның менән бәхәсте һаман күңеленән дауам итте. Минең алдымда ут-һыуҙарҙы кискән гәййәр батырҙар, данлыҡлы әмирҙәр, ҡурҡыуҙан ҡалтырап, бөгөлөп төшә, бер йылы һүҙем өсөн үлергә әҙер. Ә һин, үҙ тиңең янына килгән һымаҡ, баш ҡағып ҡына иҫәнләштең, тубыҡланманың. Һөйләшкәндә иһә бер тапҡыр ҙа миңә ололап өндәшмәнең. Әгәр ҙә "рухи азатлыҡ" ошо булһа, уның нигеҙендә әҙәпһеҙлек, бәйһеҙлек ята икән дә баһа!.. Ярай, ситлектәге ҡош кеүек, һаҡ аҫтында ултыр әле бер аҙ. Юҡ, юҡ, зинданға ябтырмайым мин һине. Таҙа, яҡты ханала, ҡунаҡ һыйында йәшәрһең. Алтын ситлектә, хе-хе! Әҙәмсә йәшәүҙең тәмен татығас та "рухи азатлыҡ" тигән уйҙырма менән һаташырһыңмы икән? Йәнә шуныһын да онотма, шағир, бәндәләрҙең ғүмере мелтелдәп янған шәм генә ул. Уны өрөп һүндереү өсөн талғын ғына ел дә етә...

Ниһайәт, Олуғ әмиргә хан янына инергә ижазат бирелде. Кәримбирҙе уғлан менән Тәминдәр мырҙаға бәйле саралар тураһында яуап

---

[1] Хаммам — мунса.

тоторға ауыҙ асып өлгөрмәне Аҡъял хажи, хан:

— Сәсрәп китһендәр! Телеңде талдырма, мөмкин булғанды эшләгәнһеңдер, һиңә ышанам, — тип уны ҡултыҡлап түргә алып барып ултыртты.

— Эйе, бөйөк хан, Кәримбирҙе улың эҙенән һиңә йәне-тәне менән тоғро кеше ебәрҙем, ә Тәминдәр...

— Һөйләмә тинем түгелме? Аңлайһыңдыр, Маһипәрүәз килеп ҡыҫылғас, ҡустыһы менән эште туҡтатып торорға тура килә. Һуңғараҡ берәй әмәле табылыр, — тине хан, Аҡъялды тамам аптыратып. — Бында килеп ғауға күтәрҙе яуыз ҡатын. "Ярай, ярай, ханбикә, Олуғ әмир Аҡъял хажи ҙа Тәминдәр мырҙаны ситкә ебәрмәү яғында", — тип ҡотолдом. Үҙең беләһең, ул бөтөн туған-тыумаһаһын, ҡуштандарын аяҡҡа баҫтырасаҡ. Нуғай улусының бөгөндән атҡа атланырлыҡ ике төмәне бар. Аң булырға кәрәк!

"Әһә, шөрләйһең уларҙан, — тип иренен ҡымтыны Олуғ әмир. — Раҫтан да бола-фетнәгә юл ҡуйырға ярамай". Ә ханды тынысландырыу өсөн:

— Борсолма, ғәли йәнәп, мин тейешле сараны күрҙем. Ҡарауыл төмәне Маһипәрүәз ханбикә һарайын күҙ яҙҙырмай күҙәтеп тора. Ә нуғай төмәндәренең бөтә мең баштары минең кешеләрем, — тип баш эйҙе.

— Һай, ирҙәрҙең аҫылы! — Хан иңен яҙып, тоғро ярҙамсыһын арҡаһынан ҡаҡты, сырайы яҡтыра төштө. — Тимәк, нуғай ғәскәренән хәүеф юҡ, тиһеңме?

— Хәҙергә юҡ, ләкин уларҙың Кесе Сарай тарафына ауышыуы ихтимал. Шуны күҙ уңында тотоп, мең баштарына ваҡ-төйәк бүләк биреп торам. Иҙеүкәйҙең шымсылары үҙҙәре үк тауыш-тынһыҙ сабып ташлайҙар. Күҙәтселәрем шулай хәбәр итә.

— Мәғҡул!.. Бик йонсотманыммы һине?

— Мин, бөйөк хан, салтанатыбыҙ хеҙмәтендәмен, йонсорға хаҡым юҡ...

— Улайһа тағы бер һорауым бар. Уҡымышлы кешеһең, китап менән дуҫһың... Аңлатып бирсе, нимә ул рухи азатлыҡ?

Аҡъял, яуап эҙләгәндәй, маңлайын сырыштырып, ҡарашын түшәмгә йүнәлтте, унан өҫтәлдә ятҡан сәхтиән тышлы, көмөш сыртлаҡ ҡаптырмалы китаптарға күсерҙе. Ҡашын төйөп уйланып торҙо ла:

— Кисерә күр, ғәли йәнәп, минең баш етерҙәй түгел быға, — тип гәйепле төҫтә йылмайҙы. — Шәйхелисләм менән һөйләшеп ҡара.

— Таптың кешеһен! Хәҙрәтте беләһең бит инде. Мәсьәләне уғата ҡатмарландырып, мотлаҡ иманихсанға, шәриғәт ҡанундарына бәйләйәсәк. Хәйер, сырхаулап ята икән әле ул...

Яңғыҙы ҡалғас та, хан мейеһен быраулаған һорауҙан ҡотола алманы, уйланды ла уйланды. Яулы-даулы ғүмер юлында осратҡан данышман[1] ғалимдарҙы, дин әһелдәрен хәтерләне. Иштәктәр иленең данлыҡлы йырауы Һабрау менән әңгәмәләрен, бәхәсен иҫкә төшөрҙө лә: "Был хәйерһеҙ йомаҡты шул сисһә сисер ине..." — тигән фекергә килде. Ләкин ҡамауҙан ҡотолғаны бирле уның ҡайҙалығы мәғлүм түгел.

Тимәк, үҙе баш ватырға тейеш инде хан. Уйлана торғас, зиһенен бикләп торған пәрҙә асылғандай итте. Әгәр ҙә рухи азатлыҡ тигән нәмә кешенең үҙ ихтыяры менән йәшәүен аңлатһа, ул хөкөм эйәләренә аслан төҫ түгел, тип йомғаҡ яһаны хан. Мәмләкәтемдең бер яғында таң һыҙылғанда, икенсе тарафында шәфәҡ һүнә. Халҡымдың иҫәбе-һаны юҡ. Кешеләр исемемде ишетеү менән уртаға бөгөлөп баш эйә. Ошоға ҡарамаҫтан, һәр аҙымым, һәр ғәмәлем йәмғиәт ҡабул иткән ҡанунға, йолаларға, дин һүҙенә буйһона. Шул минең азатлығымды сикләй. Бойора алам, кемделер ярлыҡайым, күтәрәм, кемделер ситләтәм, хөкөм итәм. Ләкин ҡылмыштарым, үҙ ихтыярымдан бигерәк, дәүләт, йәмғиәт ихтыяжына буйһона. Был көс минең ҡөҙрәтемдән өҫтөн. Шул һаҡлай ханды.

[1]Данышман — аҡыл эйәһе (мыслитель).

Тимәк, хан да уны һаҡларға, нығытырға мәжбүр.

Быға яуап итеп, ил тотҡалары миңә маҡтау яуҙыра, садиҡлыҡ белдерә, дан-шөһрәт менән әүрәтә, ярамһаҡлана, сөнки улар ҙа үҙ ихтыярында түгелдәр. Ҡайҙа бында рухи азатлыҡҡа урын?!

Эй, шағир! Һин һөйләгән мөмкинлеккә ирешеү өсөн, мин ханлыҡтан ваз кисергә, һинең һымаҡ ярлы гидайға әйләнергә тейешмен икән дә баһа! Әммә шағир ханға тиңләшә алмаған кеүек, хан да һинең кимәлгә төшә алмай. Дәүләт юл ҡуймай быға. Әхирәттә бөтөн кеше тиң, ә фани донъяла һәр кемдең үҙ урыны, үҙ яҙмышы...

* * *

Был мәлдә шағир ҙа хандың мейеһен зымбырлатҡан уйҙар ихтыярында ине. Билдәле, ул мәсьәләгә икенсе яҡтан килә, сөнки уның шәхси азатлыҡтан башҡа юғалтыр хакимлығы ла, байлығы ла юҡ.

Улай ҙа, үҙе күргән, кисергән-һынаған хәлдәрҙән сығып, ул күптән инде инсандың сәйер йән эйәһе булыуын аңланы. Кемлегенә ҡарамаҫтан, бәндә үҙен донъя күсәре тип һанарға әүәҫ. Ләкин күпкә дәғүә итә лә, аҙға хушһына. Шуның арҡаһында етәһе мораҙына етә алмайынса, донъянан үтә. Сәбәбе бер генә бының: кешенең өмөт-ниәттәрен сикләүсе, рухын бығаулаусы көстәр бихисап. Һис кем тайшана алмай был ҡағиҙәнән: хөкөмдар ҙа, ҡара яға ҡол да...

Шағирҙың Йәләлетдин ханзада әмере менән зинданға ябылыуы ла шул аяуһыҙ ҡағиҙәнең сағылышы ине, күрәһең. Өс тәүлек үткәс, ул хан утарына килтерелде. Бер аҙна инде яҡшы йыһазлы, таҙа, яҡты ханала йәшәй, хеҙмәтселәр һәр теләгенең алдын алырға әҙер торалар, баш эйеп, "тәҡсир" йә "дамулла" тип өндәшәләр.

Ҡапҡанан сығырға рөхсәт юҡ, ә ихата эсендәге баҡсала ул күпме теләһә шунса йөрөй ала. Көн йылы, ағас араһында ҡоштар сырсыулаша, һауала сәскәләрҙең хуш еҫе өйөрөлә.

Айырыуса иртәнге сәғәттәрҙең хозурлығы әйтеп бөтөргөһөҙ. Таң шоңҡары алтын ҡанаттарын яҙып ебәрһә, йондоҙҙар, ҡыйғыр ҡоштан ҡурҡҡан күгәрсендәр кеүек, яҡтыра башлаған асман киңлектәренә ҡасып юғала. Баҡсаны биҙәгән сәскәләр, уянып, аллы-гөллө таждарын аса, һандуғастар донъяның матурлығынан, тыныслығынан илһамланып һайрарға керешә. Эй, илаһи мәл! Һинең тылсымлы һулышың тәнгә — шифа, йәнгә — дауа...

Күңелендә ярала башлаған ҡасидә юлдары шағирҙың балалыҡ, үҫмерлек йылдарының мәңге онотолмаҫ хәтирәләренә үрелеп китте. Татлы ла, әрнеүле лә ине был кисерештәр. Күҙен томалаған йәште һыпырып, ул ҡарашын монарланып ятҡан дала киңлектәренә күсерҙе.

... Йәйге тымыҙыҡ кистәрҙә ул тиҫтерҙәре менән ат көтөргә сыға торғайны. Аттар, урман ҡултығындағы аҡланды иңләп-буйлап, таңғаса рәхәтләнеп үлән ҡыртылдата. Тирә-яҡ тып-тын. Һирәкләп бейәләрҙең шым ғына кешнәп, тиктормаҫ ҡолондарын саҡырыуы, наҙлы һерләшеүе ишетелеп ҡала.

Көтөүгә күҙ-ҡолаҡ булырға, малайҙарҙы ҡарап йөрөтөргә мотлаҡ берәй ҡарт сыға. Бигерәк тә Ирназар исемле аҡһаҡалды түҙемһеҙлек менән көтөп ала ине улар. Ни өсөн тигәндә, был ҡарт йәшлегендә бай сауҙагәрҙең каруан һаҡсылары ҡатарында булған, әллә күпме илдәрҙе күргән. Тандыр ғына янған усаҡ тирәләй ултыра ла малайҙар уның әңгәмәләрен мөкиббән китеп тыңлай. Берәй ғәжәйеп-ғәрәйеп хәл тураһында ишетһәләр, тыйыла алмайынса көлөшәләр, һүҙ хәүефле мажараларға күсһә, шомланып, бер-берεһенә һыйынышып, шымып ҡалалар.

Таң мәле — үҙе бер тамаша. Иҙелдән далаға томан эркелә, сирҡандырып һалҡынса ел иҫә. Аттар, ауылға ҡайтыр ваҡыт яҡынлашыуын тойоп, ҡыуалағанды көтмәйенсә, бер тирәгә туплана. Аҡыллы инде йылҡы малы.

Шәреҡтә офоҡ ситен тәүҙә алһыу-һары яҡтылыҡ баҙлата, күп тә үтмәй, күк йөҙө аҡһыллана башлай, йондоҙҙар бер-бер артлы һүнә, ағас баштарына ҡояш нуры төшә. Урман ҡош тауышына күмелә.

Шундай илаһи иртәләрҙең береһендә көтөүҙән ҡайтҡан малайҙы ҡыуаныслы хәбәр көтөп алды. Ошоғаса айҙар буйы түшәктән тормай ауырып ятҡан әсәһе уны ҡапҡа төбөндә: "Ҡолонсағым! Ана бит ҡайһылай үҫтең, йомошҡа ярай башланың!" — тип йылмайып ҡаршыланы.

Үкенес, бынан һуң оҙаҡ йәшәмәне инде ул, йәй аҙаҡтарында яҡты донъя менән хушлашты. Ләкин уның шат йылмайыуы әлегәсә улының тормош юлында тылсымлы нур булып һыҙылып килә...

### 3

Көндәрҙән бер көн, хандың саҡырыуы менән ахырыһы, "Айыу өңө"нә әллә күпме ҡунаҡ килеп тулды.

Шағир тәҙрәнән тышҡа ҡарап тора ине. Бынан Иҙел буйҙарының һоҡланғыс манзараһы асыла, шималда Сарай ҡалаһының зәңгәр-йәшел көмбәҙҙәре, бейек манаралары күренеп тора. Ә утар ҡоймаһының тышында йөҙләгән ҡораллы сипай, шау-гөр килеп, аттарын арҡанлап йөрөй. Эскә ингән дәрәжәле ҡунаҡтарҙың һаҡсы алайы инде улар.

Йышектәрҙең шаҡ-шоҡ асылып-ябылыуын, ҡысҡырып һөйләшеү, һаһылдап көлөшөү тауыштарын ишетмәҫ өсөн, шағир, ҡолаҡтарын ҡаплап, яҙышыуын дауам итте. Был мәлдә ул таң күренешен тасуирлаған ҡасидә юлдарын ғына теҙә ине. Аҙаҡҡы мисраларын ғына яҙаһы ҡалды. Унан аҡҡа күсерер.

Өлгөрмәне. Бүлмәгә утар идарасыһы күсә Бикмәт килеп инде. Шағир уның кергәнен һиҙмәй ҡалды, сөнки Бикмәт аяғына йомшаҡ табанлы ситек кейеп, сысҡан аулаған бесәй кеүек, шым йөрөй. Баш эйеп сәләм биргәс, ул нәҙек тауыш менән:

— Ғәли йәнәп хан һине Урҙаның күренеклеләре янына мәжлескә саҡырҙы. Һуңларға ярамай, миңә эйәреп үк барыуың лазым! — тип тантаналы төҫтә хәбәр итте.

Ни ҡылһын шағир. Зинданда ултырмаһа ла, ул үҙ иркендә түгел. Һәр аҙымын күҙәтеп торалар, баҡсала йөрөгәндә лә ҡаршыһында, ер аҫтынан килеп сыҡҡан ендәр һымаҡ, ҡоралды нәүкәрҙәр пәйҙә була. Тотҡон инде, бер һүҙ менән әйткәндә. Хан бойорғас, теләмәһәң дә, барырға тура килә. Юғиһә һуҡыр түрәләрҙе күрергә ашҡынып тормай.

Уның ҡунаҡ бүлмәһенә инеп: "Әссәләмәғәләйкүм!" — тип сәләмләүенә береһенән-береһе ҡупшы кейемле, туҡ сырайлы әмирҙәр, төрлө йәштәге һанаттар сәләмгә теләр-теләмәҫ кенә яуап бирҙе.

Хандың ниндәйҙер ишара яһауын шағир күрмәй ҡалды. Ә ҡараштары менән хөкөмдарҙың һәр хәрәкәтен аулап торған ҡунаҡтар, ҡулдарын ҡаушырып, өнһөҙ тораташҡа әүерелде. Бүлмәлә себен осһа ишетелер тынлыҡ урынлашты.

— Ултырығыҙ, ғәзиздәрем! — тине хан, тауышын баҫыбыраҡ. Йөҙөн йылмайыу сирылтты.

Саҡырылған түрәләрҙең урындары, дәрәжәләренә ҡарап, алдан билдәләнә, ахырыһы. Бүлмәгә ингәс үк, һәр береһе үҙенә тейешле тәңгәлдә тәпәш өҫтәл эргәһенә баҫҡан. Улай ҙа бер аҙ буталыш булып алды. Яңылышҡандарға, шым ғына ғәфү үтенеп, үҙҙәренә тәғәйен урынға күсергә тура килде.

Ниһайәт, бөтөнөһө ултырҙы, шағир ғына аяғөҫтө тороп ҡалды. Ул инде килеүенә үкенә башлағайны, Бикмәт: "Рәхим ит, дамулла", тип йылмайып, уны түргә яҡыныраҡ буш урынға алып барып ултыртты.

Мәжлестең ни маҡсатта үткәрелеүен дә, үҙенең саҡырылыу сәбәбен дә белмәгәс, шағир аптырап, уңайһыҙлыҡ кисерҙе. Әҙерәк ултырырға ла, берәй һылтау табып, сығып китергә ҡарар итте.

— Хәҙерле арҡаҙаштарым, әмирҙәр! — тип табынға күҙ йүгертеп алды хан. — Иң тәүҙә изге динебеҙҙең ҡурыҡсыһы мөхтәрәм шәйхелисламдың тоғро мөрите Әбделвахит мулланан бөгөнгө мәжлескә фатиха биреүен һорайыҡ.

Мулла, тауышын килешле тибрәндереп, фатиха доғаһын уҡығас, табындаштар биттәрен һыпырып хандың ауыҙына ҡараны.

— Һүҙҙе Олуғ әмир башлар, — тине хан, үҙенең уң яғында ултырған Аҡъял хажиҙың беләгенә ҡа-

ғылып. — Ул минең исемдән һөйләр, минең әмеремде һеҙгә иғлан итер. Рәхим ит, Олуғ әмир!

Аҡъял күҙен ҡыҫа биреп ҡунаҡтарҙы барлағандай итте лә:

— Бөйөк ханыбыҙға ҡаҡшамаҫ һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйем! — тип боролоп уға баш эйҙе. "Афарин!" "Тағы йөҙ йыл йәшәһен гәли йәнәп падишаһыбыҙ!" — тиешеп бөтөнөһө Аҡъялдың хәрәкәтен ҡабатланы. — Иншалла, шулай булыр!.. Тыңлағыҙ! — тине Аҡъял, һүҙен дауам итеп. — Аллаһы тәғәләнең ҡушыуы буйынса һәм дә ҡәҙимге тәртип-йолаға тоғролоҡ һаҡлап, ханыбыҙ үҙенең берҙән-бер хаҡлы вариҫы итеп Йәләлетдин ханзаданы тәғәйенләне. Тәғзим ҡылайыҡ хөрмәтле ханзадаға!

Әмирҙәр, һанаттар, бөтөнөһө бер юлы аяғүрә баҫып, тәүҙә ханға, унан атаһының һул яғында ултырған улына иҙәнгәсә эйелеп тоғролоҡ белдерҙеләр.

Йәләлетдин бер ағарҙы, бер ҡыҙарҙы. Ырғып тороп, тар яурынлы сибек кәүҙәһе урталай һынған кеүек бөгөлөп, башын атаһының алдына һалды.

— Бөйөк ханыбыҙ! Ҡәҙерле атайым! — тине тамағын ҡылтылдатып, күҙенә эркелгән йәште һыпырҙы. — Сикһеҙ мәрхәмәтең, ышанысың өсөн, мең рәхмәт, атай! Әммә... Аллаға шөкөр, дәүләтебеҙ теҙгенен үҙең нык тотаһың... Бынан аҙаҡ та шулай булыр... Мин иһә... ҡәтрә ҡаным ҡалғансы ҡулыңдағы үткер ҡылысың булырмын!

Һанаттарҙан береһенең:

— Ҡыйратаһың инде!

Икенсеһенең:

— Көҙгө этәс!.. — тип мыҫҡыллауы шау-шыуға күмелеп ҡалды.

Ҡунаҡтар геү итеп:

— Дан данышман ханыбыҙға! Уның садиҡ вариҫына!.. — тип һөрәнләне.

Хан ҡулын күтәреп, тыныслыҡ урынлашыуын көттө лә:

— Ихтыярымды хуплауығыҙ күңелемде ҡыуанысҡа солғаны, туғандар! — тип ҡәнәғәтлек белдерҙе. — Һеҙ — илебеҙҙең ҡаҡшамаҫ таяуҙары... Үҙегеҙгә мәғлүм, Урҙа сиктәре тыныс түгел. Ил эсендә лә, әле бер төбәктә, әле икенсеһендә, болафетнә усаҡтары көйрәй. Ышанам ки, теләһә ниндәй дошманға зарба бирерһегеҙ!.. Йәнә: миңә тоғро булған кеүек, ханзаданың әмерҙәрен дә күтәреп алырһығыҙ, тип өмөтләнәм...

— Баш өҫтө, бөйөк хан!..

— Бойор, хөрмәтле ханзада!.. — тигән алҡыш-оран тауыштарынан тәҙрәләр зыңғырлап китте.

Ҡунаҡтарҙың ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа тыйылып ҡына һөйләшеүенә, ҡыҫылып ҡына көлөшеүенә хан иғтибарһыҙ ҡалманы. Һаҡалын усына йомарлап йылмайҙы ла:

— Кисерегеҙ, ҡәҙерлеләрем... — тип баш эйҙе... Мине урыҫ кенәздәренең илселәре көтә... Ә һеҙ тартынмағыҙ, ашап-эсеп ултырығыҙ, ирәүәнләп күңел асығыҙ! Күреп торам, тамаҡтарығыҙ кипте шикелле, ә?.. Табынды ханзада ҡарар... — Шунан ул, Аҡъял хажиҙы эйәртеп, сығып китте.

Ул да булманы, дүрт-биш хеҙмәтсе егет, быуаса буш торған өҫтәлгә боҫрап торған ит, йәшелсә-емеш, шарап шешәләре ташырға керештe. Хан киткәс, ҡунаҡтар, тартыныуҙы ситкә ташлап, устарын уҫҡа ышҡып: "Ризыҡҡа бәрәкәт!" — тиешеп, еңдәрен һыҙғанып, алдарындағы көмөш тәрилкәләргә һимеҙ ҡалъяларҙы һала башланылар. Табын ҡараусы егеттәр оҙон муйынлы шешәләрҙән буталлы ҡәдәхтәргә шабырҙатып шарап ҡойҙо.

— Был шарапты Хажитархан вәлие, ханыбыҙҙың тоғро яугиры Салчы әмир ебәрҙе. Гуржистан[1] сауҙагәрҙәре килтергән икән. Ҡана, күтәрәйек илебеҙ именлегенә, бөйөк ханыбыҙ һаулығына! — тип ҡул болғауы булды Йәләлетдиндең, ҡунаҡтар бер тауыштан:

— Рәхмәт, ханзада, ҙурланың! — тип һөрәнләп ебәрҙе.

Тәүҙән үк тамшанышып, һыйға өмөтләнеп ултырған ил тотҡалары, бер-береһен ҡыҫтап, көлөшә-көлөшә, ҡәдәхтәрҙең төбөн күргәнсе шарап эсергә, ашарға тотондолар. Мәжлес ҡыҙғандан-ҡыҙҙы.

[1]Гуржистан — Грузия.

Шағир шарапҡа иренен тейҙереп кенә алды, ризыҡ тамағынан үтмәне. Әлдә ярай ҡыҫтаусы булманы. Табындағылар уның бындалығын онотҡан кеүек ине. Юҡ, онотмағандар икән. Уға ҡара-ҡаршы ултырған һанаттарҙың береһе — Сарайҙы ҡурыҡлаусы ҡарауыл төмәненең әмире — бармағын уның маңлайына тоҫҡап:

— Эй, һин! Ниңә эсмәйһең? Беҙҙе өнәмәйһеңме? — тип ҡаҙалды.

Уға тағы бер-икеһе ҡушылды:

— Шағир икән бит. Йәнәһе, илаһи зат...

— Эйе, нишләп беҙҙе өнәһен ул! Килеп ултырғаны бирле ауыҙ асып өндәшмәне...

— Табынды һанға һуҡмағас, килмәҫкә ине!.. — Быныһы Йәләлетдин.

— Әйткәнең раҫ, хөрмәтле ханзада, — тип шағир урынынан торҙо ла, баш ҡағып ҡына хушлашып, сығып китте. Ниҙер мығырҙаған, һаһылдап көлгән ҡунаҡтарға иғтибар итмәне.

Ул үҙенә бирелгән бүлмәгә инеп торманы, баҡсала йөрөргә уйланы.

Көн кисәүләп, төшлөктәге томра һүрелгәйне. Иҙелдән еләҫ һауа эркелә, ҡайын, уҫаҡ япраҡтары, иренгән һымаҡ, талғын ғына бәүелеп, ҡыштырҙап ултыра. Ҡунаҡ бүлмәһенең асыҡ тәҙрәләренән, шағараҡ мәжлес шауына ҡушылып, думбыра, рубаб, най тауыштары ишетелеп ҡала. Урҙа һанаттары ҡоторошоп күңел аса.

Һауаның сафлығынан, сәскәләрҙең хуш еҫенән хозурланып, шағир баҡса буйлап атланы. Ләкин, үс иткәндәй, уны иҫерек түрәләрҙең тамаҡ төбө менән ҡысҡырып маҡтанышыуы, әҙәпһеҙ көләмәстәре эҙәрлекләне.

Уларҙың байтағы уға таныш. Үҙенең ярандарын "Урҙаның ныҡлы таяуҙары" тип атарлығы бар хандың. Һәр береһе меңләгән тирмәле ырыуҙарҙы, ҙур улустарҙы ҡулында тота. Мәмләкәттең көсө лә, көсһөҙлөгө лә шунда. Ғәскәргә, матди байлыҡҡа шулар хужа, ә тарҡаулыҡ, уҙамтанлыҡ Урҙаның нигеҙен ҡаҡшата.

Шау-гөр килеп күңел асып ултырған түрәләр, ҡарамаҡҡа, үҙ-ара һин дә мин. Әйтерһең, яҡын дуҫтар, туғандаштар. Асылда иһә, берберенең арҡаһына хәнйәр ҡаҙарға әҙерҙәр. Мәкер-ялған, аҫтан киҫеү, шымсылыҡ — күнегелгән ҡоралы уларҙың.

"Урҙа сирле, — тигән фекергә килде шағир. — Был үткенсе киҙеү түгел, әжәл сире. Юғары даирәләрҙә аҙғынлыҡ, ришүәтселек, эскелек, баш-баштаҡлыҡ хөкөм һөрә. Башҡала ҡомһоҙ баҙарға, боҙоҡлоҡ ояһына әйләнде. Бату, Үзбәк, Жанибәк хандар ҡул аҫтында саҡта ярайһы уҡ нығынып өлгөргән Алтын Урҙа дәүләте хәҙер ҡорт төшкән ағасты хәтерләтә. Ә ҡорт үҫергә һәләтле көслө ботаҡ-һабаҡты ғына түгел, тамырҙарҙы ла кимерә..."

Сарай ҡалаһына тәү тапҡыр аяҡ баҫҡанда шағир егерме ике йәштә генә ине. Тән-ағзаһы көскә тулышып, йәне ҡанатланып осҡан елбәҙәк егет сағы. Тыуып үҫкән ауылы Ҡамышлының кескәй генә мәҙрәсәһендә уҡыу-яҙыуға өйрәнеп, китап һүҙенең ҡәҙерен белгәйне инде ул. Әммә уға Ҡөрьән Кәрим теле ғәрәпсәне лә, бөйөк шағирҙар теле фарсыны ла тәрәнерәк, камилыраҡ өйрәнергә кәрәк ине әле. Шул маҡсаттан илһамланып, мәҙрәсәләге остаздарының кәңәшен тотоп, атаһының фатихаһын алып, ул мәмләкәттең пайтәхете Сарай ҡалаһына юл тотто.

Алтын Урҙала данлыҡлы Үзбәк хандан һуң Жанибәк ханлыҡ ҡылған осор ине әле. Һағынып иҫкә төшөрөргә генә ҡалды ул ваҡыттар.

Иҙел һыуы буйында ултырған башҡала йылдан-йыл ҙурая, матурлана, эшлекле, айыҡ тормошо, гөрләп торған баҙарҙары менән яҡын күршеләрҙең дә, алыҫ илдәрҙең дә иғтибарын тарта. Мәшһүр мәҙрәсәләрҙә йөҙләгән йәш үҫмерҙәр, егеттәр белем ала, китап серҙәрен йотлоғоп үҙләштерә, аң-зиһенен үткерләй ине.

Ауылда саҡта уҡ, ҡулына килеп кергән шиғыр китаптарын уҡып, ятҡа бикләп, күңелен арбаған ғәзәл-ҡасидәләр миҫалында үҙе лә ҡәләм тибрәтә башлағайны буласаҡ шағир. Ә Сарай мәҙрәсәһендә талиптарҙың байтағы шиғри һүҙ менән мауыға ине. Һабаҡтан буш ваҡытарҙа улар

бер-береһенә үҙ яҙмаларын уҡып ишеттерә, уртаға һалып тикшерә, бәхәсләшеп китә торғайнылар.

Фарсы теленең бөтөн нескәлектәрен аңлау, тойомлау кимәленә етешкәс, ул Әбүабдулла Рудаки, Фирдәүси, Низами Гәнжәүи, Үмәри Хәйам, Хафиз, Сәғди кеүек бөйөктәрҙең китаптарын уҡыу бәхетенә ирешә. Быныҡ өҫтөнә төрки шағирҙарҙан Ҡотб, Харәзми, Хөсәм Кәтиб дастандарын тулыһынса тиерлек ятлап алды.

Йәш шағирҙың күңелен уйнатып ебәргән китап Ҡотбтың "Хосрау вә Ширин" дастаны ине. Баҡһаң, ул Низами Гәнжәүи әҫәрен фарсы теленән төркисәгә тәржемә итеүҙән үҫеп сыҡҡан икән. "Тимәк, мин дә шул юлдан бара алам!" — тип тоҡанып китте шағир. Был мәлдә ул фарсы шағиры Мөслихиддин Сәғдиҙең "Гөлстан" исемле дастанын мөкиббән китеп уҡымаҡта ине. Уҡыйуҡый ҙа, айырыуса тәрән мәғәнәле, осҡоно сәсрәрҙәй нағышлы мисраларын, үҙе лә һиҙмәҫтән, төркисәгә әйләндереп ҡарай, уларға өр-яңы юлдар өҫтәп ҡуя.

Был мауығыуҙың ниндәй һөҙөмтәгә килтерәсәген томанлыраҡ ҡына күҙаллай ине әле ул. Байтаҡ ваҡыттан һуң Сәғди дастаны унын иғтибарын ҡайтанан биләп аласаҡ. Ана шунда инде "Гөлстан"ды төркисәгә ауҙарырға тотонор. Әлбиттә, ул ғәҙәти тәржемә генә булмаҫҡа, шул дастан ерлегенән үҫеп сыҡҡан үҙаллы әҫәр кимәленә күтәрелергә тейеш, тигән фекер илһам бирәсәк уға. Әммә был мәлдә шағир, "ватандин бинишан" булып, "үҙгә йортта", йәғни ҡоштар осоп етмәҫ Мысыр илендә йәшәйәсәк...

Унынһы алда әле, ә хәҙергә уның Сарай ҡалаһында эсер һыуҙары бөтмәгәйне. Үкенескә, уға яҙған туҫтаҡҡа күңелдәге юшҡын-көҙөктәрҙе йыуып төшөрөрҙәй татлы шарап түгел, асы шыйыҡса тултырылғайны.

Жанибәк хан заманындағы хөрлөк, әҙиптәргә, ғалим-ғөләмгә илтифат юҡҡа сыҡты. Фекер ҡыҫаныҫлығына көнкүрештәге ҡытлыҡ та өҫтәлеп, ҡәләм оҫталарының күбеһе сит-ят илдәргә күсеп китергә мәжбүр булды.

Шағир ҙа өлкән ҡәләмдәштәренә эйәрергә уй төйнәп бөткәйне, ләкин йәшлегендә тоҡанған өмөтөнөң яңырыуы туҡтатты.

Ире яуҙа башын һалғас, Гөләндәм үҙ иркендә ҡалғандай ине. Шуға күрә бер осрашҡанда шағир: "Эй, сәхибъямал[1], эй, йәнемдең яртыһы! Мин һине онотманым, әүәлгесә үк яратам", — тиергә баҙнат итте. "Мин дә, мин дә!.." — тип тыйыла алмай илап, уның күҙенә ҡараны һөйгәне.

Мөслихиддин Сәғдиҙең: "Бәхетшатлыҡ балҡыталыр ғашиҡ күҙен, күргән һайын һөйгәненең яҡты йөҙөн..." — тигән мисраларын күңеленән тәкрарлап, шағир Аллаһы тәғәләгә рәхмәт уҡыны.

Ғашиҡтар, береһе — илленән, икенсеһе ҡырҡтан уҙһа ла, йәшәреп киткәндәй инеләр. Һуңлап булһа ла ҡауышырға, ғүмерҙәренең ахырынаса бергә булырға ине өмөттәре. Ҡайҙа ул! Гөләндәм бикәнең туған-тыумасаһы ғауға күтәрҙе. Йәнәһе, үҙе үк "илдең гидайы"мын тип шиғыр яҙған фәҡир кеше уларға тиң түгел. Янъял шаңдауы бөйөк мәликә һарайына ла етеп яңғыраны.

Был хәл, Кәримбирҙе ханзаданың урыҫтарға ҡасыуынан ҡала, хөкөм эйәләренең һушын алған тағы бер хәүефле ваҡиға ине. Йәләлетдиндең эйәрсендәре, башҡаланың аҫтын-өҫкә килтереп, шағирҙы эҙләргә, кемлеген асыҡларға керешә. Баҡһаң, ул былай ҙа юғары ҡатлам кешеләренең зитына тейгән Сәйфетдин исемле шағир икән. Шиғырҙарына "Сәйф Сараи" тигән тәхәллүс[2] менән имза ҡуйып килгән, ярлы-ябаға тарафынан күҙ өҫтөндә ҡаш булып танылған кеше шул икән дә баһа!

— Бына ни яҙған ул йолҡош! — тип уртын сәйнәне Йәләлетдин ханзада, әсәһе янына инеп. — Тыңла: "Даими илгә золом кем ҡылса, аның үлмәге яхшы хәятындин бираҡ..." Беҙгә, бөйөк ханыбыҙға әжәл саҡырған бит, ҡороғор!

---

[1]Сәхибъямал — гүзәл, матур. Ҡатын-ҡыҙға әйтелә.
[2]Тәхәллүс — псевдоним.

— Һы, шул кемһә беҙҙең Гөләндәмгә күҙ һалған икән етмәһә!.. Ни ҡылырға үҙең беләһең, улым, — тине ханбикә, асыуынан шартлар-ҙай булып. — Оҙаҡҡа һуҙма!..

Өлкән ханбикәнең сыбыҡ осо ҡәрҙәше Гөләндәм улар өсөн бар ни, юҡ ни. Ләкин был осраҡта ул баш бирмәҫ шағирға бәйләнергә ҡулай һылтау булды: һин кем, йәнәһе, беҙҙең нәҫелдәшебеҙгә ымһынып йөрөргә?! Йәләлетдиндең ниәте — шағирҙы зинданда серетеү ине. Аҡъялдың килеп ҡыҫылыуы ҡамасауланы..

* * *

Сәйфетдин һаман да “Айыу өңө”ндә тотҡонлоҡта ине. Хан үҙе лә, ярандары ла уға “хөрмәтле ҡунаҡ” тип өндәшә, һәр теләгенең алдын алырға, илтифат күрһәтергә тора. Йыш ҡына ул хандың үҙ янына табынға саҡырыла. Бүлмәһендә Ҡөръән Кәримдән, хәдистәрҙән, тарихи китаптарҙан тыш бөйөк шағирҙарҙың ҡалын-ҡалын дивандары[1], дастандары бар. Ҡул осонда яҙыу әсбабтары. Теләгәненсә уҡы, фекер тупла, яҙыш. Аңлашылып тора, унын, уҡыған китаптарҙан фәһем алып, шулар миҫалында Урҙаны (билдәле — хандың үҙен дә!) данлап дастан яҙыуын көтә хөкөмдар. Күсә Бикмәт быны йыштан-йыш шағирҙың иҫенә төшөрә.

Ләкин ситлектәге ҡоштоң һайрамауы күптән мәғлүм. Хәйер, иректә булһа ла, хан талап иткән әҫәрҙе яҙмаҫ ине ул. Төпсөнә башлаһалар: “Ашыҡтырмағыҙ, уйлайым әле...” — ти ҙә ҡуя. Кәштәләге китаптарҙың әле береһен, әле икенсеһен асып уҡый ҙа, уларҙан үҙ хәленә ишара табып, йә хозурлыҡ кисерә, йә күберәк толҡаһыҙ көйөнә.

Ни тиклем кәмһенһә лә, ижад ҡомарын юғалтманы ул. Йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан шиғырҙары ҡағыҙға күсмәй, сөнки улар күбеһенсә ил тәненә талпандай ҡаҙалған залимдарға ҡаршы ғисъянсылыҡ тойғоһо менән һуғарылған. Тимәк, хан эйәрсендәренә күрһәтерлек түгелдәр. Уҡыһалар, күҫәк күтәрәсәктәр. Ә бына “Таң ҡасидәһе” кеүек тәбиғәт күренештәренә арналған, йәки дуҫлыҡты, ҡайнар мөхәббәтте данлаған ғәзәлдәрҙе уҡыһындар әйҙә...

Бәндәне өмөт йәшәтә, тип үҙен сыҙамлы булырға, туғарылып төшмәҫкә өндәне Сәйф. Моғайын, тотҡонлоҡта мәңгегә ҡалмаҫ, ҡотолор берәй ваҡыт. Унын яратҡан шағиры шәйх Мөслихиддин Сәғди ана ҡайһылай өмөтләндергән бәхетһеҙлеккә тарыған бәндәләрҙе: “Еңелгәндәр, бығауланған тотҡон ирҙәр! Мәңге түгел һеҙгә һис тә был йәберҙәр. Яҙмыш бер көн хөрлөк бирер йәнегеҙгә. Ә залимдар шул ҡапҡанға эләгерҙәр...” Эйе, эйе, ярамай төшөнкөлөккә бирелергә!

Ятһа-торһа, бер уй, бер маҡсат мейеһен ҡайнатты унын: нисек тә бынау йән биҙҙергес, кәмһеткес ҡоршауҙан ҡотолорға кәрәк. Хәйер, ирекҡә сыҡһа ла, хөкөм эйәләре уға көн күрһәтмәйәсәк. Һәр аҙымын һағалап торорҙар, яҙған бер шиғырынан бәйләнер кинәйә эҙләрҙәр. Нисек йәшәргә был аяуһыҙ донъяла? Китергә, мотлаҡ китергә!

Һуңғы йылдарҙа Сарайҙың күп кенә шағирҙары, ғалимдары, хандың ҡәһәренә юлыҡҡан ҡайһы бер ғәскәр башлыҡтары төрлөһө төрлө сит илдәргә китергә мәжбүр булды. Айырыуса Мысырҙың төрки мәмлүктәр араһынан сыҡҡан хөкөмдарҙары уларҙы ҡолас йәйеп ҡабул иткән икән.

Быға саса Сәйфетдинде Гөләндәм менән ҡауышыу өмөтө тотҡарланы. Хәҙер, был ниәт вөжүдкә ашмаҫас, ул яуыҙлыҡ ояһына әйләнгән, тәненә генә түгел, йәненә лә боғалаҡ һалған Сарай ҡалаһында бер көн йәшәй алмаясаҡ. Унын тыуған иленә, халыҡҡа хеҙмәт итергә ынтылыуы, яныу-көйөүҙәре бикәргә булды, күрәһең. Урын юҡ уға бында. “Ниңә фәләк[2] миңә йәбер ҡылды? Ниндәй гонаһым бар? Илаһым, кәмет йәберенде, мин илемдең тоғро улы инем...” — шулай һыҡтаны шағир, Аллаға ялбарып. Ни сара, ҡан һауған йө-

[1]Диван — шиғырҙар тупламы.
[2]Фәләк — күк йөҙө. Бында: тәҡдир мәғәнәһендә.

рәген уҫка йомарларға ла, “үҙгә йортҡа” барып, баш төртөргә ҡалды уға.

Әммә был хыялды ғәмәлгә ашырыу өсөн, тәүҙә ситлектән ҡотолорға кәрәк ине әле. Ҡасыу мөмкинлеге юҡ. Хан уны ебәрмәйәсәк.

Уйлана торғас, шағир Аҡъял хажиға сер сисергә ҡарар итте. Ә ниңә уға? Эш шунда, Олуғ әмир ижад кешеләрен хөрмәт итә. Әллә ни ярҙам күрһәтә алмай, әлбиттә. Улай ҙа, һирәкләп, уларҙың терәклеген хәстәрләшеп ҡуя. Был яҡшылыҡ Сәйф Сараиҙы ла ситләтеп үтмәне.

Әмәлгә ҡалғандай, хан саҡырыуы менән “Айыу өңө”нә килгән Олуғ әмир үҙе уны баҡсала йөрөп әйләнергә алып сыҡты.

— Һурығып киткәнһең, ауырыйһыңмы әллә? — тип хәстәрләште Аҡъял, баш сайҡап.

— Ауырыйым шул, хөрмәтле аға, — тине шағир шым ғына. — Тәнағзам һау, сирем күңел төбөндә...

— Был ни ғиллә! Хан менән икеғеҙҙең сырхауы бер төрлө икән дә баһа.

— Нисек бер төрлө булһын? Мин — тотҡон, хан — ситлек һаҡсыһы! Ни мәғәнә мине бында бикләп тотоуҙан? — тип шағир Аҡъялдың күҙенә ҡараны. — Һин, Олуғ әмир, — хөкөм эйәһе. Әгәр теләһәң, мине иреккә сығара алыр инең. Ҡыл ошо яҡшылыҡты!

Уның ярһыулы үтенесенән айбанып, хажи уйланып торҙо ла:

— Эй, шағир! Һаман аңламаныңмы ни? Ситлек асҡысы үҙ ҡулында бит! Хан көткән әҫәрҙе яҙыу менән дүрт яғың ҡибла булыр.

— Ситлектәге ҡош һайраймы ни? Өндәшеп ҡара ханға! Бынан сығарһағыҙ, бәлки яҙырмын да... — тине шағир, исем өсөн генә ыңғайға килгән булып.

— Мәғҡул! — тине Аҡъял хажи ҡапыл ризалашып. — Әйтермен ханға. Күндереп булһа инде...

Күндерҙе, күрәһең, улай ҙа. Ошо һөйләшеүҙең иртәһенә үк шағирға “Айыу өңө”нән китергә ижазат бирелде. Шулайын шулай, ләкин уны оҙатып-һаҡлап килгән ғөләмдән ҡотолорға кәрәк ине әле. Иң йәтеш урын — Оло баҙар. Улай-былай йөрөп, мыжғып торған халыҡ араһында эҙ яҙҙырыу ҡыйын булмаҫ, тип уйланы ул. Бәлки үҙ йомошо менән баҙарға килгән ауылдаштарын осратып, туған-тыумасаһының хәлен белешер.

Ҡамышлы кешеләренән бер-икеһен күрҙе-күреүен, ләкин уларҙан ишеткән хәбәре ҡыуандырманы уны. Атаһы һикһәнгә етеп, бер йыл элек донъянан үткән. Әсәһе Сәйфетдин ауылда саҡта уҡ вафат булғайны. Ҡайтып, һис юғы, ҡәберҙәрен зыярат ҡылһа, әруахтарҙың да йәне тынысланыр, үҙе лә сауаплы булыр ине лә бит, ҡайҙа инде ундай мөмкинлек. “Тәҡдирҙән уҙмыш юҡ шул... ”— тип көйөндө шағир, күҙҙәрен томалаған йәште һөртөп.

Ҡайғы өҫтөнә ҡайғы: ауылдаштарының әйтеүенә ҡарағанда, уның берҙән-бер ҡустыһын, йәше утыҙҙан үтеүенә күҙ йомоп, көслөк менән ғәскәргә алып киткәндәр. Ни күрә ҡатыны, бала-сағаһы? Алланың ҡәһәре һуҡһын Урҙа армайҙарын!..

Ғөләм баҙарҙа аҙашып ҡалды. Шағир, ҡайҙа барғанын бигүк абайламайынса, урам буйлап атлаған ыңғайҙа: “Эй, шыҡһыҙ донъя, был ғазаптарҙан ҡотолоу юҡмы ни миңә?! — тип әрнеп һамаҡланы. — Күптән түгел генә әллә күпме дуҫишем бар ине, төрлөһө төрлө яҡҡа таралып бөттө. Ғүмерлеккә тип һөйгән йәремдән айырҙылар. Иңемде иҙгән ҡайғыларымды уртаҡлашыр кешем юҡ...”

“Тәүбә, тәүбә! Бар ундай кеше”, — тип уйлауҙан йөҙө яҡтырып китте уның. Ысын, уның күптәнге танышы, данышман ҡарт дәрүиш Абрар бар бит. Ана шуны күрергә кәрәк! Яуыз түрәләрҙе фашлаған шиғырҙарын, биш-алты нөсхә итеп күсертеп алған диванын, ваҡ-төйәк әйберҙәрен ул дәрүиш һөжрәһендә тота ине.

Йәшлегендә Бағдад, Ҡаһирә мәҙрәсәләрендә уҡып, мәшһүр ғалимдар, әҙиптәр менән аралашып, Абрар үҙе лә төрлө яҡлап белемле аҡыл эйәһе булып танылған. Бының өҫтөнә уға күп илдәрҙе күрергә, ике тапҡыр хаж ҡылырға насип иткән.

Шағир уның күпте белеүенә, зиһене асыҡлығына һоҡланһа,

дәрүиш: “Мәғлүм ки, ятҡан таш мүкләнә, йөрөгәне шымара, — тип йылмая. — Мәгәр был сәфәрҙәрҙең һөйөнөсө генә түгел, көйөнөсө лә бар. Йөрөйһөң, күрәһең, һынайһың да, бәндәләрҙең яҙмышы тигеҙ түгеллегенә нығыраҡ ышанаһың. Берәүҙәре тормош юлын һыбай үтә, икенселәре, туҙан йотоп, сарсап-йонсоп йәйәү атлай...»

— Эйе, хаҡлыһың, тәҡсир, — тине шағир, ризалашып. — Мин дә был хаҡта йыш уйланам... Киске сәғәттәрҙә урам буйлап атлағанда иғтибар иткәнең барҙыр. Бер йортта ҡыуанышып күңел асалар, рубаб, най тауыштары яңғырай, икенсеһенән кемдәрҙеңдер әрнеп-әрнеп үкһеүе ишетелә. Бер урында данышман ғалим-ғөләмә аҡыллы әңгәмә ҡороп ултыра, икенсе ерҙә иҫеректәр аҡырыша. Бер ҡапҡанан яҡшы аттарға атланған түрәләр таһырлап килеп сыға, икенсе ҡапҡанан, ҡулдарын ай-йондоҙҙарға һоноп, Алланан мәрхәмәт һорап илашҡан махау сирлеләр төркөмө ауа-түнә сығып килә... Донъяның шатлыҡ менән ҡайғы-хәсрәттән тороуына миҫал бит инде был күренештәр...

— Бәрәкалла! Аҡыл-зиһенең үткер һинең, шағир, — тип, дәрүиш таң ҡалды.

Ул суфыйҙар мәҙһәбенең Сарай ҡалаһындағы шәйехе ине. Үҙ тирәһенә байтаҡ тарафдарҙар йыйған, йәштәрҙе уҡыу-яҙыуға өйрәтә, тәриҡәт юлына, шәриғәткә йөгөндөрә. Күп йылдарҙан бирле Сәйфетдин, ханаҡаға, дәрүиштең аулаҡ һөжрәһенә барып, уның менән һөйләшеп, йәненә таяныс таба.

Шәйех Сарай тормошондағы бөтә хәлдәрҙән хәбәрҙар. Уңған мөриттәре ҡаланың урам-майҙандарын, баҙарҙарын, каруанһарайҙарҙы, Иҙел ярындағы караптар туҡталышын арымай-талмай ҡыҙыра, хәбәр аулай. Шағирҙың мөхәббәт мажараһы ла, зинданға ябылып, аҙаҡ хан утарына алып барылыуы ла уға мәғлүм ине.

— Аллаға шөкөр, Аллаға шөкөр, иҫән икәнһең! Юғиһә... ханда ҡунаҡта оҙаҡланың. — Дәрүиш уны ҡосаҡлап алды. — Ултыр, һөйлә! — тип бойорҙо. Шағир үҙенең башынан үткән күңелһеҙ хәлдәрҙе һүткән арала ҡарт бер ағарҙы, бер ҡара көйөп күҙенән ут сәсте. Тыңлап бөткәс, һуҡранырға кереште: — Эй, шағир! Ниңә һаман китмәнең был нау уғрылар ояһынан? Күптән юлда булырға кәрәк ине бит һиңә. Аңларға ваҡыт: инсан өсөн яуызлыҡҡа ҡаршы халыҡ менән бергә күтәрелеү ҡыйын түгел. Иң ауыры — яңғыҙ көрәшеү! Урҙа әһеле йәшәү менән үлем ыҙанында, яу асырлыҡ көсө юҡ. Ғәҙеллек, иман, әхлаҡ аяҡ аҫтында. Аллаһы тәғәлә төҙәтә алмаған донъяны бер үҙең ипкә һалырмын тиһеңме ни? Бер ҡатлы булма, шағир!

— Аңланым, тәҡсир. Аңлаттылар, — тип әсенеп яуапланы Сәйфетдин.

— Аңлағас, шул: оҙаҡламай Шам[1] тарафтарына ҡайтасаҡ каруан үрҙән караптар туҡталышына килеп етәсәк, — тине дәрүиш тыныслана төшөп. — Шуға ҡушылырға ниәтләһәң, мин каруан хужаһына хәбәр итермен. Изге күңелле, ярҙамсыл сауҙагәр ул. Һүҙемде йыҡмаҫ, өс карабының береһенә ултыртыр.

— Мең тәшәккүр, остаз! — Шағир баш эйеп уға рәхмәт белдерҙе. — Ғәфү ит, хөрмәтле ата, беҙҙең халыҡта “Теләнсегә хәйер бирһәң, ямаулыҡ һорай”, — тигән әйтемсә бар... Шуның һымаҡ, бик-бик үтенәм... Хат яҙһам, минән хәбәр көткән кешегә тапшырыуы әмәлен тапмаҫһыңмы шуны?

— Яҙ, яҙ!.. — тине дәрүиш, уға ҡағыҙ, ҡәләм биреп. — Кемгәлеген әйтмәһәң дә беләм. Ул бикә һине эҙләп бында килеп киткән икән...

— Эй, тәҡсир, ни көндәргә төшөрҙөләр бит бәхетһеҙ ханымды!.. Тәҡдиребеҙ шулдыр, — тип шағир йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан һүҙҙәрен ҡағыҙ битенә теҙергә тотондо.

— Ҡисмәт[2]... Йәшлектә кәминә[3] лә шундай уҡ мәңге онотолмаҫ юғалтыу, үкенеү кисергәйнем... Хәлеңде аңлайым. Түҙергә кәрәк, бүтән сара юҡ... —Дәрүиш аһ ороп,

[1]Шам — Сурия (Сирия).
[2]Ҡисмәт — яҙмыш, тәҡдир.
[3]Кәминә — мин фәкирең тигәнде аңлата.

тауышын баҫыбыраҡ доға ҡылырға кереште.

Шағирҙың ҡулы ҡалтырап, ҡәләме төшөп китте. Йәне әрнеүҙән ни әйткәнен һиҙмәй ҡалды:

— Һин, исмаһам, доға уҡып йыуанаһың, ә минең телем дә, күңелем дә йоҙаҡлы. Бер теләгем дә ҡабул булмағас, гонаһ шомлоғона, Аллаға һүҙ тейҙереп, үпкәләп ҡуям хатта...

— Ауыҙыңдан ел алһын! — Абрар тиҫбеһен ҡуйынына тыҡты. — Көфөр һөйләмә, өмөтһеҙ — шайтан ғына...

Ханаҡанан сығып йөрөргә ярамай ине шағирға. Моғайын, шымсылар ҡаланы бер итеп уны эҙләйҙәр. Тапһалар, тағы зинданға ҡамауҙары йәки "Айыу өңө"нә илтеп тапшырыуҙары көн кеүек асыҡ.

Ҡулына эш барманы Сәйфтең. Башлаған шиғырҙары тамамланмай ята. Уның бөләңгерт хистәренән ҡурҡҡан кеүек, илһам ҡошо, яҡында ғына осоп йөрөһә лә, шағирҙың иңбашына ҡунмай.

Бынан тыш, Гөләндәм бикәгә ебәрелгән хатына һаман яуап юҡ. Тимәк, тағы яҙырға кәрәк. Яҙырға, көтөргә. Көтөүҙән, уны-быны уйлап көйөнөүҙән башҡа бер ни ҡыла алмай инде ул. Әлдә ярай, ҡарт дәрүиш уның йөгөнә керергә, аҡыллы әңгәмәләре менән йыуатырға әҙер.

— Йәп-йәш егет түгелһең, хистойғоно ауыҙлыҡлай белергә ваҡыт һиңә, — тип өгөтләй дәрүиш. — Был арала шиғыр ҙа яҙмайһың шикелле. Уян әле йоҡонан!

— Эй, тәҡсир! Кемгә кәрәк минең шиғырҙарым!? Бәндәләрҙең гәмендә шиғыр түгел, тереклек хәстәре. Дөрөҫөн әйткәндә... уйлайым-уйлайым да, яҙышыуҙан туҡтарғамы әллә тип ҡуям.

— Аб-ба! Уйлайым тиһең дә бит, быны уйламайыраҡ әйттең шикелле, — тине шәйех, ҡулын шағирҙың яурынына һалып. — Һүҙ оҫталығы, шиғриәт сере Хоҙайҙан ул, энем. Унан баш тартыу — ҙур гонаһ. Икеләнмә, бөгөн булмаһа, киләһе быуын кешеләре һинең ғәзәл-ҡасидәләреңдән, дастандарыңдан йәндәренә дауа, күңелдәренә зауыҡ табырҙар.

— Ул тиклемен күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Әллә барып етә уларға минең яҙмалар, әллә юҡ. Тимәк...

— Туҡтап тор! — Шәйех ҡашын төйөп, уның һүҙен бүлдерҙе. — Үтмештең бөйөк шағирҙарының әҫәрҙәрен уҡып ләззәт тапмайбыҙмы ни? Уларҙың ҡайһы берҙәре бынан мең йыл элек йәшәгән!

— Эйе... бөйөктәрҙең һүҙе алтын-көмөштән ҡиммәтлерәк.

— Иманым камил, һинең һүҙең дә шулар янында урын табыр... Бер ҡисса иҫкә төштө. Шиғриәт тураһында булмаһа ла, харап ғибрәтле ул. Һинең икеләнеүеңә яуап...

— Тыңлайым, тыңлайым! — тине шағир, ихласлыҡ белдереп.

— Эйе... — Ҡарт дәрүиш тамағын ипләп һүҙен дауам итте. — Иран дәүләтенең боронғо данлыҡлы батшаһы Анушퟀирван шаһ, ярандарын эйәртеп, һунарға китеп бара, имеш. Бер ауыл ситендә сәтләүек ағасы ултыртып йөрөгән туҡһан йәштәрҙәге ҡартты күреп, бик ғәжәпләнә: "Эй, аҡһаҡал, — ти уға, — сәтләүектән ауыҙ итеү өсөн тағы нисә йыл йәшәргә уйлайһың? Сәтләүек ағасы егерме йылдан ғына емеш бирә икән бит!" Ҡарт: "Улар ултырҡҡайны — беҙ ашаныҡ, беҙ ултыртабыҙ — улар ашар", — тип яуап ҡайтара, ҡулын тәүҙә мәғриб тарафына, унан мәшриҡҡә[1] һуҙып.

Хикмәтле ҡиссаға, айырыуса ағас ултырҡҡан аҡһаҡалдың яуабына шағир хайран ҡалды. Үҙе лә боронғо фәйләсуф әл-Фарабиҙың[2]: "Артҡа боролоп ҡарап, үтмештән фәһем ал, алға ҡарап, юлыңдың юҫығын аныҡла", — тигән һүҙен хәтерләне.

Дәрүиш күҙен китапҡа төбәне. Шағирға иһә яҙа башлаған хатын тамамларға кәрәк ине. Ошо ваҡыт йәш мөриттәрҙең береһе, ашығып килеп кереп, остазының ҡолағына

---

[1]Мәғриб — көнбайыш, мәшриҡ — көнсығыш. Мәғриб шулай уҡ төньяҡ Африкалағы ғәрәп илдәре.

[2]Әл-Фараби (Әбү Наср Мөхәммәт ибн Тархан әт-Төрки әл-Фараби, 870-950) — Аристотелдән ҡала уны "Икенсе Остаз" тип ҙурлағандар.

низер шыбырҙаны. Шәйех ағарынып китте, амин тота һалып, урынынан торҙо ла:

— Тиҙерәк, тиҙерәк! — тине, шағирҙы артҡы ишеккә табан етәкләп. — Һин аптырама, шулай кәрәк! Бынау егет һине хәүефһеҙ ерҙә урынлаштырыр, әйберҙәренде аҙаҡ алып барыр. Ярай, хуш, минән хәбәр көт! — тип ҡосаҡлап һаубуллашты...

Үҙ итеп, һәр ваҡыт ярҙамлашып килгән изге күңелле суфый шәйехте ҡабат күрергә яҙмаҫ, күрәһең, уға. Аҙна үткәндә теге егет ҙур ғына төйөнсөктә шағирҙың кейем-һалымын, ҡәҙерләп һаҡлаған китаптарын килтерҙе, ҡарт дәрүиштең фатихаһын, Ҡаһирә ҡалаһында йәшәүсе дуҫына, тәриҡәт юлындағы тарафдарына яҙған хатын тапшырҙы.

Иртәгәһенә иртүк урыҫ еренән ҡайтып барыусы өс ҙур карап Сарай туҡталышына килеп етте, ә ике көндән Иҙелдең түбәненә, унан Хазар диңгеҙенә юл аласаҡ.

Шағирҙы һаҡлап йөрөгән йәш дәрүиш уны, каруан хужаһы Әбүбәкер сауҙагәр менән таныштырып, оҙатып ҡалды.

Өң-башын алмаштырып, йөксө ҡиәфәтенә кергән Сәйфетдинде танырлыҡ түгел ине. Караптарҙа йөҙгә яҡын кеше. Ҡораллы һаҡсылар, йөксөләр, ишкәксе ҡолдар, каруанға йылышҡан осраҡлы юлаусылар.

“Хуш, тыуған илем! — тип алыҫ юлға сыҡты шағир, күҙенә төйөлгән асы йәште һыпырып. — Насип булырмы ғәзиз еремә ҡабат аяҡ баҫыу?”.

Йәшерен йортта, шәйехтән хәбәр көтөп, яңғыҙы моңайып ултырғанда Гөләндәмгә яҙаһы икенсе хатты тамамлағайны инде ул. Уны оҙатыусы егеткә биреп ҡалдырҙы. Тапшырырҙар, иншалла...

Шуныһы борсоно шағирҙы: әйтер һүҙҙәрен еренә еткереп яҙа алдымы? Берәй мөһим фекере төшөп ҡалманымы? Шуға күрә ул хатты яңы баштан хәтерләргә, күңеленән тәкрарларға кереште. Юлын — юлға, һүҙен — һүҙгә.

“Һөйөклөм! Яҡты шәмсырағым! — тип өндәште ул ғәзиз мәғшүкәһенә. — Бына тағы мәктүб яҙам һиңә. Хушлашыу һүҙҙәремде. Игелекле инсандар ярҙамында минең зарлы ауазымды ишеткәйһең... Ниндәйҙер сәбәптән барып юлыҡмауы ла бар уның, ләкин мин яҙмай булдыра алманым! Үҙеңә мәғлүм, эс серҙәремде, һағыныу-юҡһыныуҙарымды урталашыр кешем бары тик һин генә бынау аяуһыҙ донъяла!..

Аҙаҡҡы тапҡыр ят күҙҙәрҙән ҡасып осрашҡанда һығылып илауың онотторлоҡ түгел. Эй, йәнемдең параһы, йөрәгемдең яраһы! Ниңә, ниндәй гонаһтарыбыҙ өсөн беҙгә был ғазаптар?..

Мәрхәмәтһеҙ ҡисмәт, ишетәһеңме беҙҙең һыҡтауҙарыбыҙҙы? Күргән-кисергән яфаларыбыҙ аҙ инеме ни? Ниңә һин юл ҡуйҙың наҙлап үҫтергән өмөт гөлдәребеҙҙе йолҡорға? Яуыздар беҙҙе айырҙылар, ҡанаттарыбыҙҙы ҡайырҙылар, нә сара?! Берҙән-бер теләгем — гөлсәр күктәрҙә, баҡый донъяла йәндәребеҙ осрашһа ине...”

Бараһы еренә барып еткәс тә былдай хаттарҙы йыш яҙасаҡ әле ул. Күбеһе, ебәреү мөмкинлеге табылмау сәбәпле, һандыҡ төбөндә ятыр йә күңелендә генә һаҡланыр. Әммә шуныһы хаҡ: үҙенә яҡты йөҙ күрһәтмәһә лә, тыуған илен һағынып хәтерләгән кеүек, Гөләндәмде лә ғүмеренең аҙағынаса онота алмаясаҡ ул...

## 4

Сарай туҡталышынан ҡуҙғалып киткәс, караптар аҙым ыңғайына йылдам барҙы. Һис ниндәй бәләҡазаға осрамайынса, Хазар диңгеҙенәсә ара ни барыһы ун биш көндә уҙылды. Әммә юлсыларҙың, айырыуса хаж сәфәренә сыҡҡандарҙың, ризаһыҙлыҡ белдереүенә ҡарамаҫтан, Хажитарханда туҡталыш аҙнанан артыҡ ваҡытты алды. Бында йөктәрҙең ҡайһы берҙәрен бушатырға, бүтәндәрен тейәргә кәрәк булған икән.

Ниһайәт, юлаусыларҙың ҡыуанысына, караптар ҡуҙғалып китте. Йәй бөтөүгә, көҙ яҡынлашыуға боролған мәл ине. Көн үҙәгендә ярайһы уҡ ҡыҙҙырһа ла, кискә табан һалҡынайта, килеп-килеп ямғыр яуып ебәрә. Диңгеҙгә барып

сыҡҡас иһә көндәрҙең йонсоулығы тағы ла нығыраҡ һиҙҙерә башланы. Елкән һайғауҙарын ауҙарырҙай итеп көслө ел ҡупты, ямғыр шәбәйгәндән-шәбәйҙе.

Караптарҙың хужаһы сауҙагәр Әбүбәкер, баш борамсыларҙы үҙ янына саҡырып, кәңәш-төңәш иткәс, һәр карапта берәр генә тәпәш елкән ҡалдырып, бүтәндәрен төрөп бәйләргә, йөрөштө, һаҡлыҡтан, яр яғалабыраҡ дауамларға булдылар.

Ошоға ҡарамаҫтан, тау-тау тулҡындар караптарҙы бер тегеләй, бер былай өйөрөлттө, ваҡыт-ваҡыт өҫтәренә ябырылды. Әлдә ярай, ҡойроҡсолар тәжрибәле ине. Оҙон күсмән ишкәгенә икешәрләп тотоноп, бына-бына упҡын йота тигәндә, карапты тейешле йүнәлешкә борҙолар.

Дауыл ҡоторғандан-ҡоторҙо. Көнбайыш тарафтан аҡтарылып килгән болоттар күк йөҙөн ҡаплап алды. Шунлыҡтан һыу даръяһы менән күк көмбәҙе тоташҡандай, юлсылар алдында йырып үтмәҫлек ҡап-ҡара диуар ҡалҡып баҫҡандай ине. Көн менән төндөң айырмаһы ла, сиге лә юғалды.

Диңгеҙ юлының тәүге көндәре дауыл менән айҡашып уҙҙы. Хажға барыусы тәҡүәләр, туҡтауһыҙ тәкбир әйтеп, Аллаһы тәғәләгә был дәһшәттән ҡотҡарыуын һорап ялбарҙылар. Нәҙерҙәр әйтелде, хатта ҡорбан салынды.

Шағир иһә Аллаға һыйыныу менән сикләнмәне, ҡулынан килгәнсә йөксөләргә ярҙамлашып, урындарынан шыуған ауыр әрйәләрҙе, ҙур-ҙур төргәктәрҙе нығытып бәйләп йөрөнө. Улай ҙа башы әйләнеүҙән, күңеле болғаныуҙан тамаҡ ялғай алманы, күберәген берәй мөйөштә ауырып ятты. Тәжрибәле диңгеҙселәр аңлатҡанса, уның сырхауы “диңгеҙ сире” тип атала, имеш. Шуларҙың уҡ әйтеүенә ҡарағанда, диңгеҙ тыныс ваҡытта был юл ике аҙнала үтелә икән.

Мосафир бәндәләрҙең йәш түгеп теләгән теләктәре ҡабул булды, ахыһы. Өс аҙна уҙыуға дауыл баҫылды, һыу өҫтө тыныслана башланы. Болоттар таралып бөткәс, көндөҙҙәрен ҡояш балҡыны, төндәрен аяҙ күктә йондоҙҙар тоҡанды.

Караптар бер-береһе менән хәбәрләшеп, елкәндәрҙе киреп ебәрҙе. Хәлдән тайған ишкәксе ҡолдарға бер көнлөк ял бирелде, ҡойроҡсыларҙың да эше еңелләште.

Хажитархан туҡталышынан ҡуҙғалып китеүгә ай тулып килгәндә, сәйәхәтселәрҙең ҡыуанысына, диңгеҙ юлы тамамланды. Ныҡ ҡына таушалған өс карап, Хазар диңгеҙенең көньяҡ ярында һил ҡултыҡҡа һыйынып ултырған Астара ҡалаһына етеп, ике йәпле туҡтатҡыс ырғаҡтарҙы һыу төбөнә батырҙылар.

Был туҡталыш сәфәрҙең аҙағы түгел ине әле. Бушатылған йөктәрҙе артабан дөйә каруанында алып китәсәктәр. Бер аҙналыҡ ялдан һуң каруан Дәмәшеҡ ҡалаһына йүнәләсәк.

Астаранан Дәмәшеҡкәсә юлды каруан ай ярымда үтә икән. Ә унан Ҡаһирәгә тиклем тағы ике аҙна самаһы.

Әбүбәкер сауҙагәр Сәйфетдинде каруан башы менән таныштырып: “Был егет — минең бер туған энем. Ул һине имен-аман йөрөтөр, Дәмәшеҡтән китәһе берәй таныш каруансы хәстәрлегенә тапшырыр. Иншалла, юлың уң килер”, — тип өмөтләндерҙе. Ҡустыһы, Мансур исемле утыҙ йәштәрҙәге асыҡ сырайлы, мыҡты кеше, ҡулын күкрәгенә баҫып, шағирға түбәнселек менән баш эйҙе, уны яҡшы атҡа атландырып алып барырға вәғәҙә бирҙе.

Был ике бер туған, Сарай ҡалаһындағы абруйлы ҡарт дәрүишкә хөрмәт йөҙөнән, Сәйфетдинде ҡанат аҫтына алдылар. Карапта килгәндә өлкәне, илтифат ҡылып, уны һәр ваҡыт үҙ янына табынға саҡырыр булды, дөйә каруанын оҙатҡанда уға, кәрәге тейер тип, күн янсыҡҡа һалып байтаҡ көмөш аҡса биреп ебәрҙе. Шағирҙың уңайһыҙлыҡ кисереп, аҡсаны алырға теләмәүенә: “Зинһар, ҡулымды ҡайтарма, — тип инәлде. — Диңгеҙҙә дауыл ҡоторған саҡта, Астараға иҫән-һау ҡайтып етһәк, берәй мосафирға хәйер бирергә нәҙер әйткәйнем... Хәлеңде беләм. Мөхтәрәм шәйех миңә яҙған мәк-

түбендә эштең ул яғын да аңлатҡайны.

Шағир тынысланды. Була бит миһырбанлы, йомарт кешеләр. Юғиһә сауҙагәр халҡын “Бер динарҙы бишкә әйләндерә алмаһа, йоҡонан яҙа улар”, тип кәмһетәләр. Һарандар, өҙгөстәр, йәнәһе. Буш һүҙ икән. Хәйер, кемдең кеме юҡ...

Каруан башы Мансур уҡымышлы, китап яратыусы кеше булып сыҡты. Аттарын яй ғына юрттырып йәнәш барған ыңғайҙа, ваҡыт үткәреү өсөн, Сәйфетдин берәй мәшһүр шағирҙың гәзәленән ике-өс мисраны яттан әйтеүгә Мансур уны шундуҡ элеп ала, башын артҡа ташлай биреп, әҫәрләнеп дауам итә. Йә ул башлай, ә юлдашы шиғырҙың аҙағын һамаҡлай.

Бынан тыш улар донъя айышы, төрлө халыҡтарҙың үтмеше, ғөрөф-ғәҙәттәре, бөгөнгө хәле тураһында фекер алышалар. Шәреҡ илдәренең күбеһенә каруан йөрөткәндә Мансур әллә ни саҡлы ғибрәтле хәбәрҙәр, фәһемле ҡиссалар, хикәйәттәр ишеткән. Шуларҙы ҙур зауыҡ менән һөйләп, Сәйфетдинде кинәндерә.

Һөйләшеү ғәрәпсәнән фарсыға, фарсы теленән ғәрәп теленә күсә, унан үҙлегенән тиерлек төрки өҫтөнлөк ала. Ҡайһы ил хаҡында һүҙ барһа, әңгәмә шул халыҡ телендә.

Йәшлегендә Сарай мәҙрәсәһендә уҡыған йылдарҙа ғәрәп, фарсы телдәрен камил өйрәнеүенә ҡыуанып бөтә алманы шағир.

Мансурҙы әйтергә лә түгел. Илгиҙәр каруансы, сауҙа кешеһе булараҡ, төрлө телдәрҙә иркен һөйләшеүе көндәлек ихтыяжына әйләнгән уның. Тыумышы Тәбриз ҡалаһында икән. Тимәк, фарсыларҙан. Ә төркиҙе һәйбәт белеүенә сәбәп — мәрхүмә әсәһе һарттар ырыуынан булған. Ғәрәп телендә шулай уҡ балалығынан һөйләшеп үҫкән, сөнки тыуған ҡалаһында өс ғаиләнең береһе мотлаҡ шунда тыуып-үҫкән ғәрәптәр икән.

Тәбриздә өс көнгә туҡталып ял иткән арала Сәйфетдин Мансурҙың емеш ағастарына сорналып ултырған зиннәтле йортонда йәшәне.

Ҡуҙғалып киткәс, Мансур, ҡамсыһын уйнатып:

— Бер айҙан, Алла бойорһа, Дәмәшеҡкә барып етәбеҙ! — тип йылмайҙы.

Алсаҡ тәбиғәтле юлдашының ҡыуанысын уртаҡламаны шағир. Киреһенсә, юлдың оҙонлоғона, көндәрҙең таш эретерҙәй эҫелегенә үкенә биреп:

— Бар икән күрәһеләрем! — тип көрһөндө.

Шуны ғына көткән һымаҡ, Мансур:

— Эй, мөхтәрәм аға, төптән уйлағанда, юлдың оҙоно-ҡыҫҡаһы шартлы ғына бит ул! — тине лә Сәйфетдингә билдәһеҙ телдә ниҙер һамаҡларға кереште.

— Тауышыңдың тибрәнеүенән, шиғыр әйтәһең, ахырыһы, тип фараз ҡылам. Дөрөҫмө? Ҡана, ҡайһы телдә, ни хаҡта ул? — Шағир ҡыҙыҡһыныуын йәшермәне, эйәрҙән үрелеп, уның атының теҙгенен эләктерҙе. Ашыҡма, йәнәһе.

— Аңлайым, юл еңел түгел. Арының... Ә мин һамаҡлаған һүҙҙәр һинең үкенеүеңә яуап, — тине Мансур, серлерәк төҫтә йылмайып. — Фаразың дөрөҫ, шиғыр ул. Боронғо Чин[1] иленең бөйөк шағиры Ли Бо[2] яҙған.

— Бына ғәжәп! Чин телен дә беләһеңме ни?! — Юлдашының аҡыл-зиһен байлығына хайран ҡалды Сәйфетдин.

— Бигүк камил белмәйем шул, аға. Үҙемә кәрәк тиклем генә. Ә уларҙың яҙыуын өйрәнергә бөтөн ғүмерең етмәҫ.

— Улайһа теге шағирҙың шиғырын ҡайҙан беләһең? Кем тинең әле исемен?

— Ли Бо... Таныш чин сауҙагәренең уҡыуынан отоп, үҙебеҙҙең хәрефтәр менән яҙып, биш-алты шиғырын ятҡа биклә гәйнем.

---

[1]Чин — Ҡытай.

[2]Ли Бо (йәки Ли Тайбо) — 701-762 йылдарҙа йәшәгән ҡытай шағиры. Тәбиғәт күренештәрен тасуирлаған, кеше рухының азатлығын яҡлаған, һуғыштарҙы, яуыз түрәләрҙе ҡәһәрләгән.

— Миңә лә тәржемә итеп бирһәңсе, — тип үтенде шағир.

— Шиғыр ҡалыбына һала алмам. Мәғәнәһен әйтеп бирһәм генә...

— Шуныһы ла еткән. Тыңлайым!

— Һин юлдың алыҫлығына көйөнгәс, Ли Бо шиғырын хәтерләнем дә. Ул былай тигән: "Эргәләге — алыҫ, йыраҡтағы — яҡын". Быны һинең үҙеңә күсерһәк, ә? Тыуған илең ят күргәс, унда саҡта ул һинән алыҫ түгел инеме ни? Йәнә: сикһеҙ йыраҡ тойолған Ҡаһирә ҡалаһын күңелеңә яҡын итеп һанамайһың-мы ни?

— Иҫ китмәле! Дөрөҫ, ысынлап та, шулай булып сыға ла баһа... Ҡара әле, Мансур энем, ҡасан йәшәгән ул Ли Бо? Ниндәйерәк шағир?

— Мин ни... Теге сауҙагәрҙән ишеткәнемдә генә һөйләй алам инде. Бынан алты йөҙ йыл элек йәшәгән ти ул. Шул замандағы Чин батшаһы хөкүмәтендә күренекле һанат булған. Тәрән мәғәнәле шиғырҙарын, хикмәтле ҡиссаларын чиндарҙың күбеһе хәҙер ҙә ятҡа әйтеп йөрөй икән. Әммә уға ҙур хөрмәт менән ҡараған батшаның вафатынан һуң тәхеткә ултырған хөкөмдар Ли Боның үткер тәғриздәрен[1] үҙенә ала. Ә унан да бигерәк шағирҙы баш күтәреүсе халыҡты яҡлауы өсөн күрә алмай. Аҙағы билдәле: яуыз батша уны хеҙмәтенән бушата, ғаиләһенән айырып, өс йыл буйы зинданда зарыҡтыра... Ғәҙеллек өҫкә сыға улай ҙа. Батша халыҡ тарафынан ҡәһәрләнә, исеме онотола. Ә шағир бөгөнгө көнгәсә ил телендә!

— Ҡайҙа ла бер донъя инде. Хөр фекерле инсанға, тура һүҙле ижад кешеһенә көн юҡ, — тип аһ орҙо Сәйфетдин.

— Эй, хөрмәтле ағаМ! Эй, шағир! — тип Мансур уны йыуатырға керешә. — Төшөнкөлөккә бирелмә, зинһар! Бына һин бер шиғырында: "Ни өсөн фәләҡ миңә йәбер күрһәтте? Ниндәй гонаһым бар?" — тип зарланаһың. Йәнә Сарайҙағы шәйехтең ағайыма яҙған хатында һөйгән йәрең менән ҡауыша алмауың тураһында ла әйтелгән. Аңлайым, ҡайғы-хәсрәттәрең, үкенеү-юҡһыныуҙарың биниһая[2]. Әммә, Мысыр илендә ҡәҙер-хөрмәт күрһәң, йәнең теләгәнсә яҙыша башлаһаң, тынысланырһың, Алла бойорһа! Бәлки һөйгәнең менән дә табышырһығыҙ...

— Уныһы булмаҫ инде, Мансур. Йәш кеше түгелмен бит инде мин...

— Баяғы чин шағиры бер шиғырында әйткән икән: "Ел осорған япраҡтар, үлән һабаҡтары, ҡайҙа осһалар ҙа, һыуға төшөп, берәй ваҡыт диңгеҙҙә осрашырҙар. Бәндәләр ҙә шулай: илдәр гиҙеп, ҡасандыр бер табышырҙар..." Мәғәнәһен генә килтерҙем. Юғиһә үҙ телендә харап матур яңғырай был шиғыр, — тип һығымта яһаны Мансур.

— Ышанам, шулайҙыр, — тине шағир уйсан төҫтә. — Мәғәнәһенә килгәндә, мин... беҙ әхирәттә генә табышмаһаҡ, донъялыҡта осрашмабыҙ инде. Ли Бо диңгеҙ тигәндә әхирәтте күҙ уңында тотҡандыр ҙа әле... Афсус, ғүмер сикле... Шуны әйтәм: их, теге чин шағирының китабын уҡыйһы ине! Бик тә нескә күңелле, данышман кеше булғанға оҡшай ул.

— Аллаһы тәғәлә ижазаты менән Чинға тағы барырға насип булһа, күпләп күсереп алырмын. Һүҙен — һүҙгә, юлын — юлға инде. Ә һин, осраша ҡалһаҡ, уларҙы төркисә йә фарсы телендә шиғырға һалырһың. Ғәжәп файҙалы эш булыр ине! — тип Мансур үҙенең изге ниәтен алға һөрҙө.

— Ысынлап та!

Боронғо шағирға мөкиббән ғашиҡ ине Мансур. Күҙен йылтыратып, һаман уны һөйләне:

— Ул, хөрмәтле аға, ҡиссалар ҙа яҙған. Бына уның шағирҙар тураһында әйткәне: "Ғилем йәшлектә генә йыуаныс килтерә, бәлиғ булғас, уны иҫәпкә лә алмай шағир. Ә ҡартлыҡта, белгәндәрең шиғриәткә күсмәһә, унан ни файҙа?.." Ҡыҙыҡлы фекер бит, ә!

— Ҡыҙыҡлы ла, ғибрәтле лә! — тине Сәйфетдин, юлдашының һүҙен ҡеүәтләп. — Раҫтан да шулай! Шағир ғүмере буйы үҙе күргән-ки-

---

[1]Тәғриз — кинәйә.
[2]Биниһая — иҫәпһеҙ күп.

сергән хәлдәрҙе, китаптарҙа тупланған аҡыл хазинаһын зиһененә һеңдерә, йөрәге аша үткәреп, шиғыр юлдарына һала. Шиғриәт аҡыл менән хистең бер бөтөнгә ойошоуынан тыуалыр ҙа...

Уҡымышлы, зауыҡлы, шиғриәтте яратыусы кешегә юлдаш булыуын Алланың мәрхәмәте иҫәпләп, Сәйфетдин ҡыуанып бөтә алманы. Уйланы-уйланы ла уға Сарайҙа саҡта ҡулы оҫта хаттаттан биш-алты нөсхә итеп күсертеп алған диванының бер данаһын бүләк итергә булды. Мансурҙың шатлығы сикһеҙ ине:

— Әлдә минең каруанға юлыҡтың, аға! Алтын Урҙаның мәшһүр шағиры Сәйф Сараи менән ай буйы бергә сәфәрҙә булыуҙы кем уйлаған. Китабың өсөн мең тәшәккүр! Ҡәҙерләп һаҡлармын...

Шәғбән айының баштарында каруан ҡаланың шимал[1] ҡапҡаһынан Дәмәшеҡҡә барып инде.

Мансур йөктәрен бушатҡан, урынлаштырған арала шағир Шам иленең башҡалаһын тамаша ҡылып йөрөнө. Изге күңелле Мансур бында ла хәстәрлек күрҙе, уның менән бергә каруан һаҡсыларынан береһен сығарып ебәрҙе.

Шағир нык ҡына арығайны. Арымаҫлыҡмы ни: Хазар диңгеҙенең ҡот осҡос дауылы, аҙаҡ ай буйы эйәрҙә һуғылыу эҙһеҙ үтмәне. Шуға ҡарамаҫтан, Мансур бер аҙнанан ҡалмай Ҡаһирәгә ҙур каруан китәһен әйткәс, ул икеләнеп торманы, сәфәрҙе дауам итергә уйланы.

Был юлы ла һәйбәт кешеләргә тап килеүен ул яҡшыға юраны. Алла мәрхәмәте илә, етәһе еренә лә етер, ҡағылмай-һуғылмай йәшәрлек урын да табыр. Ҡуйынында Сарайҙан ҡарт дәрүиш биреп ебәргән хат та бар. Уны тәғәйен кешеһенә тапшырһа, урамда ҡалмаҫ, иншалла. Аҙаҡ үҙ йүнен үҙе күрер...

Ҡаһирә каруанының башлығы Мансурҙың дуҫы икән. Ул да шағирға илтифат күрһәтте, йомшаҡ йөрөшлө йыуаш дөйәгә атландырҙы.

Сарайҙағы суфый шәйех йәшлегендә күп сәйәхәт иткән, төрлө илдәрҙе күргән. Шул сәфәрҙәрен хәтерләп, йыш ҡына: “Юлда ике нәмә мөһим. Беренсеһе — меңгең яҡшы булһын. Икенсеһе — юлдашың ышаныслы булһын”, — ти торғайны. Бының шулай икәнлеген Сәйфетдин оҙайлы сәфәренең башынан бирле үк һынап килә. Сарайҙан ҡуҙғалып киткән көндән Астараға еткәнсе сауҙагәр Әбүбәкер ихлас әңгәмәҙәше булды, уның бөтөн ихтыяжын үҙ өҫтөнә алды. Мансурҙы әйтергә лә түгел. Изгелекле, игелекле егет. Бының өҫтөнә, мәғлүмәтле булыуы, шиғриәтте мөкиббән яратыуы менән тамам арбаны мосафир шағирҙы.

Оҙон юлды күтәренке кәйефтә дауам итте Сәйфетдин. Еңел аяҡлы дөйә һыртында бәүелеп барған ыңғайҙа ул, фарсы шағиры Мөслихиддин Сәғдиҙең “Гөлстан” дастанын эстән генә ятҡа ҡабатлап, уны нисегерәк төркисәгә әйләндереү, яңыса үҫтереп алып китеү мөмкинлектәрен тоҫмалланы. “Алла ярҙам бирһен!..” — тине ҡәнәғәтлек кисереп. Ҡаһирәгә барып етеү менән хәҙер үк күңелендә ярала башлаған шиғыр мисраларын, хикмәтле ҡиссаларҙы ҡағыҙға күсерергә тотонасаҡ ул...

Көҙ булһа ла, көндәр сыуаҡ, еләҫ. Тирә-яҡ тәү ҡарауға буш күренһә лә, әлдән-әле боронғо ҡалаларҙың моңһоу харабалары, йәшел үҙәндәр, тәпәш кенә тауҙар осрай. Юл ҡайһы берҙә емеш баҡсалары ураткан эреле-ваҡлы ауылдар эргәһенән уҙа.

Көндөҙгө ҡыҫҡа ял ваҡытында ла, кис ҡуналҡаға туҡталғанда ла каруан янына әллә күпме һыбайлылар йыйылып китә. Улар ошо осһоҙҡырыйһыҙ сәхрәләрҙә йәшәүсе “бәдәүи” аталмыш күсмәнсе ғәрәптәр икән. Шуныһына иғтибар итте шағир: өҫ-баштары ғәҙәтсә генә йәки хатта насар булһа ла, бөтөнөһө уйнаҡлап торған һөлөктәй аттарға атланған, ҡорал-яраҡтары, эйәр-өпсөндәре ялтырап тора.

Каруандың ҡайҙан килеп, ҡайҙа юл тотоуына ҡыҙыҡһыныуҙан тыш, улар үҙҙәренә кәрәкле көллө монаяттарҙы һатып алырға теләйҙәр. Каруансылар сүл кешеләренең ихтыяжын белә, күрәһең. Тиҙ үк һатыу-

[1]Шимал — төньяҡ.

алыу ҡыҙып китә. Һауыт-һабаны, ҡыйбатлы туҡымаларҙы, көмөш ҡынлы хәнйәрҙәрҙе, ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеш әйберҙәрен бәҙәүиҙәр, артыҡ һатыулашмайынса, күмәртәләп ала ла ҡуялар. Үҙҙәре иһә яңы ғына һуйылған ҡуй ите, ҙур-ҙур муртайҙарҙа боҙҙай һалҡын шишмә һыуы килтерә. Былары — бүләк, ҡунаҡсыллыҡ билгеһе. Ә иң мөһиме — юл баҫыусы аламансылар биләмәһе иҫәпләнгән хәүефле урындарҙан үтеп киткәнсе каруанды оҙатып баралар. Яҡшы аттарҙы, затлы ҡоралды яратыусы, һил холоҡло, ләкин кәрәк саҡта ҡурҡыу белмәҫ яусыл халыҡ икән бәҙәүиҙәр...

Юлдаштарҙан бында ла унды шағир. Бигерәк тә Һиндостандан ҡайтып килгән сәйәхәтсе менән танышыуы ҡыуаныслы булды. Ҡырҡ биш йәштәрҙәге ерән һаҡаллы, яшыҡ ҡына Аурело тигән был кеше төрлө илдәрҙең тарихын, мәҙәниәтен, ғөрөф-йолаларын өйрәнеп йөрөүсе илгиҙәр ғалим булып сыҡты. Әле, Һиндостанда сәйәхәттә ваҡытында, унда еңелеү белмәҫ йыһангир Тимур ғәскәренең баҫып инеүен ишеткәс, осраҡлы каруанға ҡушылып, Дәмәшеҡкә килгән. Артабан әл-Искәндәриә[1] ҡалаһына етеп, унан диңгеҙ юлы менән тыуған иле Италияға ҡайтып китергә ниәтләгән.

Сәйях вә ғалим булараҡ, ул бер нисә сит телдә, йөмләнән ғәрәпсә, фарсыса иркен һөйләшә. Айырыуса ғәрәп теленә ғашиҡ. Ике һүҙҙең береһендә тигәндәй: "Ғәрәп теле — фән, ғилем теле ул", — тип ҡабатларға ярата, быны миҫалдар менән нығытып ҡуя.

Әл-Искәндәриәлә каруан ялға туҡталды. Шағир, ошонан файҙаланып, боронғо ҡаланы күреп әйләнергә уйлағас, Аурело уның теләген күтәреп алды.

— Мин бында элек тә бер нисә тапҡыр булғайным, ҡала менән һәйбәт танышмын, — тип бергә йөрөргә ризалашты.

— Рәхмәт, Аурело! Ҡайһылай ундым, һинең менән осрашып! — тине шағир баш эйеп.

Ә теге берәй ҡомартҡы тураһында мауығып һөйләй-һөйләй ҙә тағы, яйын табып, ғәрәптәргә әйләнеп ҡайта:

— Төҙөләш эшендә, үҙеңә мәғлүм, хисап, мөхәндислек[2] ғилеме алдан йөрөй. Был өлкәлә ғәрәптәрҙең хеҙмәте ҙур. Бынан тыш шиғриәт ҡанундары, музыка белеме уларҙа нык үҫешкән. Фәлсәфәне әйтергә лә түгел. Миҫалға, Ибн Рушд[3], Аристотель әҫәрҙәренә изаһ биреп, боронғо бөйөк фәйләсуф фекерҙәрен яңы заманға яҡынайтты. Әйткәндәй, Ибн Рушд Аурупала Аверроэс тип исемләнә, ә Аристотелде ғәрәп, фарсы фәнендә Аристу тиҙәр.

— Ә хәҙерге көндәрҙә ғәрәптәрҙең ҙур ғалимдары бармы? — тип Сәйфтең һорауына:

— Бар, ниңә булмаһын! — тине Аурело, күҙен йылтыратып. — Бына шуларҙың береһе, иң данлыҡлыһы. Исеме Ибн Һалдун[4] уның. Фәйләсуф, тарихсы. Әҫәрҙәре менән танышмын, әммә үҙен күрергә насип булманы әле. Ә һин, бәлки, күрерһең, Ҡаһирәгә йыш килеп йөрөй тиҙәр уны. Асылда, мәғриб илдәрендә, башлыса тыуған иле Тунисияла йәшәй.

Өс көндән каруан Ҡаһирәгә юл тотасаҡ, ә Аурело ултыраһы карап иртәнән һуңға уҡ ҡуҙғалаһы икән. Шуға күрә ул, һис юғы, бер-ике иң иҫтәлекле тарихи урынды тамаша ҡылырға тәҡдим итте.

Ундай ҡомартҡыларҙың береһе Кайт-Бей ҡәлғәһе ине. Был ҡорылма диңгеҙ эсенә үк инеп торған тар ғына ярымутрау кеүек ер боҫҡағын биләй.

— Кайт-Бей яңы заман ҡоролмаһы, — тип аңлатты ғалим. — Ул

---

[1]Әл-Искәндәриә (Александрия) — Нил йылғаһы тамағында Урта диңгеҙ ярында ултырған ҡала.

[2]Мөхәндис — төҙөләш белгесе, инженер-архитектор. Мөхәндислек — төҙөләш ғилеме.

[3]Ибн Рушд (Әбу-л-Вәлид Мөхәммәт Ибн Әхмәт Ибн Рушд; европаса Аверроэс, 1126-1198) — ғәрәп-испан философы. Шәреҡтә Аристотель тәғлимәтен пропагандалаған, уға ҙур күләмле аңлатмалар яҙған.

[4] Ибн Һалдун (Әбд әр-Рахман Әбү Зейд ибн Һалдун, 1332—1406).

элекке маяҡ нигеҙендә төҙөлгән. Ә маяҡ, урынының ҡулайлығы, бейеклеге, мөһабәтлеге арҡаһында, борон ер йөҙөндәге ете мөғжизәнең береһе иҫәпләнгән. Уның уттарын алыҫтан уҡ күреп, диңгеҙ карапта ры, юлдан яҙлыҡмайынса, имен-аман үтеп китер, ә ошо боғаҙҙағы туҡталышҡа ингәндә һыу аҫты таштарына бәрелеүҙән, ҡомға ултырыуҙан һаҡланыр булған.

— Ҡайҙа һуң ул маяҡ? — Сәйфетдин тирә-йүнгә аптырабыраҡ күҙ йөрөттө. — Бик кәрәкле булған бит.

— Эйе, күп илдәрҙең диңгеҙсел әре күргән уның хәсиәтен. Шуға күрә ете мөғжизәнең береһе тип танылған да... — Аурело үкенгән төҫтә ҡулдарын йәйеп ебәрҙе. — Йәл, боронғо заманда уҡ ҡот осҡос көслө зилзилә ваҡытында диңгеҙгә ауған ул.

— Эйе, ысынлап та, йәл. Боронғо заманда уҡ, тиһең. Улайһа ҡаланың йәше лә бер нисә быуаттыр, ә? — Шағир Кайт-Бей ҡәлғәһенең салт-зәңгәр көмбәҙҙәренә, күккә үрләгән бейек манараларына һоҡланды.

— Бер нисә быуат?! — Ғалим көлөп ебәрҙе. Үҙ байлығы йә уңышы менән маҡтанған һымаҡ, теҙеп китте: — Боронғо тарих китаптарында әйтелгәнсә, әл-Искәндәриә, аурупаса — Александрия, беҙҙең ваҡыт иҫәбенә тиклемге 332 — 331 йылдарҙа нигеҙләнә. Тимәк, бер мең дә ете йөҙ йыл йәшәй. Ун ете быуат, хөрмәтле әфәнде!

— Быны күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын...

— Шулай... Заманында күп тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгендә тора ул. Бер мәл Мысырҙың башҡалаһы була, аҙаҡ Рим дәүләтенә, унан Византияға буйһона, ә етенсе быуатта бөтә ил менән бергә ғәрәптәр тарафынан яулап алына.

— Ҡара әле, Аурело, һин бит ниндәйҙер ете мөғжизә булған тигәйнең. Тағы алтыһын да әйт... әгәр белһәң, — тине шағир.

— О!.. Улары ла таң ҡалырлыҡ гүзәл булған, ләкин юҡтар инде. Ваҡыт аямаған береһен дә. Бына , тыңла... Иң боронғоһо — Мысыр пирамидалары. Шәреҡтә улар әһрам тип атала. Ҡайһылары тамам емерелеп бөтмәгән әле, үҙең күрерһең. Ә бүтәндәренең хатта харабалары ла һаҡланмаған... — Мауығып китеп, ғалим Семирамиданың (йәғни Шаммураматтың) Бабыл ҡалаһындағы “аҫылмалы” баҡсалары, Зевс, Гелиос һындары, Артемида ғибәҙәтханаһы, Галикарнастағы ҡорам тураһында һөйләргә кереште. Шуныһы ҡыҙыҡ: был ҡомартҡыларҙы ул үҙ күҙе менән күргән тиерһең. Шул тиклем һоҡланып, ентекләп тасуирланы.

Бынан аҙаҡ улар әл-Искәндәриәнең бүтән иҫтәлекле урындарын ҡарап әйләнделәр. Юламсы ғалим менән осрашыуына шағир ҡыуанып бөтә алманы. Берҙән, ул ышаныслы, ярҙамсыл юлдаш булды; икенсенән, үҙе күргән илдәрҙең тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре, көнитмеше хаҡында әллә күпме хәбәр һөйләп, Сәйфетдиндең зиһенен байытты.

Сәфәр ваҡытында тамам дуҫлашыуҙары арҡаһында, улар бер-береһенә хәйерле юл, тормоштарында бәхет-сәғәҙәт, уңыш теләп хушлаштылар.

Аурело үҙенең тыуған иленә ҡайтып китте. Шағир иһә иртәгәһенә үк “үзгә йортҡа” юлланды.

Бына, ниһайәт, оҙайлы сәфәрҙең аҙағы. Иҙел буйҙарынан ҡоштар осоп етмәҫ алыҫта ятҡан, ожмахтай хозур булып Сәйфетдиндең төштәренә кереп саҡырған Мысыр иле, мәшһүр Ҡаһирә ҡалаһы. Ни көтә шағирҙы яҙмышының ҡырҡа боролошонда? Табылырмы уға яҡты йөҙ күрһәтерҙәй, изге күңелле инсандар?..

## 5

Сәйфтең Сарайҙан китеүен Аҡъял хажи ике аҙна уҙғас ҡына белде. “Айыу өңө”нән ҡайтарылғас, берәй аулаҡ ерҙә яҙышып ултыралыр тип, уны ҡаланың бөтә биҫтәләрен аралап эҙләнеләр. Табылманы шағир. Аптырағас, Олуғ әмир уның тыуған ауылына егерме кешелек алай ебәрҙе. Сәйф унда ла юҡ ине.

Нисек тә табырға кәрәк ине уны, сөнки ул “Айыу өңө”нә ҡабат алып барылырға тейеш. Әгәр ҙә ҡалаға

ҡайтҡас ханға арнап дастан йә, һис юғы, мәдхиәме, ҡасидәме яҙып өлгөрһә, Аҡъялдың үҙенең дә йөҙө яҡты булыр ине лә баһа. Ни өсөн тигәндә, хан уның һүҙен тыңлап шағирҙы иреккә сығарырға күнгәйне.

"Үҙ һүҙле кеше инде был Сәйф. Эҙ яҙҙырып, берәй-яры сығып киткән булһа, бының шойҡаны миңә", — тип тамам ҡайғыға ҡалды Олуғ әмир.

Ни уйлаһаң, алдыңа шул килер, тигәндәй, шағирҙы эҙләргә ҡуйылған алайҙың йөҙбашы инеп ишек төбөндә тубыҡланды ла:

— Аҫ, киҫ, Олуғ әмир! Һин табырға бойорған кемһә юғалды, — тип хәбәр итте.

— Нисек юғалды? Юғалғанын күреп торҙоңмо ни? Һөйлә! — тине Аҡъял. Асыуын баҫа алманы: — Мөртәт! — тип екерҙе.

— Кисер, гәли йәнәп, ул кеше бынан ике аҙна элек үк, урыҫтарҙан ҡайтып килеүсе фарсы сауҙагәренең карабына ултырып, Иҙел түбәненә киткән. Туҡталышта йөк тейәүселәрҙән бер-икеһе уны сырамытып өлгөргән икән. Шулар һөйләне.

— Һүҙең бөттөмө? — Күтәрелеп ҡарарға баҙнат итмәйенсә, башын эйеп ултырған йөҙбашын яғаһынан маҡып алды Аҡъял хажи.

— Юҡ... Олуғ әмир... — тип тотлоғоп яуап бирҙе хәбәрсе. — Уны... беҙ эҙләгән кешене бер егет оҙатып ҡалған. Дәрүиш шикелле...

— Аңлашылды! Бар, хеҙмәтеңдә бул, артабан ни ҡылырыңды ҡараул төмәненең әмире әйтер, — тип бойорҙо Аҡъял.

Йөҙбашы, сепрәктәй ағарынып, ике ҡулын күкрәгенә баҫып, эйелә-эйелә сығып киткәс, Олуғ әмир әҙ генә уйланып торҙо ла ҡыңғырау шылтыратты.

— Тыңлайым, гәли йәнәп! — тине йүгереп килеп ингән урта йәштәрҙәге кеше, Аҡъял хажи һарайының идарасыһы.

— Бойор, миңә ат әйәрләһендәр, һыбай нәүкәрҙәр ҡапҡа төбөндә көтөп торһон!

— Баш өҫтө, Олуғ әмир!

Аҡъял хажи, бүтән мөһим эштәрен кисектереп, ханаҡаға барырға, Абрар шәйехте күреп һөйләшергә булды. Сәйфте карапҡа дәрүиш ултыртып ебәргәс, бының шәйех ярҙамында эшләнеүенә шиге юҡ ине Олуғ әмирҙең.

Шәйех менән һирәк осраша ул. Үтә сетерекле хәлдәр тыуғанда ғына уның хәбәрҙәренә таянып эш иткәне бар. Алыҫ-яҡын илдәрҙә ҡарт дәрүиштең тарафдарҙары күп. Урҙа йөргөнсөләре белмәгәнде шулар белә икән. Бер үҙәнгә ағылған инештәр кеүек, хәбәрҙәр урау-урау юлдар менән Абрар шәйехкә килеп етә лә. Ҡарт дәрүиш уларҙы усына йома, кәрәгенсә генә эшләтә. Ошоно күҙ уңында тотто ла Аҡъял хажи, ханаҡаға барырға уйлағас.

Байрам ашы — ҡара-ҡаршы тигәндәй, уның үҙенең дә Абрар шәйехкә ярҙам иткәне бар. Һис кемгә һиҙҙермәй генә ханаҡаны төҙөкләндерергә аҡса бүлһенме, ҡараҡтарҙан һаҡларға йәшерен шымсылар ҡуйһынмы...

— Хуш килдең, хөрмәтле хажи! — тип йылмайып ҡаршы алды уны ҡарт дәрүиш, сәләмгә яуап биреп битен һыйпағас. — Мәғлүм ки, был фәҡир йортто һинең кеүек арҙаҡлы түрәләр урап үтеүсән...

— Алыҫтан кәртәләйһең, тәксир. — Аҡъял, ҡашын төйөп, хужа ымлап күрһәткән тәпәш ултырғысҡа ултырҙы.

— Фани донъя менән иҫәп-хисабы юҡ ханаҡаға илтифатың тип аңларғамы һинең килеүеңде?

— Шулай уйларға ла мөмкин, эйе. Йәнә... юғалған бер ептең осо һинең ҡулдалыр, тигән фаразым бар, тәҡсир.

— Аб-ба! Кем уйлаған юғары мансаблы дәүләт ағутаһының беҙҙә йомошо барҙыр тип?! — Шәйех кет-кет көлөп ҡуйҙы, ҡулындағы тиҫбене ҡуйынына тыҡты.

Ваҡыты тығыҙ ине Олуғ әмирҙең. Кисектергеһеҙ эштәрен күңеленән барлап:

— Ишетеүемсә, миңә... юҡ, бөйөк ханыбыҙға, кәрәкле кеше ошо йорттан сығып киткән икән, — тип тура ярҙы.

— Аңлатыбыраҡ һөйлә, — тине шәйех.

— Аңлайһың, аңлайһың, ҡария! Һүҙ мәшһүр шағирыбыҙ Сәйф Сараи хаҡында. Ҡайҙа оҙаттың уны? Быны, әйткәнемсә, хан белергә теләй.

— Шағир — ирекле ҡош, хөрмәтле хажи. Уны мин дә, һин дә бер ҡайҙа ла оҙата йә бикләп тота алмайбыҙ. Бүтән ҡәләмдәштәре эҙенән Мысырға юлланманымы икән ул?

— Рыяланма, тәҡсир! — тине Аҡъял асыуын баҫа алмайынса. — Әгәр ҙә был ғәмәл һинең ярҙамыңда ҡылынған булһа, хәлең мөшкөлгә төшөр.

— Эй, Олуғ әмир! Көнөң дәрүиштәр менән ҡарыулашырға ҡалғас, үҙ хәлең дә маҡтанырлыҡ түгел, ахырыһы. Ә мин ҡурҡыуҙан үткәнмен инде. Әхирәт ҡапҡаһына етеп киләм. Ни күрһәм, Аллаһы тәғәләнән...

— Шуны ла онотма, хөрмәтле шәйех, Аллаһы тәғәлә, һаҡланғанды һаҡлармын, тигән.

— Һүҙең раҫ! Шуны уйлап, донъялыҡтағы бөтә мәнзилемде намаҙлыҡ өҫтөндә үткәрәм мин. Һеҙҙең өҙөш-тартышығыҙҙа эшем юҡ! — тип ҡәтғи яуап бирҙе ҡарт дәрүиш.

— Эшем юҡ, имеш! Һинең күҙеңә салынмаған ниндәйҙер хәл бармы икән әле Сарайҙа? — Аҡъял хажи ишеткәненән артыҡты белә алмаясағын аңланы. — Тимәк, шағирҙың ҡаланан китеүенә иҡрарһың?.. Ҡара уны, тәҡсир. Бынан аҙаҡ абайлабыраҡ атла! Юғиһә өлкән ханзадалар, бигерәк тә Йәләлетдин, һине өнәп бөтмәй.

— Ҡайһыһылыр урыҫтарға ҡасҡан тиҙәр бит уларҙың, дөрөҫ булһа? — тине шәйех көлөмһөрәп. — Аңлашыла ки, фәҡиренде һағалаған хәүефтең береһе юғалған икән.

— Ярай, иҫкәртеүемде онотма, һаҡланыңҡыра! Изге ғәмәлдәрең янында яҙыҡтары ла юҡ түгел. Ҡабул итһәң, бер кәңәш... Башың һау саҡта Сарайҙан китергә тырыш.

— Бәлле, хажи! — тип шәйех һаҡалын һыйпаны. — Быны үҙем дә уйлап йөрөй инем әле. Һуғыш сығырға торғанда, тынысыраҡ ерҙә йәшәү хәйерле.

— Әйтәм бит, белмәгәнең юҡ һинең! Кәңәшем өсөн, минең именлеккә доға ҡыл, тәҡсир. Ә юлға төйнәнгәс, хәбәр ит. Ҡайҙа китһәң дә, сәфәреңдең хәүефһеҙлеген хәстәрләп, оҙатып ҡалырмын...

Серҙең сиселеүе эшкә асыҡлыҡ индермәһә лә, шәйех менән осрашыуға ҡәнәғәт ине Олуғ әмир. Һәр хәлдә, ханға хисап бирерлек анығ хәбәре бар. Ҡарт дәрүишкә илтифат күрһәтеү ҙә урынлы булды. Алтмыш йәшкә етеп килгәндә, баҡый донъя тураһында уйланмай хәле юҡ ине Аҡъялдың үҙенең дә.

* * *

Ханаҡанан ҡайтыуына уны Йәләлетдин ханзада көтөп торған. Исем өсөн генә тигәндәй сәләм биргәс, ҡулындағы ҡамсы менән итек ҡуңысына шап-шоп һуғып:

— Эй, Олуғ әмир! Дәрүиштәр йорто һин барып йөрөй торған ерме ни инде? — тип иренен бөрөштөрөп көлдө. — Ҡарамаҡҡа, фәҡирлектә көн итеп, тәҡүә булып ҡыланһалар ҙа, ике йөҙләләр улар.

— Яңылышаһың, ханзада! — Аҡъял хажи үкенгән төҫтә баш сайҡаны. — Тәҡүә булып ҡыланмай улар. Дәрүиштәр — фани донъя ҡыуаныстарынан ваз кискән Алла бәндәләре...

Йәләлетдин һаһылдап көлөп:

— Алла бәндәләре? — тип ғәжәпләнеү белдерҙе. — Ханаҡа — шымсылар ояһы, Аҡъял ағай. Туҙҙырырға кәрәк уны! Ә Абрар шәйехте бөтә эйәрсендәре менән бергә илдән һөрөргә!..

— Туҡта, ханзада, гонаһлы булма, туҙға яҙмағанды һөйләп! Һөрөргә түгел, ярлыҡарға кәрәк дәрүиштәрҙе. Кем ки изге динебеҙ юлындағы кешегә хөрмәт күрһәтһә, шул сауаплы булыр... — Йәләлетдиндең башы эйелеүенә иғтибар итеп, Олуғ әмир өгөт-нәсихәттән етди һүҙгә күсте. — Тыңлайым. Моғайын, йомошһоҙ килмәгәнһеңдер? Тартынма, әйт, аҡса кәрәкме?

— Кәңәшләшергә ине. Бер эш сығып тора... Ә аҡсаға килгәндә... эйе... һәр ваҡыт кәрәк инде ул, — тине ханзада, тамағын ҡылтылдатып.

— Уйлашырбыҙ. Тәүҙә кәңәшләшәһе ғәмәлеңде уртаға һал.

— Төнәгөн "Айыу өңө"ндә булғайным. Атайымдың... эйе... бөйөк ханыбыҙҙың кәйфиәте төшөнкө, Аҡъял ағай. Ике һүҙҙең берендә:

“Һуғыш сығырға тора... Ғәскәр, ғәскәр”, — тип ҡабатлай ҙа ултыра. Аптырағас: “Әллә башҡалаға ҡайтаһыңмы? Һис юғы, ҡарауыл төмәнен күрер инең. Бәлки яу уйыны үткәрербеҙ”, — тигәйнем, әҙерәк теремекләнеп китте. “Олуғ әмиргә әйт, төмән әмиренә бойорһон был эште!” — тип күтәреп алды алыуын, ләкин тағы бер йомош өҫтәне.

— Хәрби уйындар ҡарауыл төмәненә генә түгел, бөтән ғәскәрҙәргә лә зарур, ханзада. Был ниәтең бик тә аҡыллы. Эшләрбеҙ! — тине Олуғ әмир. Йәләлетдинде маҡтап ҡуйыу артыҡ түгел ине. — Ә ниндәй йомош ҡушты тағы бөйөк хан?

— Әллә инде, зиһене аймылышамы тиһәм... Ғәскәрҙең дә, Сарай халҡының да ҡотон осорорлоҡ дәһшәтле тамаша кәрәк икән уға. “Күрһендәр хан хакимлығының ҡеүәтен, дошмандарға аяуһыҙлығын!..” — ти.

— Аңламайым, ханзада. Ниндәйерәк тамаша һуң ул? — Аҡъял хажи ғәжәпләнеүен йәшерә алманы, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.

— Үҙәк майҙанда, бөтөн халыҡты йыйып, бер-ике енәйәтсене язаларға кәрәк, имеш.

— Уф, Алла! — тип Аҡъял хажи ике усы менән яңаҡтарын ҡыҫты. — Яу ҡубырға торғанда, был ваҡытһыҙ саранан халыҡ ханға һырт бирәсәк тә баһа! Киреһенсә, ҡанлы тамаша түгел, әҙме-күпме еңеллек, берәй ташлама кәрәк халыҡҡа! Әйтәйек, сауҙа әһеленә, һөнәрселәргә ҡуйылған һалымды саҡ ҡына кәметеп булыр ине.

— Ханды быға һин генә күндерһәң күндерерһең, Олуғ әмир. Ҡурҡмаһаң инде. Үҙең беләһең, ул алдына алғанынан ҡайтауылларға яратмай.

— Шәйхелислам менән һөйләшермен. Хан уның һүҙен йыҡмаҫ, моғайын?

Йәләлетдин өндәшмәне, ҡамсы менән итеген тәпәләй-тәпәләй, ишекле-түрле йөрөргә кереште.

Аҡъял хажи иһә уйланды-уйланды ла шундай фекергә килде: әгәр ҙә хандың ҡан көҫәүен туҡтатырға, баҫырға мөмкин булмаһа, был хәтәр бурыс уға түгел, ханзада иңенә төшөргә тейеш. Үҙенең рәсми вариҫына ҡул күтәрмәҫ хан, ә тегеләй...

— Былай итһәк, Олуғ әмир... — тип Йәләлетдин уның фекерен бүлдерҙе. — Иң тәүҙә ҡарауыл төмәне хан алдынан саф-саф булып уҙыр. Яугирҙәрҙең аттары, эйәрөпсөнө, ҡорал-ярағы, өҫ-башы янып торор. Был яғын үҙем хәстәрләрмен.

— Мәғҡул! — тине Аҡъял, уға күтәрелеп ҡарап. — Ә унан аҙаҡ?..

— Сарайҙың көнтыуышындағы киң уйһыуҙа һуғыш уйыны уҙыр. Шул уҡ ваҡытта ҙур-ҙур ҡаҙандарҙа ит бешә торор, майҙан ситенә ҡырҡ-илле арбала нан ташылыр. Хан исеменән ҡала халҡына һый биреләсәк. Һәйбәт бит, ә!

— Һәйбәт кенәме! Әкиәттәге кеүек был тоҫмалың. Тимәк, ханға күрһәтәсәк тамашаң шул буламы инде? — тип Олуғ әмир көлөп ҡуйҙы.

— Быныһы тамашаның икенсе өлөшө. Ә унан алда... — Ханзада тотлоғоборақ уйын уртаға һалды. — Зинданда ҡамалып ятҡан енәйәтсе күп. Шуларҙың бер-икеһен язалау артыҡ ҙур гонаһ булмаҫтыр...

— Әлхасил, эшкә тотонайыҡ улайһа! Бөгөн һуң инде. Иртәгә төмән сардарын, мең әмирҙәрен диванханаға саҡыр. Был бер. Мин иһә йәстү намаҙы үтеү менән шәйхелислам хәҙрәттен хәлен белергә барырмын. Сырхаулап тора икән... Икенсенән, ҡарауыл төмәненең әхүәленә ҡарап, тамашаның көнөн тоҫмаллап, бөйөк ханыбыҙҙың ризалығын ал...

*(Аҙағы киләһе һанда)*